*✓Әгәр ҙә кеше үҙенең хәле менән ҡәнәғәт түгел икән, уны үҙгәртеү өсөн ике генә әмәле бар: йә ул тормош шарттарын яҡшыртa, йә үҙенең күңел торошон яҡшы яҡҡа көйләй. Беренсеһе өсөн мөмкинлектәр һәр ваҡытта ла булмаҫҡа ла мөмкин, икенсеһе өсөн мөмкинлектәр мотлаҡ табыла.*

*Ральф Эмерсон.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

26 АПРЕЛЬ - 2 МАЙ (АЛАҒАРАЙ - ҺАБАНАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№17 (591)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Ауыҙҙан өҙөп биреү...**

борондан ҡалған йола



4

**Башҡорт телебеҙ үлмәҫ...**

башҡорт үҙе телен күммәһә



6

**Эшҡыуарлыҡты ауыҙлыҡлау һәләтем...**

аҫау айғырҙы меңгәгә өйрәтеүҙән башланды



8-9

**Милләтте һауыҡтырырҙай...**

уйын ҡоралы "Арғымаҡ"та



10-11

14 ТВ-программа


*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Республикала үткәрелә килгән "Айыҡ ауыл" конкурсын дауам итергә кәрәк тип иҫәпләйһегеҙме?

***Илһам ИМАЕВ, Иглин районы Үктәй ауыл хакимиәте башлығы:*** "Айыҡ ауыл" конкурсы халыҡты айыҡ тормошҡа ҡайтарыу юлында башҡарылған һәм башҡарыласаҡ оло эштәрҙең башы. Был конкурста ҡатнашыусы һәм 2013 йылда еңеп сығыусы ауыл хакимиәте етәксеһе булараҡ, артабан да уны мотлаҡ дауам итергә кәрәк, тип иҫәпләйем, сөнки конкурс йәмғиәткә бар яҡтан да тик ыңғай тәьҫир итә. "Айыҡ ауыл"ға ҡушылғандар "Беҙ айыҡ тормош алып барабыҙ" девизы менән йәшәй һәм эшләй, шуға күрә улар бөтә сараларҙы ла спиртлы эсемлек ҡулланмайынса ғына уҙғара. Шулай уҡ конкурс сиктәрендә халыҡҡа алкоголдең зыяны хаҡында лекциялар уҡыу, улар менән ошо темаға әңгәмәләр уҙғарыу, ауыл йыйылыштарында сығыштар яһау мөмкинлеге лә арта. Конкурста ҡатнашыу көрәш һәм ярыш дарманын арттыра. Алдарында торған изге маҡсатты тормошҡа ашырыу өсөн халыҡ төрлө юлдар һәм ысулдар эҙләй һәм, ахыр сиктә, ниәтенә өлгәшә. Конкурста ҡатнашыу инициативалы төркөм ағзаларының аралашыу даирәһен арттыра, уларҙы төрлө әҙәбиәтте уҡырға этәрә, башҡаларҙың тәжрибәһен күреп, үҙ эшмәкәрлегендә ҡулланырға, слет, конференцияларҙа ҡатнашырға булышлыҡ итә. Ошо рәүешле улар эскелек, тәмәке тартыу, наркомания кеүек проблемаларҙы яҡшыраҡ аңлай башлай һәм, үҙ сиратында, ауылдаштарына ла был мәсьәләләр хаҡында төплөрәк итеп һөйләй, аңлата, төшөндөрә.

Тағы ла шуныһы. Ҙур бер ғаилә кеүек йәшәгән ауыл халҡын был конкурста ҡатнашыу тағы ла нығыраҡ берләштерә. Айыҡ тормош алып барыусылар "йәшел йылан" ҡотҡоһона бирелгән ауылдаштарына иҫкәрмәләр яһай, иҫерткес эсемлекһеҙ йәшәүҙең матурлығын аңлатырға тырыша. Шул уҡ ваҡытта айыҡлыҡ юлына баҫҡандарҙан аҫтыртын көлөү, мыҫҡыллау күренештәре лә бар, ләкин ундайҙарҙың да тирә-яҡтағыларҙың матур тормошона ҡарап, эскелек тотҡононан ҡотолорға үҙҙәрендә көс табыуына ышанам, сөнки яҡшы миҫал "тиҙ йоғошло" ул. Күмәкләп көс һалғанда эскелек менән бергә үрелеп килгән битарафлыҡ, аңһыҙлыҡ, бар нәмәгә ҡул һелтәп ҡарау, иртәгәһен уйламай, бөгөнгө көн менән генә йәшәү кеүек күренештәр юҡҡа сығасаҡ, тип өмөтләнергә урын бар. Иң мөһиме - ярты юлда туҡтап ҡалмаҫҡа.

***Буранбай КҮСӘБАЕВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары:*** Айыҡлыҡ та, "Айыҡ ауыл" тигән конкурстар ҙа халҡыбыҙҙың йәшәү рәүешенә әйләнеп ҡайтырға, яңынан тамырланырға тейеш. Халыҡ эскелек арҡаһында упҡын ситенә килеп терәлеүебеҙҙе, унан бары тик айыҡлыҡ өсөн көрәшкә дәррәү күтәрелеп кенә ҡотола аласағыбыҙҙы яҡшы аңлай. "Айыҡ ауыл" конкурстары һөҙөмтәһе лә быны раҫланы бит инде. Эскән, эскелекте бик-бик яҡын күргән кешене айыҡтырыу бик ауыр икәнен беләбеҙ, тотош ауылды тиҙ генә был бәләнән йолоп алып булмаясағын да аңлайбыҙ. Әммә бындай конкурстарҙың, айыҡлыҡ өсөн көрәштең төп маҡсаты - балаларҙы, йәштәрҙе ошо насар ҡылыҡтан һаҡлау, йәш быуындың ағыуланыуына юл ҡуймау бит. Шуға ла быйыл йыл башынан "Айыҡ ауыл -2014" конкурсына ҡушылырға теләүселәрҙән бик күп мөрәжәғәттәр, шылтыратыуҙар ҡабул иттек. Шуға ла ошо көндәрҙә Башҡортостан Хөкүмәте ҡарарын көтөп тормайынса, республика райондары һәм ҡалалары хакимиәттәренә "Айыҡ ауыл - 2014" конкурсы положениеларын ебәрҙек һәм унда ҡатнашыуға әҙерлек эштәрен башларға саҡырҙыҡ. Әле Хөкүмәттә был конкурс тураһындағы документтар ҡарала, рәсми раҫлау көтәбеҙ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# БЕР ТӨҪТӘ СЫҠҺА ЛА...

## иғтибарҙы йәлеп итә

**"Киске Өфө" тәү сиратта башҡа гәзиттәрҙән тәрән фәлсәфәһе, ваҡиғаларҙы төрлө яҡлап яҡтыртыуы менән айырылып тора. Шуға күрә, ил, донъя хәлдәренә, йәмғиәттәге актуаль проблемаларға милләттәштәрҙең ниндәй фекерҙә булыуын, замандаштарҙың ҡарашын белергә теләгән осраҡта, аҙнаһына бер тапҡыр "Киске Өфө" гәзитенә мотлаҡ күҙ һалырға кәрәк.**

Гәзит оло быуын кешеләре һәм йәштәр араһында фекер, фәһем, аҡыл, тәжрибә уртаҡлашыу күпере ролен үтәй кеүек. Сөнки "Киске Өфө"лә арҙаҡлы ғалимдар, зыялылар, ағинәйҙәр фекере менән бергә, бөгөн уңыш ҡаҙанған егет һәм ҡыҙҙар, матур-матур йәш ғаиләләр, фекерле йәш быуын кешеләре тураһында мәҡәләләр ҙә урын ала.

Шулай уҡ хәҙерге мәғлүмәт баҙарын тултырған төрлө сыбар-сыбар гәзит-журналдар араһында традицион бер төҫ менән генә баҫылып сыҡҡан "Киске Өфө"нөң дизайнын да юғары баһалар инем. Фотоһүрәттәр, материалдарҙы урынлаштырыу тәртибе, биҙәлеш - бөтәһе лә гәзит уҡыусының иғтибарын йәлеп итерлек, ҡыҙыҡһындырырлыҡ булыуы менән отошло.

**Айнур ХУЖӘХМӘТОВ,**
**БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетының фән буйынса декан урынбаҫары.**



## Республикала үткәрелә килгән "Айыҡ ауыл" конкурсын дауам итергә кәрәк тип иҫәпләйһегеҙме?

(Башы 1-се биттә).

**Айгөл АЙЫТҠОЛОВА, шағирә, Күгәрсен районының "Моразым" гәзите журналисы:** Айыҡлыҡ - беҙҙең йәшәү рәүеше булырға тейеш. Халыҡты эскелектән ҡотҡарыу маҡсатынан конкурс үткәреүгә тиклем үк барып етеүебеҙ ҡыуаныслы хәл түгел, әлбиттә, ләкин милләтебеҙ, киләсәгебеҙ, балаларыбыҙ һау булһын тиһәк, мотлаҡ рәүештә айыҡлыҡты мөмкин тиклем йышыраҡ пропагандаларға кәрәк. "Айыҡ ауыл" конкурсы был йәһәттән ҙур этәргес булып тора һәм ул туҡталып ҡалмаҫҡа, артабан да әлегә тиклем булған көс-ҡеүәт менән дауам ителергә тейеш, тигән фекерҙәмен. Конкурс бар йәһәттән дә хуплауға лайыҡ. Республика халҡы бер-береһенән күреп, иҫерткес эсемлектәр булмаған яҡты тормошҡа ынтыла. "Ана, теге районда, ауылда эсмәйҙәр бит, ни өсөн беҙ үҙ һаулығыбыҙға, киләсәгебеҙгә төкөрөп ҡарарға тейешбеҙ?" тип уйлаусылар һәм эсеүҙән баш тартыусыларҙың көндән-көн, йылдан-йыл арта һәм артабан да шулай буласағына ышанам. Ҡыҙғаныска ҡаршы, эскелек күберәк ауыл халҡын ялмап алған. Эшһеҙлеккә һылтанып, үҙҙәрен йәмғиәткә кәрәкһеҙ итеп тойоп, эскелек һаҙлығына бата улар. Ошондай уйҙарҙы юҡҡа сығарыу, кешелә ышаныс арттырыу кәрәк. Был йәһәттән шулай уҡ "Айыҡ ауыл" конкурсы сиктәрендә оло эштәр башҡарыла һәм артабан да быны дауам итеү мөһим.

Конкурстың тағы ла бер әһәмиәтле үҙенсәлеге - ул конкурста ҡатнашыусы төбәктәр активистарының ауылдарҙа иҫерткес эсемлектәрҙе һатыуҙан алдырыуға өлгәшеүе. Был үҙе үк оло еңеү. "Айыҡ ауыл"да ҡатнашырға теләк белдергән һәр ауыл ошо юлды дауам итһә, күпме кешенең ғүмере һаҡланып ҡаласаҡ, күпме бала тулы ғаиләлә үҫәсәк. Шулай уҡ иҫерткес эсемлектәрҙе етештереүселәр менән дә ҡаты һөйләшеү һәм уларҙың кәсебен төбө-тамыры менән юҡ итеү - конкурстың тағы ла бер мөһим аспекты. Ғөмүмән, "Айыҡ ауыл" - республика сиктәрен үтеп, Рәсәй кимәленә сыҡҡан конкурс булараҡ артабан да Хөкүмәтебеҙ кимәлендә рәҫлау табыр, тип ышанам.

Айыҡлыҡ - ул иҫерткес эсемлектәр эсмәү генә түгел, айыҡлыҡ - ул иманға ҡайтыу. Йәмғиәтте айыҡ тормошҡа ҡайтарыуҙа динде мин иң дөрөҫ һәм йоғонтоло юл, тип иҫәпләйем. Шуға күрә конкурс барышында ошо йәһәттән дә эштәр алып барылыуы хәлҡыбыҙҙы "йәшел йылан" ҡотҡоһонан ҡотҡарыуҙың һөҙөмтәле бер юлы буласағына шигем юҡ.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ



**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

### ТАЛАП ҠУЙЫРҒА ӨЙРӘНӘЙЕК

**Фирҙәүес БӘШИРОВА, Татарстан Республикаһы Башҡорт милли-мәҙәни автономияһы етәксеһе, БР Яҙыусылар союзы ағзаһы:** Бөтөн илдә, Ер йөҙөндә барған үҙгәрештәр уйланырға мәжбүр итә. Милләттәштәрем был процестарға битараф булмаҫҡа, киреһенсә, уларҙы үҙ мәнфәғәтендә ҡулланып ҡалырға ашығырға тейеш. Мәҫәлән, күптән түгел Ҡырымдың Рәсәй Федерацияһына ҡушылыуын ғына алайыҡ. Был процесс Рәсәйҙә "ваҡ халыҡтар" тип аталған күп милләттәр өсөн уғата әһәмиәтле, фәһемле ваҡиға булды бит. Ошо бәләкәй генә территорияла йәшәүсе, һан яғынан да күп булмаған халыҡ үҙ мәнфәғәттәрен Рәсәй алдында шундай итеп ҡуйҙы - Хөкүмәт уларҙы һис һүҙһеҙ үтәргә ҡарар итте.

Был демократик башланғыс, Ҡырымда үткән референдумдағы асыҡлыҡ бөтөн Рәсәйгә таралырға тейеш. Юғиһә, беҙ ошо дәүләт составында йөҙәр йыл йәшәп тә, талаптарҙы ҡәтғи ҡуя алмайынса, ҡурҡытылып йәшәйбеҙ. "Ваҡ" халыҡтарға ла үҙ мәнфәғәтен хәстәрләргә, шарттарын дөрөҫ ҡуйырға өйрәнергә ваҡыт.

### МАҢҠОРТ БУЛМАЙЫҠ

**Мөҙәрис БАГАЕВ, Ишембай районының "Торатау" гәзите журналисы, БР һәм РФ Яҙыусылар союздары ағзаһы:** Башҡорттоң асылы - уның телендә, ғөрөф-ғәҙәттәрендә, әҙәбиәтендә, мәҙәниәтендә. Ошо асылды халҡым юғалтмаһын ине. Ил өҫтөнә ниндәй генә ауырлыҡтар килгәндә лә, милләт мәнфәғәттәре етәкселәр тарафынан яҡлау тапмаған осраҡта ла, башҡорт башҡорт булып ҡала белһен ул. Башҡорт телен, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен, рухи ҡиммәттәрен һаҡлап ҡалыу буйынса әллә күпме закондар сығарылһа ла, башҡорт ғаиләләрендә милли уҙаң һаҡланмай, балалар туған телдә һөйләшмәй икән, ул ҡағыҙҙарҙың кәрәге булмаясаҡ. Тормошто үҙгәртер алдынан эште үҙеңдән башла, тиҙәр бит әле. Эште үҙебеҙҙән, ғаилә эсендәге мөнәсәбәттәрҙән башларға кәңәш итер инем. Балаларыңды башҡорт телендә һөйләштереп, ғөрөф-ғәҙәттәргә ярашлы рухи тәрбиә биреп үҫтереү - төп бурысыбыҙ. Ошо бурысты аңламаусылар ғына балаһына киләсәктә башҡорт теле кәрәк түгел, иң мөһиме, бөтөн ил һөйләшкән рус телен, бөтөн донъя белгән инглиз телен үҙләштерергә кәрәк, тип һанай. Баланы күрәләтә маңҡортҡа әйләндереү менән тиңләйем мин быны. Маңҡорттоң кем икәнен белеп тораһығыҙ, үҙен дә, киләсәген дә уйлай белмәй, дошман табанын ялап, ҡол хәлендә көн күреүсе әҙәм. Үҙ иркебеҙ менән үҙебеҙҙе ҡол хәленә төшөрмәйек, милләттәштәр!

**Сәриә ШӘРӘФЕТДИНОВА яҙып алды.**

## ИҒТИБАР!

### МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле етте. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана. Беләбеҙ, Рәсәй почта хеҙмәтенең гәзит-журналдарға яҙылыу хаҡын саманан тыш юғары күтәреп ебәреүе беҙҙе лә, һеҙҙе лә тетрәндерҙе. Ә шулай ҙа гәзитебеҙҙең тоғро дуҫтары, аңлы уҡыусыларыбыҙ был ауырлыҡты ла аңлап ҡабул итер, тип ышанып ҡалабыҙ.**

● Шулай итеп, 2014 йылдың икенсе яртыһына **50665** индекслы "Киске Өфө" гәзитенә **507 һум 72 тингә**, **50673** индекслыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) **537 һум 72 тингә** яҙылырға кәрәк буласаҡ. Ләкин ошо хаҡтың яртыһынан аҙы - **246 һумы** ғына беҙҙең редакция билдәләгән хаҡ булыуын да белеп ҡуйығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ.**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **336 һумға** яҙылырға була.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға **246 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **246 һум**.

● **Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу** мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы kiskeufa.ru сайтында **"Яҙылыу"** тигән төймәгә баҫып, **"Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу (534 һум 42 тин)"** һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

● Республика ҡалаларында йәшәүселәр гәзитте почтанан үҙе барып алыу шарты (до востребования) менән **382 һум 50 тингә** яҙыла ала.

● **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Апрелдә 2014 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ **"История башкирского народа"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыбыҙ 2014 йылға **"Башҡортса дини календарь"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Мәскәүҙә Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Советының һәм РФ Президенты ҡарамағындағы Советтың өҫтөнлөклө милли проекттарҙы һәм демографик сәйәсәтте тормошҡа ашырыу буйынса уртаҡ ултырышында ҡатнашты. Ултырышты Рәсәй Президенты Владимир Путин алып барҙы. Унда ауыл территорияларының тотороҡло үҫешен тәьмин итеү мәсьәләләре тикшерелде.

✓Республика парламенты депутаттары үҙ һайлау округтары мәктәптәрендә апрель аҙағына тиклем "Парламентаризм сәғәте" темаһына асыҡ дәрестәр үткәрәсәк. Тейешле тәҡдим менән законлар сығарыусыларға БР Дәүләт Йыйылышы Рәйесе Константин Толкачев пленар ултырышта мөрәжәғәт итте.

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары депутат эшмәкәрлеге менән бәйле сығымдарҙы ҡаплауға бүленгән аҡсаларҙы Ҡырымға ярҙамға күсереү тураһында тәҡдимде хупланы. Керем аҡсаларының өлөшө "Газель" микроавтобусы алыуға йүнәлтеләсәк. Автомобиль Ҡырым Республикаһының Башҡортостан шефлыҡҡа алған Белогорск районына тапшырыласаҡ, тип хәбәр иттеләр БР Дәүләт Йыйылышының матбуғат хеҙмәтенән.

✓Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы вәкилдәре эш сәфәре менән Ҡырым Республикаһының Белогорск районына барҙы. Сәфәрҙең маҡсаты - Белогорск районының һаулыҡ һаҡлау өлкәһе менән танышыу һәм артабанғы хеҙмәттәшлек булдырыу. Яҡын арала Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы Ҡырымға табиптар бригадаһы ебәрәсәк, уларҙы кәрәкле ҡорамалдар менән йыһазландырылған, ашығыс медицина ярҙамы автомобиле оҙатасаҡ.

✓Башҡортостандан Ҡырымға гуманитар йөк менән иҫәп буйынса икенсе колонна оҙатылды. Улар Белогорск районына аҙыҡ-түлек, беренсе кәрәк-яраҡ предметтарын, шулай уҡ мәктәптәр өсөн оргтехника, шул иҫәптән интерактив компьютерлы класс, музыка ҡоралдары, музей ҡорамалдары алып китте. Шулай уҡ Белогорск районына ашығыс ярҙам машинаһы, мәктәп автобусы һәм "Газель" микроавтобусы бирелә. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 75 тонналыҡ гуманитар йөк менән беренсе колонна Башҡортостандан Симферополгә 27 мартта алып барылды.

*УЯН, УЙЛАН...*

# ХӘТЕР СҮПЛӘНЕҢӘ...

## аңды томалай

**Намыҫ, аңдың томаланған сағы,**
**Хакимдарҙың һуҡыр, һаңрау сағы,**
**Ямандарҙың тамам аҙған сағы,**
**Яһилдарҙың донъя "һауған" сағы,**
**Вәғәҙәләрҙең "күктән яуған" сағы -**
**Әҙәмдәрҙең күптән яҙған сағы!..**



Тарих ул үткән йөҙ, мең йылдар ғына түгел, ул - халыҡтың үткән юлы. Кисәге көн дә - тарих! Кисәге көн дә, ниндәй генә данлы эштәргә, йәки аяныслы хәлдәргә шаһит булмаһын, тарихи дөрөҫлөктә яҙылырға тейеш! Тарихты заманға, сәйәсәткә ҡулайлаштырып маташыу - ағастың тамырын ҡырҡып, уның урынына ботаҡ ялғауға тиң. Ул ботаҡ ҡасандыр сереп, зарарлап, ағасты йығыуы ихтимал. Шуның кеүек, тарих һәм быуындар яҙмышы ҡупшылау, матурлауҙарға мохтаж түгел, сөнки бындай яһалмалыҡтан зыяндан башҡа бер файҙа ла юҡ. Һәр дәүерҙә халыҡ тарихы һәм быуын яҙмышы үҙенә күрә ҡабатланмаҫ бөйөклөккә эйә һәм оло ихтирамға лайыҡ...

Халыҡ хәтере - күп төрлө ағаслы, сәскә-үләнле, емешеләкле, сытыр-сатырлы урман. Урманды кешеләр быуаттар, быуындар дауамында сәсеү ерҙәрен киңәйтеү, ағас эшкәртеү, юлдар һалыу һәм башҡа һылтаныуҙар менән даими ҡырҡа, тамырҙарынан йолҡа, яндыра, аяуһыҙ ҡыра тора. Ләкин шул уҡ кешеләр, мөһимерәк шөғөл табыпмы, ялҡауланып йәки башҡа сәбәптәнме, емереү кәсебен ташлаһа, хатта әллә нисә быуын элек тамырынан ҡоротолған урмандар ҙа үҙҙәренең элекке торошон кире ҡайтара, ағас-ҡыуаҡтар фәҡәт элек үҫкән ерендә тергеҙә! Иҫ-аҡыл етмәҫлек мөғжизә был! Нисә тапҡыр ҡырҡылып, яндырылып, һөрөләп, аҫты-өҫкә әйләндерелгән ер барыбер элекке хәлен хәтерләй һәм тергеҙә! Был хәлдең мотлаҡ шулай булырына шик юҡ, сөнки беҙ бала саҡта ағастары араһында йүгереп йөрөгән урмандар бөгөн кире терелә. Колхоз, совхоздар тарҡалып, ер эшкәртеү шөғөлө ҡырҡа кәмегәс, элекке урман, сауҡалыҡтар урынында яңынан шул уҡ төр ағастар үҫеп сыға башланы. Был ғәжәп күренеште башҡа яҡтарҙа ла күҙәтәләрҙер...

Йәмғиәттә лә шулай: халыҡ хәтерен алдап, арбап, албырғатып, алйытып, юҡ итеп маташһалар ҙа, халыҡ тарихы, милли асылы, йола, ғөрөф-ғәҙәттәре хәтерҙең тылсымлы һандыҡтарында һаҡланыуҙы дауам итә барыбер...

Бөгөн йәштәр вайымһыҙ, ғәмһеҙ, толҡаһыҙ, уйын-көлкөгә генә шәптәр, тиһәк тә, улар араһында тарихи дөрөҫлөктө тергеҙеүселәр, яҡлаусылар, халҡының асылына тоғролар, тормошта намыҫлы йәшәү юлын эҙләүселәр бихисап, шөкөр! Өлкәндәр уларҙың юлдарын ҡыймаһа, моғайын, үҙ шөғөлдәрен, үҙ урындарын табырҙар. Шулай булыуы ғәжәп түгелдер, сөнки дөйөм халыҡ хәтеренән башҡа, һәр кешенең йәненә үҙ ваҡытын, ғәмәлдәрен үлсәп, хәл-ваҡиғаларын барлап торған сәғәте бар. Ул сәғәттең "йөрәге" - хәтер, телдәре - аң. Йән сәғәте кәрәк саҡта үткән ғүмерҙең һәр минутын, һәр миҙгелен тергеҙеп, кәрәк мәғлүмәтте хәтер һандығынан эҙләп табып, аңды хәрәкәтләндерә. Аң хәтерҙән алған мәғлүмәттәрҙе өйрәнеп, баһалап, һығымта яһай, үткәндәрҙе байҡай, бөгөнгөләрҙе барлай, киләсәкте күҙаллай. Һәр кемдең аңы - үҙ йәненең етәксеһе лә, намыҫы ла, хакимы ла, язалаусыһы ла. Хәтер теүәллеген, аң сафлығын һаҡлайым тигән кеше насар уйҙар, зарланыуҙар, ғәйбәт хәбәрҙәрҙән һаҡланырға тырыша. Сөнки хәтерҙе яуыз ниәттәр, боҙоҡ фекерҙәр, насар ҡиәфәттәр менән сүпләү аңды томалай, ыңғай уй-фекерҙәрҙе үҙләштереү һәләтен сикләй. Шуның өсөн хәтер һандығын көсләү, сикләү, ҡыҫырыҡлауҙарҙан азат итеп, күберәк яҡшы уйҙарға, файҙалы фекерҙәргә, ыңғай ниәт-маҡсаттарға иркенлек биреү - ихтыяры көслө кешенең өҫтөнлөгө. Шул саҡта ғына йән сәғәтенең йөрәге - хәтере теүәл эшләй, телдәре - аңы етеҙ хәрәкәттә була.

Һәр кешенең хәтерендә һаҡланғандарҙан халыҡтың тарихы туплана, асылы күҙаллана. Әгәр һәр кемдең хәтер сәғәте камил эшләй икән, халыҡ тарихы сәғәте лә ватылмай, яңылышмай, быуаттар дауамында тоғро хеҙмәт итергә һәләтле. Үткәндәренә ихтирамлы, бөгөнгөһөнә иғтибарлы, халыҡтың уй-ниәттәре яҡты, йәшәйеше лайыҡлы.

*Төн уртаһы. Серле ваҡыт.*
*Хәрәкәтһеҙ. Сәғәт ватыҡ.*
*Сәғәт һатып алып була,*
*Һатып алып булмай ваҡыт.*
*Сәғәт теле туҡтап ҡалды.*
*Һәләкәтен белә аңлы:*
*Кисәге көн үтеп китте,*
*Иртәгәһе тыумай ҡалды.*
*Хәрәкәтһеҙ төн уртаһы:*
*Ваҡыт имен. Сәғәт ватыҡ.*
*Ҡуркма, йөрәк, көн арҡаһын*
*Шулай үтә серле ваҡыт.*
*Сихырлы төн. Өй алдында*
*Өйөрөлөп елдәр олой.*
*Өйҙә кеше күкрәгендә*
*Хәүефләнеп йөрәк илай...*

**Урал МОСТАФИН.**

*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# КЕМ УЛ ҺИНЕҢ ХАЛҠЫҢ?

**Абруйлы йыйылышта юғары трибунанан вазифалы иптәш үҙ милләте тураһында бер көләмәс һөйләне. Йәғни башҡорт кешеһе ауыҙынан башҡорт милләте тураһында тағы бер мыҫҡыллы һүҙ әйтелде.**

Кем ул халыҡ? Халыҡ - ул һинең тарихың, атай-олатайҙарың, әсәй-өләсәйҙәрең. Халыҡ - ул һинең бөгөнгөң. Халыҡ - ул һин үҙең, ғаиләң. Халыҡ - ул һинең киләсәгең, балаларың, ейәндәрең. Үкенес, әммә мыҫҡыллы көләмәс улар тураһында ине бит.

Бик оҙаҡ ваҡыттар мине бер һорау борсой. Халҡыбыҙ тиндәр араһында тиң. Бер сифаты менән дә бер халыҡтан да кәм түгел. Тик ни өсөн: "Башҡорт бошмаҫ. Башҡорт бер-береһен ашай, батыра. Башҡорт эсә... Башҡорт байыһа, бисә ала..." һәм башҡа ошондай насар ғәҙәттәр фәҡәт башҡорт тураһында ғына күберәк тарала икән? Ни өсөн күтөүҙәге бер "ауырыу" һыйыр бөтөн көтөүҙе буяй, тигән хәҡиҡәт беҙҙең халыҡҡа ғына ҡайтып ҡала икән? Башҡаларҙа юҡмы ундай "һыйырҙар"? Бар. Тик башҡа милләт вәкилдәре тотош көтөүҙәге был "һыйырҙы" осраҡлы хәл тип ҡарай, күрмәмешкә һалыша, ҡуйыртмай, таратмай. Мин, мәҫәлән, әрмәндәрҙең, йәһүдтәрҙең, грузиндарҙың көләмәстәрен ишеткәнем бар, әммә үҙ милләтен мыҫҡыллағандарын белмәйем. Киреһенсә, улар көләмәс аша ла үҙҙәрен күтәрә генә. Ә ни өсөн беҙ...

Ошо йыйылыштан һуң һорауыма яуап таптым: баҡһаң, беҙ үҙ бәсебеҙҙе үҙебеҙ башлап төшөрәбеҙ икән. Киң таралған мәҡәлде иҫкә төшөрөп, ошолай тип әйтке килә: атай-олатайҙарыбыҙ тураһында теләһә ниндәй көләмәстәр һөйләп, балаларыбыҙҙы үҙебеҙҙән, халҡыбыҙҙан биҙҙермәйек, йәмәғәт. Һәр беребеҙ халҡыбыҙҙың мәҙәниәтле, мәҙәниәтле киләсәген тәрбиәләүсе вәкилдәре булайыҡ! Беҙ бит - булыр илдең балаһы! Һөйләйһең икән - яҡшыһын һөйлә, һөйләй белмәйһең икән - өндәшмә. Насар көләмәс һөйләмәүең үҙе уҡ ыңғай күренеш.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ТЫНЫСЛЫҠ БУЛҺЫН...

**Бик алыҫта ҡалған студент йылдарындағы бер күренеш әле лә хәтеремдә. Уҡыу йылы башында уҡ уҡыусыларҙы ижади юҫыҡҡа көйләр өсөн ун көн эсендә конкурсҡа һүрәт уйлап табып, ҡараламаға төшөрөп, уҡытыусы хөкөмөнән үткәреп, таҙа планшетҡа күсереп, тапшырырға тейешбеҙ.**

Был юлы конкурс "Тыныслыҡ" темаһына арналғайны. "Идея, идея" тип баш ватып, бөтөн факультет студенттары китапханаға, музейҙарға йүгерҙе. Хатта "Матур, көслө идеяң бармы? Һатып алыр инем", тигән һүҙҙәр ҙә ишетелеп ҡалды. Ун көн үткәс, ҙур залда һәр курстан һайлап алынған плакаттар күргәҙмәһе ойошторолдо. Беренсе урынды яулаған плакат ғүмергә иҫемдә ҡалды. Ул плакатта матур төҫтәге фон өҫтөнә бер һүҙ генә яҙылған: "Не стреляй!" Эйе, ябай һәм аңлайышлы: донъябыҙ, тормошобоҙ һәйбәт һәм тыныс булһын өсөн атыу тауыштары яңғырамаһын!

...Бер көндө, эштәремде тамамлап, телевизорҙан кино ҡарарға ултырҙым. Кинола баҙарҙа ҡарбуз, алмалар һатып тороусы бер ир янына танышы килеп баҫты ла, матур ғына йылмайышып, һөйләшә башланылар. Шул саҡ алыҫтан кемдер: "Тукма!"- тип һөрән һалды. Һатыусының танышы был һүҙҙе ишетеү менән ҡапыл өҫтәлдә ауҙарып ебәрҙе. Ҡарбуҙдар, алмалар тәгәрәп китте. Һатыусы аптырап: "Һин кемгә ҡаршы көрәшәһең?"- тип һораны. Һатыусының танышы: "Мин бөтәһенә лә ҡаршы!"- тине ярһып... Эйе, тыныслыҡ, тороҡло тормош шундай ыуалыусан, ватылыусан, уны боҙоу өсөн берәй йүнһеҙҙең ораны ла етә шул, тип уйланым һәм телевизорымды һүндерә һалдым...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандың агросәнәғәт комплексы делегацияһы эш сәфәре менән Ҡырым Республикаһының шефлыҡҡа алынған төбәгенә Белогорск районына барҙы. Һөйләшеүҙәр барышында Белогорск аграрийҙарына яғыулыҡ-майлау материалдары, иген урып-йыйыу комбайндары, шулай уҡ иген урыу барышында кәрәкле запас частары етмәүе асыҡланды. Белогорскиға шулай уҡ башҡорт тоҡомло аттар, тоҡомло бамаҡтар, үҫемлектәрҙе һаҡлау саралары талап ителә. Район вәкилдәре баҡсасылыҡты һәм урындағы эфир майҙары предприятиеһын тергеҙеү, машина-техник станциялар булдырыу өсөн инвесторҙар эҙләүҙә лә ярҙам һораны.

✓Мәскәү һәм Санкт-Петербургта уҡып йөрөүсе Башҡортостан студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы етәксеһе Азат Бадранов РФ Йәмәғәт палатаһының түңәрәк ҡоронда сығыш яһаны. Ул 2009 йылда төҙөлгән, бөгөнгө көндә 2 мең студент һәм аспиранты берләштергән ассоциация, уның йәштәр араһындағы эше тураһында һөйләне. Рәсәй Фәндәр академияһы Көнсығышты өйрәнеү институтының ғилми хеҙмәткәре Руслан Ҡорбанов ассоциацияның граждանлыҡ активлығының уңышлы бер моделе булып тороуын, уның тәжрибәһен башҡа төбәктәргә лә таратыу зарурлығын билдәләне.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Рәсәй философтар йәмғиәте етәксеһе Вячеслав Стёпин, уның ағзалары Абдусалам Гусейнов, Андрей Королев менән осрашты. Өфөлә 2015 йылдың сентябрь-октябрендә "Философия. Толерантлыҡ. Глобаллаштереү. Көнсығыш һәм Көнбайыш - донъяға ҡараш диалогы" VII Рәсәй философтар конгресы үткәреү мәсьәләләре тикшерелде. Конгрестың Башҡорт дәүләт университеты базаһында үтеүе күҙаллана.

✓2014 йылда май байрамдары айҡанлы рәсәйлеләр 1 майҙан алып 4-нә тиклем ял итәсәк. Енеү көнө хөрмәтенә - 9 майҙан алып 11-нә тиклем. Рәсәй көнөн 12 июндән алып 15-нә тиклем, ноябрҙә Халыҡтар берҙәмлеге көнөндә - 1 ноябрҙән алып 4-нә тиклем ял итәсәкбеҙ. Бынан тыш Башҡортостан халҡын тағы республика һәм мосолман байрамдары көтә - Республика көнө, Ураҙа байрам һәм Ҡорбан байрам.

**"Башинформ"дан.**

ТӨРЛӨҺӨНӨН

## ТАМСЫНАН... КҮЛ ЙЫЙЫЛА

**Йылытыу миҙгеле барышында баш ҡала халҡы йорттарына иҫәпләү приборҙары ҡуйылыуы һөҙөмтәһендә 268,5 миллион һум аҡсаһын экономияланы. Был хаҡта сираттағы матбуғат конференцияһында ошо тармаҡты хеҙмәтләндереүсе ойошмалар белгестәре белдерҙе.**

Торлаҡ йорттарҙы көҙгө-ҡышҡы осорға әҙерләү барышында йылытыу ҡоралдарын ремонтлауҙан тыш, 54 йортта заманса автоматлаштырылған система ҡуйыла. Шулай уҡ энергия ресурстарын ҡулланыу сығымын иҫәпләү ҡоралдарын дистанцион мәғлүмәт туплау үҙәгенә тоташтырыу ҙа үҙ ролен уйнамай ҡалмаған. Бөгөн 998 торлаҡ йорт һәм мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт объекттарының 98 проценты ошо системаға тоташтырылған. Энергия һаҡлау технологияларын ҡулланыу йорттарҙа йылылыҡты һаҡлауға һәм милекселәргә йылылыҡ өсөн түләүҙәрен кәметергә мөмкинлек бирә. Һөҙөмтәлә йылытыу миҙгелендә дөйөм алғанда 268,5 миллион һум аҡса экономияланған. Былтыр йылытыу миҙгеленә әҙерлек барышында энергетик тикшереү үткәргән ойошмаларҙың күрһәтмәһенә ярашлы, 590 объектта үткәрелгән энергия һаҡлау эштәре энергоресурстарға сығымды 80,18 миллион һумға кәметергә мөмкинлек биргән. 23,04 километр оҙонлоғондағы йылылыҡ торбаларын замансаларына алыштырыу миҙгел барышында авария күренештәрен һиҙелерлек кәметеүгә килтергән.

Былтыр бюджет ойошмаларына йылылыҡ биреү 30 апрелдә туҡтатылһа, быйыл урамдағы температура биш көн рәттән 8 градус йылы күрһәтһә, йылылыҡ биреү туҡтатыласаҡ. Ә инде күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәр был мәсьәләне үҙҙәре хәл итә ала.

## ГРАНИТ БОРДЮРҘАР

**Һуңғы ике йылда баш ҡалала юлдарҙы һәм тротуарҙарҙы ремонтлағанда ғәҙәттәге бетон бордюрҙар урынына граниттан эшләнгәнен ҡуллана башланылар. Былтыр ғына 15253 метр гранит бордюр ҡуйылған.**

Бындай ҡарарға бетон менән граниттың ныҡлығын, хаҡын һәм сифатын сағыштырып ҡарағандан һуң киленә. Сөнки бөгөн күпселек предприятиелар бетон бордюрҙар эшләүҙең тиҙләтелгән технологияһын ҡуллана, һөҙөмтәлә ул үҙенең ҡайһы бер сифаттарын юғалта, һалҡындарға тиҙ бирешә. Шуға ла уның хеҙмәт итеү осоро 2-3 йылдан артмай, ул ярыла, ҡойола башлай. Хәйер, барлыҡ ҡағиҙәләрҙе үтәгәндә лә, уның хеҙмәт ваҡыты 4-5 йылға ғына иҫәпләнгән. Ә инде гранит изделиеларҙың ҡулланыу ваҡыты сикләнмәгән. Даими механик тәьҫир аҫтында ла ул 40-50 йыл хеҙмәт итеүе мөмкин. Шуға күрә, хаҡы ҡиммәт булһа ла, ҡулланыу ваҡыты сығымдарҙы тиҙ арала аҡлаясаҡ. Ҡыҫҡаһы, бетон бордюр урынына граниттан ҡуйҙың да, оҙаҡ йылдарға был теманы оноттоң, тиергә мөмкин.

КӨНАУАЗ

# АУЫҘҘАН ӨҘӨП БИРЕҮ...

## боронлан ҡалған йола

**Ҡырым хаҡында һүҙ сыҡһа, ирекһеҙҙән, халҡыбыҙ ижадындағы етем балалар һәм үгәй әсәй тураһындағы әкиәт иҫкә төшә. Уның йөкмәткеһе ябай ғына сюжетҡа ҡоролған: бер ҡатын ике балалы иргә үҙенең балаһы менән кейәүгә сыға. Үгәй әсәй ашарға бешерһә, үгәй балаларға берәр өлөш бүлә лә, үҙенең балаһының тәрилкәһен буш ҡалдыра. Шунан инде тегеләргә: "Бына, һеҙҙең ризығығыҙ бар, ә минең баламдың бер нәмәһе лә юҡ", - тип өндәшеп йәлләткәс, балалар ҡыуаныша-ҡыуаныша үҙҙәренең өлөшөнөң яртыһын үгәй әсәнең балаһына бүлеп бирә...**

Бөгөн дә шундай хәлторош алдында ҡалған кеүекбеҙ. Йәғни һүҙ Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең Ҡырымдың 14 районын һәм бер ҡалаһын, шулай уҡ федераль әһәмиәттәге Севастополь ҡалаһын Рәсәйҙең 16 субъектына беркетеүе хаҡында. Хәҙер субъекттар әлеге район-ҡалаларҙың коммуналь хужалығы һәм социаль өлкәһе объекттары тейешле кимәлдә эшләһен өсөн үҙҙәренә тәғәйен өлөштән уларға булышлыҡ итергә, төрлө яҡлап ярҙам күрһәтергә тейеш.




Башҡортостан өлөшөнә Белогорск районы тура килде. Президент Рөстәм Хәмитов белдереүенсә, дәүләтебеҙҙең "55-се муниципаль районы" барлыҡҡа килде. Белогорск районы составына Белогорск ҡалаһы, ҡала тибындағы бер ҡасаба, 77 ауыл һәм 2 ҡасаба инә. Халыҡ һаны 64400. Шуларҙың 25400-ө - ҡала халҡы, 39 меңе - ауыллыҡы. 2001 йылғы Бөтөн Украина халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре буйынса, рустар - 49,2, Ҡырым татарҙары - 29,2, украиндар 16,2 процент тәшкил итә. Бында шулай уҡ белорустар, поляктар, молдавандар, гректар һәм грузиндар ҙа йәшәй. Район, нигеҙҙә, ауыл хужалығы, малсылыҡ, баҡсасылыҡ менән шөғөлләнә. Белогорск - Ҡырымдың ҡымыҙ етештерелгән берҙән-бер районы. Рәсми мәғлүмәттәр буйынса, 20 мең гектарҙан ашыу ер эшкәртелмәй ҙә, ҡуртымға ла бирелмәй, йәғни ташландыҡ хәлдә. Шулай уҡ Белогорск районы - ярымутрауҙың газ менән тәьмин ителмәгән берҙән-бер районы ла. Коммуналь селтәрҙәр туҙған. Күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәрҙең күпселеге мейесе булған баҡса йорттарында ҡышлай. Бындай мөмкинлектәре булмаусылар иһә фатирҙарын "буржуйкалар" менән йылыта. Күпселек торлаҡ йорттарға үҙәкләштерелгән йылылыҡ та, йылы һыу ҙа үтмәгән. Белгестәр белдереүенсә, Белогорскиҙың барлыҡ туҙған торлаҡ-коммуналь комплексы селтәрҙәрен тергеҙеү өсөн кәм тигәндә ҡаланың өс йыллыҡ бюджеты кәрәк буласаҡ. Ҡыҫҡаһы, Башҡортостан унда торлаҡ-коммуналь хужалыҡты тулыһынса аяҡҡа быҫтырырға тейеш.

Аҙна башында Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Ҡырымда Башҡортостандың вәкиллеген ойоштороу тураһында Указға ҡул ҡуйҙы. Вәкиллек Симферополь ҡалаһында асыласаҡ һәм уның төп маҡсаты булып ике яҡлы сауҙа-иҡтисад, фәнни-техник, мәҙәни һәм гуманитар бәйләнештәрҙе урынлаштырыу һәм киңәйтеү, үҫтереү торасаҡ. Башҡортостандың Ҡырымдағы вәкиле итеп бығатиклем Башҡортостан Республикаһының Рәсәй Федерацияһы Президенты ҡарамағындағы тулы хоҡуҡлы вәкиленең беренсе урынбаҫары вазифаһын биләүсе Рөстәм Уйылданов тәғәйенләнде.

Быға тиклем Ҡырым халҡына гуманитар ярҙам каруаны оҙатылғайны. Республика халҡы һәм предприятиелары мәрхәмәтлек акцияһына берҙәм ҡушылып, 29 миллион һум аҡса йыйҙы һәм был эш әле лә дауам итә.

Һәм тағы. Ошо көндәрҙә Рәсәй Президенты Владимир Путин 1944 йылда Ҡырымдан депортацияланған халыҡтарҙы аҡлау (реабилитациялау) тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Хоҡуҡи документҡа ярашлы, реабилитацияға әрмән, болгар, грек, немец һәм Ҡырым татарҙары инә. Хоҡуҡ белгестәре әйтеүенсә, тулыһынса аҡланыу процесы бик тиҙ бармаясаҡ. Ҡырым татарҙары, әлбиттә, территориаль автономияға өмөтләнгәйне, әммә тәжрибә күрһәтеүенсә, ингуштар үҙҙәренең элекке территорияларын ҡайтарыуҙы әле һаман көтә һәм ғәмәлдә аҡлау булманы, тип иҫәпләй. Әлбиттә, ыңғай миҫалдар ҙа бар: мәҫәлән, Дағстанда ингуш-аккындар үҙ ауылдарына ҡайтарыла, әммә бының өсөн 20 йыл ваҡыт кәрәк була. Ә инде Ҡырым татарҙарына килгәндә, һүҙ күп тигәндә төбәк бюджетынан социаль түләүҙәр хаҡында барасаҡ. Аныҡлап әйткәндә, ҡасандыр юғалтҡан йорттары өсөн репрессияланыусыларға 10-ар мең һум компенсация ҡаралған. Тик ул төбәк бюджеты иҫәбенә башҡарылырға тейеш. Артығын яҙып тороу кәрәкмәйҙер ҙә...

...Эйе, илебеҙ халҡы ғүмер буйы булғанына шөкөр ҡылып, кеше бәләһен үҙенекеләй күреп, ауыр саҡта иңен ҡуйырға һәр саҡ әҙер булды һәм шулай булып ҡала ла. Әммә, әкиәттәгесә, үгәй әсәнең балаһы ас ҡалмаһын тип, үҙ балаңдың ауыҙынан күпме өҙөп бирергә мөмкин булыр икән, тигән уй башҡа инә лә, Ҡырым халҡы урынына үҙебеҙҙе ҡуйып ҡарап, тыйылып ҡалына...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы директоры итеп Фәүзи Сафин тәғәйенләнде. Сафин Фәүзи Хәсән улы 1969 йылдың 22 мартында Бөрйән районының Мәһәҙей ауылында тыуған. 1995 йылда хор дирижеры, музыка дисциплиналары уҡытыусыһы һөнәрҙәре буйынса Өфө дәүләт сәнғәт институтын тамамлай. 2006-2014 йылдарҙа Өфөнөң Октябрь районы хакимиәтендә мәҙәниәт буйынса комитет рәйесе, мәҙәниәт һәм йәштәр сәйәсәте бүлегенең баш белгесе вазифаларын биләй.

✓ "Юлдаш FM" радиостанцияһы Салауат Юлаев исемендәге майҙанда донъяла тиңе булмаған сара ойоштороҙо: оҫталарҙы йыйып, 179 килограмлыҡ бауырһаҡ бешертеп, уны Рәсәй рекордтар китабына теркәтте. Тәмлекәстән бер өлөш киҫеп алынып, Рәсәй Президентына оҙатылды. Милли ризыҡ бешергән арала сәхнәлә матур тамашалар барҙы. Сараның төп бүләген - скутерҙы 12 килонан да ауырыраҡ бауырһаҡ бешергән Ҡырмыҫҡалы районы Төкөн ауылынан Гөлназ Хәсәнова яуланы.

✓ Май байрамдарында почта бүлексәләре ғәҙәти режимда эшләйәсәк. Уларға тик ике генә ял көнө ҡаралған - 1 һәм 9 май. 30 апрелдә һәм 8 майҙа бөтә класс почта элемтәләре бүлексәләренең эше бер сәғәткә ҡыҫҡартыла.

✓ Саха (Яҡут) Республикаһының "Бичик" Милли китап нәшриәте рус телендә "Любимые сказки народов России" китабын баҫтырып сығарҙы. Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" Башҡорт китап нәшриәтенән хәбәр итеүҙәренсә, йыйынтыҡ илебеҙҙә йәшәүсе туғыҙ халыҡтың ауыҙ тел ижады өлгөләренән тора. Төрлө халыҡтарҙың яратҡан әкиәттәре эргәһенә "Әбйәлил" башҡорт халыҡ әкиәте лә ингән. Китап мәктәпкәсә һәм бәләкәй синыфтағы балалар өсөн тәғәйенләнгән, уны "Китап" нәшриәтенең фирма магазинында алырға була.

✓ Башҡортостан Республикаһының Мәскәү вәкиллегендә 2021 йылда XI Бөтә донъя уйындарын үткәреү хоҡуғына Өфөнөң Заявка китабын әҙерләү һәм презентацияһын күрһәтеү мәсьәләләре буйынса кәңәшмә үтте. Кәңәшмәлә Рәсәйҙең Спорт министрлығы, Рәсәйҙең Олимпия комитеты, Милли һәм олимпия булмаған спорт төрҙәре буйынса комитет вәкилдәре, XI Бөтә донъя Уйындары программаһына ингән спорт төрҙәре буйынса бөтә Рәсәй федерациялар етәкселәре ҡатнашты. Ярыштарҙы үткәреү урыны тураһында аҙаҡҡы ҡарар 2015 йылда ҡабул ителәсәк.

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# УРАЛ ТӨБӘГЕНЕҢ АҪАБАЛАРЫ...

## ҡор йыйҙы

**Екатеринбург ҡалаһында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты һәм Свердловск өлкәһе Башҡорт үҙәге менән берлектә төбәк-ара ғилми-ғәмәли конференция уҙғарылды. "Башҡорттар - Урал төбәгенең аҫаба халҡы" тигән темаға арналды ул. Ун ете меңдән ашыу башҡорт йәшәгән был өлкәлә ике Башҡорт үҙәге әүҙем эшләп килә. Береһенә - Фәимә Йосопова, икенсеһенә Нәфисә Тюменцева етәкселек итә.**

Милләтте шәхестәр күтәрә, тигәндәй, киң Рәсәйҙең ҙур төбәгендә тауҙай эштәр башҡарған был гүзәл заттар ер күкрәген ярып сыҡҡан шишмәләргә тиң. Беҙҙе ҡабул иткән Үҙәктең етәксеһе Фәимә Фәхритдин ҡыҙының ойоштороу һәләтенә айырыуса һөкландыҡ. Урындағы дәүләт эшмәкәрҙәрен, Венгрияның Екатеринбургтағы генераль консулын, Силәбе, Өфө, Пермь, Екатеринбург, Каменск-Уральск һ.б. ҡалаларҙан килгән ғалимдарҙы, архив, музей, китапхана хеҙмәткәрҙәрен, хәрби хеҙмәттәгеләрҙе, юғары уҡыу йорттары студенттарын, аспиранттарын ҡыҙыҡһындырыу өсөн ғәйәт ҙур тырышлыҡ кәрәклеген барыбыҙ ҙа аңлайҙыр.

Свердловск өлкәһе башҡорттарына тарих заңын даими еткереүселәрҙең береһе - БДУ профессоры Нәзир Ҡолбахтиндың былтырғы ошондай йыйындағы докладына туҡталып, танылған яҙыусы Таңсулпан Ғарипова: "Уның сығышының һәр юлын, һәр фекерен доғалай күреп диҡҡәт менән тыңланым",- тип яҙғайны. Быйыл да залдағылар олпат ғалим-педагогтарыбыҙ Нәзир Ҡолбахтиндың, Роза Букановаҙың сығыштарын ҡыҙыҡһынып ҡабул итте. Уралда, Волга буйҙарында йәшәгән ата-бабаларыбыҙҙың быуаттар сылбырында ниндәй катаклизмдар кисереүен документаль фактар аша күрһәтеү уйландырҙы, тетрәндерҙе. Әммә тарих тирмәне таштары уларҙы күпмелер мөсһөҙләндерһә лә, бөтөнләй көстән яҙҙыра, юҡҡа сығара алмауы ғорурлыҡ тойғоһо уятты.

Тарих фәндәре докторы, профессор Роза Буканованың "Екатеринбург ҡалаһына нигеҙ һалыусы В.Н.Татищев һәм башҡорттар" тигән докладына урындағы халыҡ айырыуса иғтибарлы булды. Роза Ғафар ҡыҙын трибунанан ебәрмәй һорауҙарға күмеү ошо хаҡта һөйләй. Докладсы Екатеринбург ҡалаһына нигеҙ һалыусы инженер-төҙөүсе В.Н. Татищевтың биографияһындағы иң сағыу биттәр Башҡортостан менән бәйле булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Мәҫәлән, 1720-1722, 1734-1737 йылдарҙа В.Н. Татищев - Урал буйындағы заводтарҙың хужаһы була, - тип билдәләне Роза Ғафар ҡыҙы. - Был осорҙа Рәсәйҙәге хәрби-сәйәси хәлде бер-бер артлы башҡорт ихтилалдары тоҡаныуы ҡатмарлаштыра. Аяу белмәгән И.К.Кирилов 1737 йылдың мартына Башҡортостан сиктәренә 9900 регуляр, 7700 регуляр булмаған хәрбиҙәрҙе ҡуя. 4500 кешене резервта тота. Был ҙур көс (22100 кеше) 1737 йылдың йәйенә тәғәйенләнгән башҡорт ихтилалын баҫтырыу өсөн әҙерләнә. Әммә "Бәндә теләй, Хоҙай бойора" тигәндәй, И.К. Кирилов ҡаты ауырып, донъя ҡуя. Уның урынына Ырымбур комиссияһы башлығы итеп В.Н.Татищев тәғәйенләнә. Ҡулына ҙур хакимлыҡ күскән В.Н. Татищев, үҙ дәүерендәге хөкүмәт кешеһе (башҡорт тархандары, бейҙәре уға полковник тип өндәшә) булһа ла, террор алымы менән түгел, булдыра алған тиклем миһырбанлы-гуманлы юлдар менән эш итергә тырыша. Әйтәйек, "Баш күтәргән башҡорттарҙы тынысландырыу маҡсатында законһыҙ ҡулға алынған башлыҡтарҙы иреккә сығара, халыҡты 1737 йылдың йәйенә тәғәйенләнгән ҡан ҡойоштан ҡотҡара, илдә килешеүҙәр ярҙамындағы реформаларҙы яҡлай. Рәсәй тарихында беренселәрҙән булып башҡорттар тураһында ҡиммәтле тарихи-этнографик мәғлүмәттәрҙе ҡалдырған ғалим да ул".

Ғөмүмән, Башҡортостандан барған ғалимдарҙың һәм сәйәсмәндәрҙең сығыштары берәүҙе лә битараф ҡалдырманы. Сарала, ысынлап та, милли үҙаңды үҫтереү буйынса һүҙ күп булды. Фекер алышыуҙарҙа урыҫ, татар, удмурт, ингуш һ.б. милләттән булған кешеләр ҙә ҡатнашты. Ленин ордены кавалеры, 86 йәшлек Ғәлимә Ишбулатова ла иртәндән алып ҡара кискә тиклем беҙҙең арала ҡалды. Ғәжәп итеп: "Арыманыңмы, инәй?"- тиеүселәргә: "Арыу түгел, йәшәп-йәшәреп ултырам, балалар",- тип яуапланы ул. Беҙҙе, Башҡортостандан барған делегацияны, Свердловск өлкәһе башҡорттарының Ҡоролтай ҡарарҙарын тормошҡа ашырыу өсөн дәррәү, бер төптән эшләргә ынтылышы һөкландырҙы.

**Әнисә МУЛЛАҒОЛОВА.**



ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!

# БӘЛӘКӘЙ ТАЛПАНДЫҢ...

## ҙур зыяны

**Яҙ етеп, ҡояш үҙенең тәүге йылы нурҙарын ергә һибә башлау менән ҡыш буйына ошо матур сыуаҡ көндәрҙе көткән кешеләр, бигерәк тә ҡала халҡы, тәбиғәт ҡосағына, баҡсалары булғандар иһә үҙ участкаһына ашыға. Әммә тап ошо мәл талпандар ҙа әүҙемләшә. Бәләкәй генә бөжәктең тешләүе үҙәк нервылар системаһын зарарлаусы инфекцион ауырыуға - талпан энцефалитына килтереүе мөмкин.**



Бөжәк, ғәҙәттә, ҡултыҡ аҫтына, муйынға, ҡолаҡ тирәһенә, башҡа, күкрәккә, арҡаға, сатҡа ҡаҙала. Уның тешләүен кеше тоймауы ла ихтимал, сөнки тәнгә ҡаҙалған ваҡытта ул ауырттырмаусы махсус матдә бүлеп сығара.

Зарарланыуҙан алып тәүге билдәләр барлыҡҡа килгәнгә тиклем 3 көндән 21 көнгә тиклем ваҡыт үтеүе мөмкин (ғәҙәттә 7- 14 көн). Ауырыу киҫкен башлана, температура күтәрелә, баш ауырта, ҡоҫтора, аң бутала, көҙән йыйыра. Ҡайһы бер осраҡта фалиж һуғып, уның ғүмерлеккә ҡалыуы бар.

Талпандан һаҡланыу өсөн урманға, коллектив баҡсаларға барғанда хужалыҡ тауарҙары магазинында йәки дарыуханаларҙа һатылған репелленттар ҡулланырға кәрәк. Шулай уҡ 3-4 сәғәт һайын үҙегеҙҙе тикшереп, ҡарап тороу ҙа зыян итмәҫ. Бигерәк тә яғаларығыҙҙы һәм ең остарын ҡаптырып, күлдәктәрҙе салбар эсенә ҡыҫтырып, салбарҙы итек ҡуңысына тығып йөрөү кәрәк. Көләпәрә йәки ныҡ итеп бәйләнгән яулыҡ талпандың башығыҙға эләгеүенә юл ҡуймаҫ.

Шулай ҙа талпан ҡаҙала ҡалһа, уны тиҙ арала алыу зарур. Бының өсөн тешләнгән урынға шыйыҡ май, бензин, кәрәсин һөртөгөҙ. 20-30 минуттан талпан тонсоға башлаясаҡ, һәм шул ваҡытта уны эҫкәк йәки ныҡлы епкә элмәк яһап, ян-яҡҡа тартҡылай-тартҡылай, һытмай ғына тартып алырға кәрәк. Тешләнгән урынды водород перекисе йәки йод, спирт, одеколон менән эшкәртергә, ҡулдарҙы һабынлап йыуырға кәрәк.

Тартып алынған талпанды быяла һауытҡа һалып, вирусология лабораторияһына алып барып тикшертеү мөһим. Ул Өфө ҡалаһы, Шәфиев урамы, 7, адресы буйынса 103-сө бүлмәлә урынлашҡан. Ҡабул итеү ваҡыты иртәнге туғыҙҙан киске 4-кә тиклем. Хеҙмәт күрһәтеү хаҡы - 300 һум.

Әгәр талпанда энцефалит булыуы асыҡланһа, йәшәгән урынығыҙ буйынса бушлай иммуноглобулин алыу өсөн травмпунктҡа йүнәлтмә бирелә. Иң мөһиме - үҙегеҙҙең сәләмәтлегегеҙгә иғтибарлы булып, һаҡланыу сараларына күҙ йоммаһағыҙ, Хоҙай һеҙгә үҙе ярҙам итер.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Аритмия

❖ Сөгөлдөр, кишер, торма һутын 1:1 нисбәтендә ҡушып, бер нисә ай буйына көн һайын эсергә.

❖ Йөрәк тибеше боҙолғанда инжир ашау йәки лимон ҡабығы сәйнәү файҙалы.

❖ Аритмия, йөрәктең ишемик ауырыуҙары, гипертония ваҡытында энәлек емеше төнәтмәһе менән прополисты болғап (1:1), көнөнә 3 тапҡыр 25-әр тамсы эсергә.

❖ Йөрәк ритмы боҙолғанда бөтнөк үләнен (мята) ҡулланыу яҡшы һөҙөмтә бирә. 1 балғалаҡ киптерелгән бөтнөк үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт йылы урында төнәтергә. Һөҙөргә. Иртәнге аш алдынан ярты сәғәт алда йотомлап әсергә. Дауаланыуҙы оҙайлы ваҡыт, көн һайын ҡабатларға.

❖ 1 ҡалаҡ балға ярты стакан сөгөлдөр һуты ҡушып, көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан эсергә. Артериаль ҡан баҫымын төшөрә.

❖ Духовкала бешерелгән картуф та файҙалы.

## Атеросклероз

❖ Урман сәтләүеге, финик ашағандар атеросклероз менән һирәк ауырый.

❖ Атеросклероз фонында киҫкенләшеп киткән гипертонияны дауалау өсөн рецепт: 45 көн буйына 100-әр грамм әстерхан сәтләүеген балға ҡушып ашарға.

❖ Һарымһаҡ төнәтмәһе лә файҙалы: 1 баш һарымһаҡҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 минут ҡайнатырға. Һыуытырға. Көнөнә 2-3 ҡалаҡ эсергә.

❖ Йөрәк һәм ҡан тамырҙарын дауалаусы төнәтмә: 0,75 л араҡыға ҡырғыстан үткәреп, 1 ҡалаҡ һарымһаҡ һалырға, ҡараңғы урынға ҡуйырға. Аҙнаһына ике тапҡыр болғатып торорға. 1 ай төнәткәндән һуң, һөҙөргә. 1 ай буйына көнөнә 3 тапҡыр 40-ар тамсы ҡабул итергә. Дауалау курсын 1 йылдан ҡабатларға.

❖ 200 грамм сельдерей үләнен 200 грамм бал менән болғатырға, 5 минут бешерергә, аҙна буйына көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ашарға.

**Гүзәл ДАЯНОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ЯҘ МИҘГЕЛЕ БАЙРАМДАРЫ

**Яҙ етеү менән, ауыл йәштәре яҙҙы ҡаршылау байрамына йыйылған. Матур итеп кейенеп, үҙҙәре менән ашарға алып, ауыл эргәһендә ҡарҙан эрселгән аҡланға йыйылып, әүһәләй яһағандар, уйнағандар, йырлағандар, бейегәндәр.**

Көньяҡ башҡорттарында яҙ тәбиғәткә сығыу йолаһы булған. Сыуаҡ, йылы көндә бер нисә ғаилә ат егеп, тәбиғәткә сыҡҡан. Унда сәй эсеп, уйнап, күңел асҡандар.

Малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе райондарҙа иһә йәйләүгә сығыр алдынан **ырыу-ара йыйындар** уҙғарылған. Унда башлыҡтар һайланған, төрлө бәхәсле хәлдәрҙе тикшергәндәр. П. С. Назаров билдәләүенсә, ваҡытында бындай йыйындар 5 мең тирәһе кешене туплаған. Байрамда көрәшселәр бил һынаған, ат сабыштары үткәрелгән, йыр-бейеү бәйгеләре ойошторолған. XVIII быуатта, батша хөкүмәте йыйындар үткәреүҙе тыйғас, был сара бәләкәйерәк итеп үткәрелә башлай. Уны **бәйге** йәки **майҙан** тип атап йөрөтәләр. Ҡайһы бер урындарҙа был байрам ҡорбан малы салып, халыҡты һыйлау менән тамамланған һәм мир ҡорбаны тип аталған. Был көндә ҙур баҙар, йәрминкә булған, унда халыҡ үҙенә кәрәкле тауарҙарҙы, аҙыҡ-түлек һатып алған.

XIX быуат уртаһында йыйындар ошо рәүешле үткән: "Үҙ-ара килешеп, йыйынға башҡа ауыл халҡын да саҡыралар. Ҡунаҡтар ҡатындары, балалары менән килә, уларҙы йыйын үткән урындан 1 саҡрым алыҫлыҡта ҡаршы алалар. Тәүҙә - сәй, һуңынан ҡымыҙ, һарыҡ йәки йылҡы ите менән һыйлайҙар. Табындан һуң күңел асыу башлана: ҡурайҙа уйнау, өҙләү, көрәш, ат ярыштары һәм оҙон көйҙәр йырлау. Ҡунаҡтар, хужаларҙы бер нисә көндән үҙҙәрендә көтәсәктәрен белдереп, ҡайтып китәләр".

Көньяҡ-көнбайыш башҡорттары һабантуй мәлендә аш бешермәгән, ә үҙҙәре менән алып килгән ит, йомортҡа, ҡоймаҡ һәм башҡа ризыҡтарҙы ашаған, ҡымыҙ һәм бал эскән. Ә итте ауылда, бер нисә йортта бешергәндәр һәм туған-тыумасаны, йәмғиәттең абруйлы кешеләрен, башҡа ҡунаҡтарҙы һыйлағандар. Башҡорттарҙан тыш, был яҙғы байрам Урал-Волга буйы халыҡтарына ла таныш булған. XVIII быуаттың аҙағында, И. Г. Георги билдәләүенсә, был байрамдар бер-берсенһенә оҡшаш булған. Татарҙарҙа ул шулай уҡ һабантуй тип йөрөтөлгән.

Республиканың көньяҡ-көнбайыш райондарында йәшәүсе башҡорттар, шулай уҡ Ырымбур өлкәһе башҡорттары һабан тамамланғас, һабан бутҡаһы менән һыйланған. Башҡортостандың ҡайһы бер райондарында һабан бутҡаһы ҡоролоҡ йылдарында ғына үткәрелгән. Л. И. Нагаева мәғлүмәттәренә ярашлы, Шишмә районының Урта Хәжәт ауылында бер нисә кеше кистән һөт, ярма, май йыйған. Иртә менән берәй йортта бутҡа бешерелгән. Һуңынан барыһы ла йылғаға барып, күмәкләп бутҡа ашағандар һәм һыу ингәндәр. Барыһы ла: "Түбәгә тиклем туҡлыҡ бирһен! Иген уңһын!" - тип теләгәндәр.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

---

УҠЫТЫУСЫ ҺҮҘЕ

# БАШҠОРТ ТЕЛЕБЕҘ ҮЛМӘҪ...

## башҡорт үҙе телен күммәһә




**Әлеге көндә донъялағы 6 мең телдең яртыһы юғалыу хәлендә. Ә башҡорт теленә бындай ҡурҡыныс янаймы?**

Һуңғы йылдарҙа йәмғиәттә башҡорт телен дәүләт теле һәм туған тел булараҡ уҡытыу тураһында төрлө ҡараштар һәм фекерҙәр яңғырай. Бигерәк тә Федераль дәүләт белем биреү стандарттары инеү һәм мәктәптәрҙе оптималләштереү процесы башланыу менән башҡорт теле дәрестәре күпкә ҡыҫҡарҙы. Рус мәктәптәрендә белем алған күп кенә башҡорт балалары туған телен өйрәнеүҙән мәхрүм ителде. Алдағы йылдарҙа милли мәктәптәрҙә 11-се класс уҡыусылары башҡорт әҙәбиәтенән мотлаҡ имтихан тапшырһа, Берҙәм дәүләт имтиханы индерелеү менән был имтихан да юҡҡа сыҡты. Быйылға йылға тиклем 9-сы класс уҡыусылары башҡорт теленән сығарылыш имтиханы (диктант) яҙһа, хәҙер инде был имтиханды уҡыусылар теләк буйынса ғына тапшырасаҡ. 9-сы класты тамамлап, техникумдарға, колледждарға уҡырға киткән уҡыусылар башҡорт теленән имтихан тапшырыуҙан бөтөнләй баш тартырға мөмкиндәр, сөнки ул уҡыу йорттары өсөн башҡорт теле кәрәкле имтихан һаналмай. Үкенескә ҡаршы, был осраҡ буйынса Мәғариф министрлығы тарафынан да бер ниндәй ҙә аңлатма ебәрелмәне.

Тимәк, башҡорт теле предметының бәсе түбән төшәсәк, тигән һүҙ, һәм бында башҡорт теле уҡытыусыларын ғына гәйепләргә ярамай. Ә ундайҙар табыласаҡ, йәнәһе, ниңә уҡыусыларығыҙ һеҙҙең предметығыҙ буйынса имтиханды һайламай, насар эшләйһегеҙ, телгә һөйөү тәрбиәләмәйһегеҙ һәм башҡалар. Өҫтән тороп ҡыҫҡырыусылар күп, ә ярҙам ҡулы һуҙыусылар юҡ. Күп тапҡырҙар түңәрәк өҫтәлдәрҙә, конференцияларҙа ҡатнашырға тура килә. Шунда трибуна артына тороп, уҡытыусыларҙы гәйепләүселәрҙе лә тыңларға тура килә. "Мәғариф тураһында"ғы законды уҡығыҙ, директорҙарығыҙҙан башҡорт теле дәрестәрен кәметмәүҙе талап итегеҙ. Һеҙ үҙ мәктәбегеҙҙә үҙегеҙ эшләргә тейеш, эшләмәгәс, башҡорт теле дәрестәре кәмей", - ти улар. Уҡытыусы талап итеп йөрөһә, юғарылағы етәкселәр үҙҙәре нимә эшләй һуң? Тел менән бөтәһе лә һөйләй белә, ә аныҡ эш эшләргә кәрәк булһа, юҡҡа сығалар. Ысынлап та, барлыҡ уҡытыусылар ҙа законды белеп бөтмәйҙәр, ә бит улар директорҙары алдында талаптар ҡуя башлаһа, йә йөрәк ауырыуы менән сирләйәсәк, йә эштән китергә мәжбүр буласаҡ.

Рәсәй Федерацияһының "Мәғариф тураһында"ғы законының 14-се статьяһында билдәләнеүенсә, Рәсәй Федерацияһы территорияһында урынлашҡан республикалар мәғариф учреждениеларында үҙҙәренең дәүләт телдәрен уҡыта алалар. Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы, Рәсәй Федерацияһы граждандарының мәктәпкәсә белем биреү, башланғыс белем биреү, дөйөм урта белем биреү учреждениеларында туған телдәрен өйрәнеү хоҡуҡтары бар. Был хоҡуҡ Башҡортостан Республикаһының "Мәғариф тураһында"ғы законының 6-сы статьяһы менән дә нығытылып ҡуйылған.

Федераль дәүләт белем биреү стандарттарының 6-сы пункты ла туған телдә уҡытыу һәм өйрәнеүҙе һыҙыҡ өҫтөнә ала: "Стандарт Рәсәй Федерацияһының күп милләтле халҡының мәҙәниәтен, телен һаҡлауға, үҫтереүгә, туған телдә өйрәнеү, башланғыс белемде туған телдә алыу хоҡуғына йүнәлтелгән..." Ошо уҡ Стандарттың 19.3 пунктында яҙылыуынса, уҡыу пландары Рәсәй Федерацияһының мәғариф өлкәһендәге законына ярашлы туған (рус булмаған) телдә һәм Рәсәй Федерацияһы субъекттарының дәүләт телен уҡытырға, туған телдә өйрәнергә мөмкинлек тыуҙыра һәм кластар (йыл) буйынса телдә өйрәнеүгә йүнәлтелгән сәғәттәр һаны бүленешен тәьмин итә.

Шулай уҡ Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының Генераль Ассамблеяһы 1989 йылдың 20 ноябрендә ҡабул иткән Балалар хоҡуғы тураһындағы Конвенция ла һәр баланың үҙ туған теленә, мәҙәниәтенә, диненә хоҡуғы барлығын билдәләй.

Тимәк, беҙ, башҡорттар, телебеҙҙең ҡәҙерен дә, шулай уҡ ошо атап үтелгән документтарҙы, уларға ярашлы хоҡуҡтарыбыҙҙы ла белеп бөтөрмәйбеҙ. Эш үткәс кенә ҡыбырҙай башлайбыҙ. Рәми Ғариповтың шундай бер шиғыры бар:

*Беҙ, башҡорттар,*
*аттарыбыҙ һымаҡ,*
*Үтә сабыр, үтә түҙемле.*
*Әммә, бер ярһынаҡ,*
*тотоп тыйып булмай,*
*Тартһаң да ныҡ теҙгенде...*

Шулай, аттарыбыҙ һымаҡ, ярһып сабабыҙ ҙа, үкенескә күрә, тағы тынысланабыҙ. 90-сы йылдарҙан һуң телебеҙҙең ҡулланыу даирәһе ныҡ ҡына кинәйгәйне. Хәҙер позициябыҙҙы артҡа ҡалдыра башланыҡ. Берәүҙәр тел һағына баҫҡанда, икенселәр, телде былай ҙа беләбеҙ, уны мәктәптә өйрәнеп, ваҡыт үткәргәнсе, икенсе кәрәкле предметтарҙы уҡырға кәрәк, тигән фекерҙә. Күп башҡорт директорҙары мәктәптә телде һаҡлауға иғтибар итмәй: тимәк, манҡорттар. Мәҫәлән, Ишембай ҡалаһы һәм районы мәктәптәрендә белем алған 9 меңдән ашыу уҡыусының 4 меңгә яҡыны башҡорт милләтенән. Шуларҙың 55 проценты башҡорт мәктәптәрендә, ә 45 проценты рус мәктәптәрендә уҡый. Рус мәктәбендә уҡыған 500-ләп башҡорт балаһы башҡорт теле урынына туған тел булараҡ рус телен уҡый. Рус мәктәптәрендә барлығы тугыҙ ғына башҡорт класы бар: 14-се мәктәптә - 2, Башҡорт кадет мәктәбендә - 2, Урман-Бишҡаҙаҡ мәктәбендә 5 башҡорт класы. Бындай күренештәр башҡа ҡала һәм райондарҙа ла бихисап. Ошонан һуң телгә, илгә һөйөү, рух тәрбиәләү тураһында ниндәй һүҙ алып барырға мөмкин?

Ишембай ҡалаһында милли мөхиттә тәрбиә алып барған бер генә мәктәп - Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Башҡорт гимназия-интернаты ғына бар. Гимназияла 772 уҡыусы белем ала, шуларҙың 478-е - ҡала балалары. Әммә Ишембайҙағы 2 меңгә яҡын башҡорт милләтенән булған уҡыусыны милли рухта тәрбиәләй алыусы тағы бер башҡорт мәктәбе кәрәклеге күптәрҙең телендә һәм күңелендә. Әммә ошо сетерекле мәсьәләнән сығыу юлында ата-әсәләрҙең дә, ҡала етәкселәренең дә нығышмаллығы етешмәй әлегә. Һүҙемде Р. Ғариповтың шиғыр юлынан бер өҙөк менән тамамлағым килә:

*Халҡым тел тыуҙырған.*
*Бөйөк бер тел!*
*Теле үлмәҫ, үҙе үлмәһә…*
*Үҙе үлмәҫ, күрер киләсәкте,*
*Үҙен-үҙе әгәр күммәһә…*

**Рифат ӘЙҮПОВ,**
**Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Башҡорт гимназия-интернатының башҡорт теле уҡытыусыһы.**
**Ишембай ҡалаһы.**

ХАҠ ТАМЫРЫБЫҘ

**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Республикаһының Милли музейы үҙенең 150 йыллығын билдәләне. 1864 йылдың 23 апрелендә асылған музей бөгөнгө көндә республика халҡының рухи, матди байлығын күрһәткән мәҙәни үҙәк булып тора, уның экспозиция һәм күргәҙмә залдарында тарих бөгөнгө көн менән тоташа. Мәғлүмәти шартлау осоронда, халыҡтың иғтибары ысынбарлыҡтан виртуаль донъяға ауышҡанда, фекер азатлығы ғилем бушаҡлығына килтергән заманда музейҙың йәмғиәттәге, мәҙәниәттәге, тарихтағы роле хаҡында Милли музейҙың генераль директоры Ғәли Фәйзрахман улы ВӘЛИУЛЛИН менән әңгәмәлә уҡый алаһығыҙ.**

# БЫЛ МУЗЕЙҘА...

## ысын тарих һаҡлана



**➔ Милли музей өфөләләрҙе һәм баш ҡала ҡунаҡтарын нимә менән аптырата, һоҡландыра, ниндәй тәьҫораттар менән байыта?**

- Милли музейҙа бөгөнгө көндә 35 зал эшләй. Был залдарҙа Башҡортостанда йәшәгән халыҡтарҙың этнографияһына, археологияға, тәбиғәткә, тарихтың төрлө осорҙарына, тарихи ваҡиғаларға арналған экспозициялар эшләп килә. Тарихи ваҡиғалар тигәндә, 1812 йылдағы Ватан һуғышына арналған ике диорама - беҙҙең ғорурлығыбыҙ. 2012 йылда французларға ҡаршы һуғыштың башланыуына 200 тулыу айҡанлы эшләнгән диораманың беренсе экспозицияһында башҡорт атлыларының француз ғәскәрҙәре менән Малоярославск ҡалаһы янындағы алышы һүрәтләнгән. Беренсе планда хәрби ҡорамалдар, емерелгән арбаның ҡиҫәктәре, ат егеү кәрәк-яраҡтары, арҡы планда рус ғәскәрҙәре составында французларға ҡаршы һуғышҡан башҡорттар. Икенсе панорама башҡорт егеттәренең еңеү унайы менән Парижда үткәрелгән парадта ҡатнашыуын һүрәтләй. Был парад тарихта билдәле ваҡиға, унда еңеүсе илдәрҙең бөтә полктары, батшалар, императорҙар, мендән ашыу генерал ҡатнашҡан. Экспозицияла ике яугир һыны бар. Береһе башҡорт милли кейемендә ҡурай тотоп тора, икенсеһе казак хәрби кейемендә. Был диорамаларҙы һүрәткә төшөрөр алдынан беҙ ошо тарихи урындарҙа булдыҡ, сөнки тарихты дөрөҫ итеп һүрәтләү үтә лә мөһим.

Музейҙың эше мәғлүмәт менән бәйләнгән, ә мәғлүмәт ҡомартҡыларға ҡайтып ҡала. Әгәр ҙә беҙ экспонаттар даирәһен киңәйтмәһәк, яңыртмаһаҡ, экспедицияларға сығып, шул ҡомартҡыларҙы эҙләп, табып, эшкәртеп, халыҡҡа күрһәтмәһәк, эшебеҙ алға бармаясаҡ. Йыл һайын ошо экспедицияларҙа беҙ бик күп археологик, этнографик һәм башҡа төрлө әйберҙәргә юлығабыҙ. Уларҙың иң сағыуҙары музей залдарында урын ала. Ҡайһы берҙәре, бигерәк тә археология менән бәйле булған табылдыҡтар, тәрән, профессиональ тикшеренеүҙәр үткәрелеүен көтә.

Музейға йөрөү йәмғиәттең индикаторы һымаҡ. Ҡыуандырғаны -халыҡтың музейға ҡыҙыҡһыныуы арта бара. Был тормоштоң яҡшыра барыуын да аңлата. Сөнки йәшәү шарттары һәйбәттән булмағанда кеше үҙенең мәҙәниәте хаҡында уйланмай. Тормош көйләнгәс кенә халыҡ мәҙәнилеген хәстәрләй башлай.

**➔ Ә шулай ҙа мәҙәниәт донъяһында музей ниндәй урынды алып тора? Уның тәрбиәүи әһәмиәте ниндәй?**

- Мәғлүмәт төрлө юлдар менән, бигерәк тә интернет селтәре аша туҡтауһыҙ аҡҡанда кеше ошо тоҡҡарлыҡһыҙ ағымға эләгеп, юғалып, ҡаушап ҡала. Үҙенең кем икәнен, ни өсөн тыуғанын, ҡайҙа йүнәлгәнен белмәгән, аңламаған затҡа әйләнә. Ошондай ҡатмарлы, мәғлүмәти баҫым осоронда беҙҙең музейҙар халыҡты уйландырған, туҡтап, булмышы, ысынбарлыҡ хаҡында уйланырға әтәргән нигеҙ булып тора. Беҙҙең музейҙарҙа ысын тарих һаҡлана. Ысынбарлыҡтың тарихи нигеҙен күрер өсөн халыҡ музейға килә, мәғлүмәт ала. Тыуған еренә, иленә булған ҡарашы яҡшыра, ғорурлыҡ тойғоһо уяна. Уйлана башлай, баһа бирә, иң мөһиме, зиһене, күңеле өсөн ниндәйҙер бер нур алып ҡайта. Шуның өсөн бөгөнгө көндәге мәғлүмәти коллаж ваҡытында музейҙар мәҙәниәт һәм әхлаҡи, хоҡуҡи ҡанундарҙың бер ныҡлы терәге булып тора.

Эйе, көслө мәғлүмәт ағымында халыҡ барыһын да аңлап өлгөрә алмай, бының өсөн ваҡыты ла юҡ. Шуның өсөн ошондай мәғлүмәти таушыш йәнәшәһендә беҙҙең музейҙарҙың тауышы ла ишетелергә тейеш. Ул саҡта уның әһәмиәте көндән-көн арта барасаҡ. Музейҙарҙы ябып, уларҙы юҡ итеү халҡындың тамырын ҡырҡыу менән бер. Сөнки үткәнен белмәгән халыҡ киләсәген дә аңлай алмаясаҡ. Шуның өсөн иң тәүҙә үҙендең үткән тарихыңды белергә, унан фәһем алырға кәрәк. Ошо фәһемдә, белемдә киләсәк бурыстарыңды, маҡсаттарыңды үтәү өсөн, аңлы, матур итеп ҡулланырға кәрәк. Шуның өсөн музейға ябай халыҡтың ғына түгел, ә етәкселәрҙең, чиновниктарҙың, халыҡ менән эшләгән барлыҡ вазифалы кешеләрҙең дә йөрәүе мотлаҡ. Бәлки, ошо музейҙарҙа булмайынса, тере тарихҡа күҙ һалмайынса, халыҡ менән эшләү ҙә мөмкин түгелдер. Беҙ бөгөн Ер шарының күп нөктәләрендә кире мәғлүмәти тулҡын арҡаһында ҡайһы бер илдәрҙең юҡҡа сығыуын, уларҙың төрлө "төҫтәргә" буялыуын күреп торабыҙ. Украинала хатта фашистарҙың лозунгылары ла күтәрелә башланы. Был фажиғә. Кире мәғлүмәт артығы менән булыуы, ә иңғайы еткерелмәүе арҡаһында халыҡ буталды, буталыуын дауам итә. Былай килеп сыҡмаһын өсөн халыҡтың мәҙәни булыуы мөһим, ә был мәҙәнилекте шулай уҡ матур итеп музей залдарында ла аңларға, аңлатырға була. Шуны төшөнһөн ине етәкселәр ҙә.

**➔ Музей тарихты һаҡлай, ләкин айырым мәсьәләләрҙә тарихсылар менән бәхәстәр ҙә килеп сыға түгелме?**

- Музей, һис шикһеҙ, тарихты сағылдыра. Ләкин музей һәм тарихсылар - ул айырым, хатта урыны менән бер-береһенә ҡаршы килгән ике төшөнсә. Музей ысын тарихты һаҡлай. Музейҙа тарихты кирегә әйләндереп тә, бороп та күрһәтеп булмай. Мәҫәлән, Әхмәтзәки Вәлидиҙең Башҡортостан, башҡорт халҡы тураһында янып йөрөгәнен, уның федерация тураһында, республиканың автономияһы тураһында уйланыуҙарын сағылдырған мәғлүмәт тә урын алған беҙҙең залдарҙа.

Музей залдарындағы экспозициялар документтарға нигеҙләнеп эшләнә, ә тарихсылар уны үҙ белемдәренә, ҡараштарына, холоҡтарына ярашлы тәфсирләй. Улар йыш ҡына үҙҙәренең уҡымышлылығын күрһәтеп, яңы мәғәнәләр индерергә тырыша, хатта хәҡиҡәттән ситкә китеүгә тиклем барып етә. Тарихи материалды дөрөҫ еткерә белеү һәләте һәр бер ғалимға ла бирелмәгән шул. Шуның өсөн ҡайһы берәүҙәр туранан-тура тарихты боҙа башлайҙар. Вәлиди фашистик Германия, немецтар менән бергә булған, тип расҙай башлай берәүҙәр. Әммә беҙ етди тикшеренеүҙәр үткәрҙек, абруйлы органдарҙан ошоно раҫлаған йәки инҡар иткән мәғлүмәт һораныҡ. Беҙгә Вәлидиҙең фашистик Германия етәкселәре менән бәйләнештә булмауы хаҡында яуап килде. Ошонан сығып, ҡайһы бер тикшеренеүселәрҙең бөйөк шәхескә яла яғырға тырышыуын инҡар иттек.

Һәр бер ваҡиғаны дөрөҫ итеп күрһәтеү өсөн беҙ тәүҙә уларҙы ныҡлап өйрәнәбеҙ. Шул уҡ диорамаларҙы яһау өсөн 4 йыл тикшеренеүҙәр, эҙләнеүҙәр алып барҙыҡ, мәғлүмәт тупланыҡ. Дискуссиялар ойошторолдо, һәр бер аҙым ғилми советта тикшерелде. Музей эше ябай ғына хеҙмәт түгел. Ул тарихты күрһәтеү менән бергә, уның ябай тикшеренеүселәр күрмәгән яҡтарын да өйрәнеүҙе үҙ эсенә ала. Ана шул нескәлектәр беҙҙең экспонат һәм күргәҙмә залдарында урын ала ла инде. Шуның өсөн, әгәр ҙә тарихтың нигеҙен белергә теләһәгеҙ, музейға йөрөгөҙ, тип мөрәжәғәт итәм "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға.

**Азамат САЛАУАТОВ яҙып алды.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Кейем-һалым һәм биҙәүестәр

Ҡуш йәки ҙур яулыҡтарҙың, шәлдәрҙең, еләндең тәғәйенләнешенең береһе булып, мосолман йолаһы буйынса, башҡорт ҡатын-ҡыҙы һәм оло ҡатындарҙың ир-аттан йөҙөн йәшереүе торған. Әйткәндәй, был йола һәр ерҙә лә һәм һәр ваҡытта ла үтәлмәгән. Ҡарт әбейҙәр, мәҫәлән, йөҙҙәрен бөтөнләй ҡапламаған һәм баштарына ғәҙәти аҡ яулыҡ ябынған. Башҡа ҡатын-ҡыҙҙарҙың һәм йәштәрҙең яулығы һәр саҡ ҡыҙыл төҫтә йәки сағыу биҙәкле булған. Ҡарт әбейҙәр шулай уҡ баштарына таҫтар йәки ҡыйыҡса бәйләгән. Таҫтарҙың ике төрө бар. Беренсеһе, бик һирәк булһа ла XX быуат башында Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында осрай. Ул таҫтамал формаһындағы тар туҡыманан тора. Осона селтәр эшләнелә йәки сигеү сигелә. Ошо таҫтамал менән оло әбейҙәр баштарын тулыһынса урап ҡуя. Таҫтамалдың бер осо - күкрәккә, икенсеһе арҡаға төшөрөлә. Таҫтар баштарҙың - таҫтарҙың остарындағы сигеүле селтәрҙәр йәки сигеүҙәрҙең һаҡланып ҡалыуынан сығып, уны, нигеҙҙә, Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында һәм Көньяҡ Урал тауҙарында ҡулланғандар тиғән һығымтаға килергә мөмкин.

Таҫтарҙың икенсе төрө ике метрлы оҙонлоҡтағы аҡ ситсанан тора һәм ул ҡыйыҡса тип атала. Таҫтар өҫтөнән әбейҙәр ҡамсат, ҡама, бик һирәк төлкө бүрек кейгән.

Алҡалар, беләҙектәр, йөҙөктәр һәм балдаҡтар тураһында бер нисә һүҙ. Алҡаны бик һирәк, бигерәк тә көньяҡ-көнсығышта, таҡҡандар. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары бары тик көмөш балдаҡ кейгән, йөҙөк менән бергә бер ҡулда улар ике-өсәүҙән артмаған. Бигерәк тә ҙур аҡыҡ ҡашлы йөҙөктәр баһаланған.

Ҡул суғынан саҡ ҡына өҫтәрәк беләҙектәр кейгәндәр. Үҙҙәре эшләгән беләҙектәргә көмөш суҡтар йәки ваҡ тәңкәләр ҡуйылған (һүрәт). Ғәҙәттә, беләҙектәр асыҡ килеш ҡалған, йәғни улар тоташтырылмаған һәм бер ҡулға берәү генә кейелгән.



Биҙәүестәрҙән тыш, ҡатын-ҡыҙҙың артыҡ күҙгә ташланып торған башҡа әйберҙәре булмаған да тиерлек. Быға тиклем яҙылғандарынан тыш, был исемлеккә ыштан, алъяпҡыс, ойоҡ һәм аяҡ кейеме инә. Ҡатын-ҡыҙҙар ыштаны ирҙәрҙекенән беселеше буйынса ла, туҡымаһы буйынса ла бер нәмә менән дә айырылмаған. Алъяпҡысты бары тик өйҙәге ваҡ-төйәк менән булғанда, шулай уҡ баҫыу эштәре менән шөғөлләнгәндә кейгәндәр.

Бәйләм ойоҡто даими кейгәндәр, ә тула ойоҡ бик һирәк осрай. Көнсығышта уларҙы көнбайышҡа ҡарағанда йышыраҡ, бигерәк тә сабата, сарыҡ, итек, ситек менән кейгәндәр. Һәр ерҙә лә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары сылғау ураған, әммә ҡайһы бер урындарҙа бөтөнләй ҡулланмағандар. Айырым урындарҙа уны бик һирәк ярлылар ураған.

*✓ Малҡайҙарҙы ҡулға эйәләштерә-эйәләштерә, сабыр булһаң, кәрәк саҡта ҡатылығыңды ла күрһәтһәң, тормош юлында осраған "аҫау" холоҡло ағай-ҡустылар менән дә уртаҡ тел табырға була икән, тигән һабаҡты ла үҙләштерҙем.*



# Эшҡыуарлыҡты ауыҙлыҡлау һәләтем...

## аҫау айғырҙы меңгегә өйрәтеүҙән башланды

**Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы: уңышлы эшҡыуар булғың киләме? Улайһа, ҡулыңа ҡәләм ал да, бөгөнгө әңгәмәсебеҙ - "УрманСтрой" компанияһы директоры Әхмәт АҪЫЛБӘКОВ кәңәштәрен ҡуйын дәфтәреңә теркәп ҡуй. Әхмәт Мәүлембирҙе улы әйтеүенсә, ул бала саҡтан уҡ аҡсаны нисек эшләргә кәрәклеген яҡшы белгән. Әле ул тотош районды бөлгөнлөктән сығарыу механизмын беләм, ти. Һүҙ - ҡунағыбыҙға.**



### Аҡса эшләү серен белеүем...

Ун балалы ишле ғаиләлә туғыҙынсы бала булып үҫтем. Тыуған ауылыбыҙ Ҡаранйылғала (Ғафури районы) урта белем алдым. Рәсем дәрестәрен үҙ иттем, һүрәттәр төшөрөргә яраттым. Алғараҡ китеп булһа ла әйтәйем - бала саҡтан ылыҡтырған ошо һөнәремдең оло тормошҡа аяҡ баҫҡас та кәрәге тейҙе. Был хаҡта аҙағыраҡ ентекләберәк һөйләп үтермен. Ә әлегә минең мәктәп йылдарына әйләнеп ҡайтайыҡ.

Урта синыфтарҙа уҡығанымда булһа кәрәк, йәйге каникулда Ырымбур өлкәһендә йәшәүсе ағайыма ҡунаҡҡа барғайным. Көндәрҙән бер көндө колхоздың йылҡы көтөүенә көтөүсе эҙләүҙәрен ишетеп ҡалдым. Күп тә үтмәй, бейә өҫтөндә йылҡы көтөп йөрөй инем инде. Ул йәйҙе шулай көтөүсе ролендә үткәрҙем. Уның ҡарауы, яңы уҡыу йылына кейем һатып алырлыҡ аҡса туплап алдым. Ҡыш үтеп, йәйге каникулдарым башланғас, элекке атай-олатайҙар еренә тағы йылҡы көтөргә юлландым. Был юлы бер аҫау айғырҙы меңгегә өйрәтһәң, 250 һум (ул мәл өсөн арыу ғына аҡса) биреүҙәре тураһында ишетеп, йәй эсендә, башҡа йылдарҙа ла, бер-нисә аҫау айғырҙы, бер тапҡыр ҙа муйынына ҡороҡ һалынмаған бейәләрҙе өйрәтеп, тәжрибә тупланым. Аҡсаһына ҡыҙығып башлаған был шөғөл, йәғни йылҡы көтөү, ат өйрәтеү булмышымды ялманы ла ҡуйҙы. Малҡайҙарҙы ҡулға эйәләштерә-эйәләштерә, сабыр булһаң, кәрәк саҡта ҡатылығыңды ла күрһәтһәң, тормош юлында осраған теләһә-ҡайһы "аҫау" холоҡло ағай-ҡустылар менән дә уртаҡ тел табырға була икән, тигән һабаҡты ла үҙләштерҙем. Ошо урында әрмелә үҙемдең хеҙмәттәштәрҙең сәсен алып, килем алыуым тураһында ла әйтеп үтке килә. Ҡыҫҡаһы, аҡса эшләү серен бала саҡтан уҡ белдем.

### Ҡалымда... балта оҫталығына өйрәндем

Мәктәпте, унан һуң Стәрлетамаҡ һөнәрселек училищеһын (электрик һөнәре буйынса), һынлы сәнғәт мәктәбен тамамлағас, ошо ҡаланың бер заводында электрик булып эш башланым. Ун һигеҙ йәшем тулғас, әрмегә алдылар. "Һалдат һурпаһы"н татып ҡайтҡас, ошо уҡ заводта эшләүемде дауам иттем. Дөрөҫөн әйткәндә, завод эше әллә ни күңелгә ятманы: әлеге лә баяғы, аҡса наҡыҫлығы. Шуға, буш ваҡытта ағайымдар менән төрлө ҡалымға - түшәм ябыу, диуарҙар эшләү, хатта бура бурау кеүек эштәргә даими йөрөй башланым. Бармаҡтар эскә кәкерәйеп ҡатҡансы бура бурай торғайныҡ. Үҫмер саҡтан уҡ балта тотоп, икмәк табырға була икәнлеген төшөнгәс, ниндәй эш килеп сыға, барыһына ла "йомола" инек шулай.

Ҡалымда, йәғни, шул эштә йөрөүселәр теле менән әйткәндә, "шабашка"ларҙа йөрөп, 200 мең самаһы башланғыс капитал туплағас, заводтағы эшемдән китеп, дүрт егет менән бригада төҙөп, дәүләт теркәлеүе үтеп, заказдар буйынса төрлө төҙөлөш эштәре атҡара башланыҡ. Ауырлыҡтар ҙа булды, ләкин беҙ уларҙы йырып сыға алдыҡ. Бер кешенең йортон төҙөп бөтөүгә, "йәүкә телефон" аша беҙҙе бүтәндәр ҙә эшкә саҡыра башланы. Төҙөлөш, ремонт эштәрен юғары сифатта башҡаралар, тигән даныбыҙ тиҙ арала алыҫтарға таралып та өлгөрҙө.

Күп тә үтмәй, 2008 йылғы иҡтисади көрсөк башланды һәм эшһеҙ ҡалған күп ауылдаштар минең бригадаға килеп ҡушылды. Баштан уҡ аҡыллы, сәләмәт тормош алып барған егеттәр менән эш башлағас, уңышҡа өлгәштек. Мин, ғөмүмән, эскелек менән дуҫ кешеләрҙе эшкә алмайым. Эсә икән - китә, эсмәһә - эшләй. Коллективым ауылдаштарымдан һәм күрше ауыл кешеләренән тора. Ҡала егеттәре килеп, беҙҙең менән бергә эшләп ҡарағаны булды, тик эшләй алманылар. Беҙҙең эштә "елкә" кәрәк шул. Ул яҡтан ауыл егеттәренә еткәндәр юҡ инде барыбер.

Ә шулай ҙа бер йоҙроҡҡа тупланып, бер төптән эшләһәң генә уңышҡа өлгәшеп була икәнен дә беләм. Минең менән тәүге көндән эшләгән егеттәр әле минең янда, улар мине ташлап, икенсе эшкә күсмәнеләр. Тимәк, эш хаҡының муллығы (40-70 мең), айыҡ коллектив менән эшләү ылыҡтыра уларҙы ла. Ҡайһы бер объекттарҙан үҙемә килем сыҡмаһа сыҡмай, әммә егеттәремә һәр саҡ тейешле кимәлдә эш хаҡы бирәм. Етәксе кеше үҙенең хеҙмәткәрҙәрен иң тәү сиратта ҡайғыртырға тейеш, тигән ҡараштамын. Эшсеңде бер ваҡытта ла хәстәрендән мәхрүм итергә ярамай. Киреһенсә, үҙ эшенә яуаплы ҡараған эшселәргә эш хаҡын арттырыбыраҡ түләргә кәрәк. Мин шулай итәм дә. Оҫталарҙың 70-әр мең һум эш хаҡы алған айҙары була. Уларға шундай мөнәсәбәт булғас, барыһы ла эшен 100 процент сифат менән башҡарырға тырыша.

***Баштан уҡ аҡыллы, сәләмәт тормош алып барған егеттәр менән эш башлағас, уңышҡа өлгәштек. Мин, ғөмүмән, эскелек менән дуҫ кешеләрҙе эшкә алмайым. Эсә икән - китә, эсмәһә - эшләй. Коллективым ауылдаштарымдан һәм күрше ауыл кешеләренән тора. Ҡала егеттәре килеп, беҙҙең менән бергә эшләп ҡарағаны булды, тик эшләй алманылар. Беҙҙең эштә "елкә" кәрәк шул. Ул яҡтан ауыл егеттәренә еткәндәр юҡ инде барыбер. Ә шулай ҙа бер йоҙроҡҡа тупланып, бер төптән эшләһәң генә уңышҡа өлгәшеп була икәнен дә беләм.***

### Һалған йорттарыбыҙҙан һәр кем ҡәнәғәт

Клиенттар ниндәй йортҡа заказ бирә, үҙебеҙ уның планын төҙөп, бер, ике ҡатлы, мансардалы йорттарҙы төҙөп бирәбеҙ. Рәссам һөнәренә уҡыуым ошо эштә бик ярап ҡалды, сөнки бөтөн эскиздарҙы ла үҙем эшләйем. Өйҙәребеҙ уңайлылыҡ, зауыҡ йәһәтенән бик матур килеп сыға. Ағасты Бөрйән районынан, ә төҙөлөш өсөн башҡа материалдарҙы сит өлкәләрҙән күмәртәләп һатып алабыҙ. Төҙөлөш материалдарын күмәртәләп һатыусы ойошмаларҙан алғанға күрә, йорттар төҙөүгә сығымдар аҙыраҡ китә. Был, үҙ сиратында, беҙҙең хаҡтарҙы ла осһоҙораҡ итеүгә булышлыҡ итә. Стәрлетамаҡта үҙебеҙҙең пилорамабыҙ бар, шунда бүрәнәләрҙе кәрәкле формаға килтерәбеҙ ҙә, төҙөлөшкә ебәрәбеҙ. Хәҙер күптәр брус өйҙәргә өҫтөнлөк бирә, шуға беҙ ҙә күпселек осраҡта ошо материал менән эш итәбеҙ.

Әлеге көндә ун бригадабыҙ бар, улар ете объектта эшләй. Ҡыш көнө күп кенә төҙөүселәр эшһеҙ ултырған саҡта, беҙҙең ҡулдан балта төшкәне, эш туҡталып ҡалғаны юҡ. Эшемде ойоштороу өсөн урынбаҫарҙар, бухгалтерҙар тотмайым - офис-менеджерҙы иҫәпкә алмағанда, барлыҡ мәшәҡәттәрҙе лә үҙем атҡарам.

### Ауылым, ауылдаштарым...

Былтыр күрше Сәйетбаба ауылы аҡһаҡалы Ғиндулла Шәйәхмәтов ағай миңә шылтыратып: "Ҡустым, һеҙҙең ауылда "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамы үткәрергә ине, уны үткәреүгә финанс ярҙамы күрһәтә алмаҫһыңмы?" - тине. Мин: "Күпме кәрәк?" - тип һорағас, "Ватмандар алырлыҡ ҡына", - тигән яуап ишеттем. Шунан был байрамды үткәреү инициативаһын үҙ ҡулыма алдым. Ауылда йәшәгән бер туған апайым байрамды ойоштороорға ярҙам итте. Ишле ғаиләлә үҫкәнгә, күп балалы ғаиләләрҙең ҙур ауырлыҡтар кисереп йәшәүен белгәнгә күрә, байрамда ошондай ғаиләләргә матди ярҙам да күрһәтергә булдым. Байрам уңайынан һәр ғаиләгә берәр тоҡ он һәм берәр тоҡ шәкәр тараттым. Бынан тыш, Стәрленән ашнаҡсылар килтереп, ике ҙур ҡаҙанда былау бешереп, барыһын да тәмле аш, сәй менән һыйланым, балаларға уҡыу кәрәк-яраҡтары өләштем. Халыҡ бик ҡәнәғәт ҡалды. Байрамға килгән ауыл етәкселеге минең пландарым менән ҡыҙыҡһынды. Мин: "Ер бирһәгеҙ, ауылда туризм үҙәге асыр инем", - тип күптәнге хыялымды һөйләп бирҙем. Ауылды туризм үҙәге итер сәбәбе лә бар бит: беҙҙә бөйөк ғалим Жәлил Кейекбаев тыуған, уның йорт-музейына кеше былай ҙа күп килә. Унан һуң, ауылыбыҙ шундай матур урында урынлашҡан. Ошо матурлыҡты "Һаҡлаулы зона" тип иғлан итеп һаҡлауҙары ла тәбиғи. Әлбиттә, район етәкселәре минең тәҡдимде хуплаған һымаҡ булһа ла, ер мәсьәләһе хәл ителмәгән әле. Ә шулай ҙа был хыялымды ла тормошҡа ашырырмын тип ышанып йөрөлә.

Әйткәндәй, "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамынан һуң ауылым, ауылдаштарым тураһындағы хәстәрҙе үҙ иңемә ныҡлап йөкмәнем дә ҡуйҙым. Байрамда, ауыл зыяраты кәртәһен яңыртайыҡ, тигән идеяны яңғыратҡайным, ауылдаштар уны күтәреп алды. Кем күпме бирә ала, аҡсаһын да йыйҙылар. Үҙемдән дә аҡса өҫтәп, егеттәр менән материал алып ҡайтып, был эште атҡарып та ҡуйҙыҡ. Мәктәп ихатаһы буялмай тора ине, уны буяттыҡ. Оло йәштәгеләр көнөн, Яңы йыл байрамын күңелле итеп ойошторҙоҡ, иҫтәлекле бүләктәр, балаларға Ҡыш бабай күстәнәстәре өләштек. 23 февраль, 8 март байрамдарына "Йәгеҙ, әле, егеттәр!", "Йәгеҙ, әле, ҡыҙҙар!" конкурс-ярыштары үткәрҙек, йәй баштарында һабантуй байрамы үткәрергә планлаштырабыҙ. Был байрамда матур итеп көрәш майҙаны ла ойоштораҫаҡбыҙ, сәхнәнән республикабыҙҙа киң билдәлелек яулаған артистар сығыштары ла көтөлә.

Төҙөлөш менән бәйле пландарға килгәндә, минең менән бергә эшләгән егеттәргә лә, үҙемә лә ауылыбыҙҙа йорт төҙөргә тип хәл иткәнбеҙ.

Ауылымды яратыуым, уны хәстәрләүем юҡҡа түгел: мин унан көс-ҡеүәт, дәрт-дарман алам. Эшкә бары ауылдаштарҙы һәм күрше сәйетбабаларҙы ғына алғанға күрә, минең бизнестан килгән аҡса ла беҙҙең төбәкте күтәреүгә китә бит. Миндә эшләгән егеттәр ауылда йорттар төҙөй, ата-әсәһенең йорт-ҡураһын бөтәйтә, тимәк, ауылға йән инә. Киләсәктә ауылға "зәңгәр яғыулыҡ" та индерергә уй бар. Әлегә утын яғып этләнәләр. Газ үткәртеү мәсьәләһе менән район хакимиәте юлын йыш тапарға тура килә. "Ярҙам итербеҙ" тиҙәр ҙә ул, әлегә алға китеш һиҙелмәй. Әйткәндәй, ауылға күп иғтибар бүлеүем үҙҙәренең вазифаһы, креслоһы өсөн бошонған кемдәргәләр оҡшап та етмәйҙер. Эшкә аяҡ салыуҙарына ҡарағанда, шулай тойола. Әммә мин ниндәйҙер вазифаға ынтылмайым, ынтылмаясаҡмын да. Минең үҙ вазифам бар һәм ул мине тулыһынса ҡәнәғәтләндерә.

Мин ауылды ғына түгел, ә тотош районды күтәреү механизмын беләм. Әммә әлегә был серҙе аса алмайым, сөнки эштең бәрәкәте китә. Беҙҙең районды ғына алайыҡ: әллә күпме баҫыуҙар эшкәртелмәй ята бит! Ғөмүмән, Башҡортостаныбыҙҙы күтәреү өсөн дә мөмкинлектәр туп-тулы, уларҙы файҙалана белергә генә кәрәк.

### Уңышлы эшҡыуар булыр өсөн...

Хәҙерге мәлдә күптәр бары тик маҡталыр өсөн генә эшләгән һымаҡ тойола. Мин халҡымдың сауабы өсөн эшләйем. Ысын эштәр эшләмәһәң, халыҡтың ризалығын алып булмай ул. Алдаҡты, ике йөҙлөлөктө халыҡ тиҙ рисуай итә. Ғөмүмән, алдашырға ярамай. Уңышлы эшҡыуарҙар бер ҡасан да алдашмай. Биргән кешенең ҡулы ҡоромай, тиҙәр бит, халыҡтан бер нәмәнде лә йәлләргә ярамай. Шуныһыҙ, артабан үҫешә алмаясаҡһың.

Тағы шундай кәңәш: эшеңде асыр алдынан ошо өлкәлә үҙең эшләп, тәжрибә, оҫталыҡ туплау кәрәк. Бына мин, мәҫәлән, үҙебеҙ төҙөгән берәй өйҙәң түбәһе насар ябылыуын алыҫтан уҡ күреп, һүттереп, ҡабаттан ябырға ҡуша алам. Бизнеста иң мөһиме - һинә тоғро кешеләрҙе йөләп итеү һәм үҙеңдең был эшкә теләгең булыу. "Тизәктән дә аҡса эшләргә була", тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр бит. Мәҫәлән, минең юлдан китергә уйлаһаң, 4-5 оҫта тап та, 40 меңгә эш ҡоралдары һатып алып, түшәмдәр ябырға тотон! Әлбиттә, үҙең дә ситтән ҡарап торма - ҡушылып эшлә, өйрән.

Һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйтке килә: тиҙҙән бөтөн кешеләр ҙә ауылға күсеп бөтәсәк. Барыһының да таҙа һауала йәшәгеһе килә. Шулай булғас, ауылдарыбыҙға үҙебеҙҙең йәштәребеҙҙе ҡайтарыу сараһын күрәйек!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әхмәт Аҫылбәков менән һөйләшеү һығымтаһы шул: беҙ барыбыҙ ҙа нимәне булһа ла яҡшы итеп эшләй беләбеҙ. Кемдер тәмле итеп сәй яһай, кемдер оҫта итеп ошо сәйҙе эсә белә... Тәүгеһе сәйхана асһа, клиенттары өҙөлмәҫ, ә икенсеһе, мәҫәлән, сәйҙәрҙе маҡтаған рекламала төшөп, аҡса эшләүе мөмкин. Ә һинең, уҡыусы, нимә эшләһәң, күңелең елкенеп, дәртең ташып китә? Ана шундай эште тап та, кешеләргә хеҙмәт ит һәм файҙаһын күр! Тағы, туған-тыумасаңды, ил-йортоңдо, бәләкәй Ватаныңды онотма!**

Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.

# ЙӨҘ САҠРЫМ ҮТӘМ, ТИҺӘҢ...

## тәүге аҙымды эшләргә ҡурҡма

**Һәр кем үҙенә аҡса һуғып алырға мөмкинме? Юҡ, тиер күптәр, ләкин бер генә кеше был һорауға ыңғай яуап ҡайтарыр. Ул - республикала берҙән-бер тимер "аҡса һуғыу заводы" хужаһы - Марсель БИКМӘТОВ. Ғәҙәти булмаған эшҡыуарлыҡ алып барыусы менән әңгәмәбеҙ был өлкәнең үҙенсәлектәре, эшҡыуарлыҡ нигеҙҙәре тураһында.**



### "Аҡса һуғыу" идеяһы

Күптәр үҙенең булаҫаҡ һөнәре тураһында мәктәп эскәмйәһендә үк уйлай башлай. Ваҡыт үтеү менән теге йәки был һөнәргә өҫтөнлөк бирә, ә мин бер ҡасан да был хаҡта уйламаным һәм, нәҡ ошо юлдан китәсәкмен, тип, алдыма аныҡ маҡсаттар ҡуйманым. Әлеге ваҡыттағы шөғөләмә оҙайлы юлдар үтеп килдем. "Аҡса һуға" башлағанға тиклем төҙөлөштә эшләнем, аҙ кейеме һаттым, жалюзи йыйҙым, таксила йөрөнөм, сауҙа вәкиле булдым. Ләкин уларҙың береһе лә мине ҡәнәғәтләндермәне, шуға күрә үҙ эшемде асырға ҡарар иттем. Эшмәкәрлегемде сувенир автоматтар урынлаштырыуҙан башларға уйлағайным, тик интернет селтәрендә тимер аҡса һуғыу идеяһын уҡығас, нәҡ ошо өлкәлә үҙемде һынап ҡарарға булдым. Һәр эшҡыуарлыҡтың нигеҙендә фекер ята. Һәм ул йә оҡшай, йә оҡшамай. Был идея күңелемә ятты һәм оҙаҡҡа һуҙмай, эште башлап та ебәрҙем. Ноябрь аҙағында аҡса һуғыу технологияһы хаҡында уҡыным, ошо йүнәлештә эшләгән кешеләр менән бәйләнешкә инеп, ҡорамал эшләтеүгә заказ бирҙем. Ҡорамалдың Яңы йыл алдынан ғына килеп етеүе эште был осорҙа иң күп кеше йыйылған урында, ҡаланың төп шыршы ҡуйылған майҙанында башлау мөмкинлеген бирҙе. Ҡорамалымды (ул түмәрҙән, махсус ҡыҫҡыстан, сүкештән һәм һандалдан тора) тотоп, Ленин майҙанына барыуым булды, тәүге клиенттарым да оҙаҡ көттөрмәне. Уларҙың үҙҙәре һуҡҡан сувенир аҡсаны ҡулдарына алып шатланыуын күреү, рәхмәт һүҙҙәре ишетеү дәрәҫ юлдан барыуыма ишаралағандай булды.

### Мин әлегә берҙән-бермен

Тәүге эш көнөмдән ҡанатланып, ҙур пландар ҡороп ҡайттым һәм уны яйлап тормошҡа ашыра башланым. Әлеге ваҡытта ла эшмәкәрлегем үҫеү һәм киңәйеү юлында: иҫтәлекле тимер аҡсалар коллекцияһы әленән-әле тулыланып тора. Төрлө йондоҙлоҡ билдәләрен һүрәтләгән, юбилей даталарына, туй мәжлестәренә махсус рәүештә заказ биреп эшләнгән сувенир тимер аҡсалар менән бер рәттән, Өфөнөң төрлө иҫтәлекле урындарын сағылдырғандары ла бар. Өфөләләр һәм ҡунаҡтар үҙҙәренә Салауат Юлаев һәйкәле, Ләлә-Тюльпан мәсете, Дуҫлыҡ монументы, Өфө гербы һәм башҡа төрлө урындар төшөрөлгән сувенир тимер аҡса һуғып алырға мөмкин. Был бәләкәй, әммә иҫтәлекле сувенир һәр саҡ уларға гүзәл ҡала - Өфө хаҡында хәтерләтеп торасаҡ.

Үҙемдең ошондай эшмәкәрлек алып барыусы берҙән-бер кеше икәнлегемде аңлау минә көс бирә, дәрт өҫтәй, илһамландыра. Ә кешеләр менән тығыҙ аралашыу, һәр саҡ ниндәйҙер байрам, иҫтәлекле ваҡиға уртаһында ҡайнау тулы ҡанлы тормош менән йәшәүгә мөмкинлек бирә. Шулай уҡ шөғөләм бихисап дуҫтар барлыҡҡа килтереүе менән дә күңелемә яҡын.

### Уңышлы эшҡыуарлыҡ нигеҙҙәре

Үҙемдең эште аҫҡас, тәү сиратта, минең фекерләүем, донъяға ҡарашым үҙгәрҙе, яуаплылыҡ тойғоһо артты. Мин бер нәмәнән дә ҡурҡмаҫҡа һәм тәүәккәл, ҡыйыу булырға кәрәклеген аңланым. Әгәр ҙә күңеленә яҡын, үҙенә оҡшаған бер өлкәне үҙләштерергә ниәт итһәң, башлап китеүе лә ҙур ауырлыҡтар тыуҙырмай, сөнки һинең алда үҙ эшеңде асыу һәм уны уңышлы, килемле итеү маҡсаты тора. Ҡайһы берәүҙәрҙең үҙ эшен асырға теләге булып та, ниндәйҙер ҡыйынлыҡтарға һылтаныуына, төрлө сәбәптәр табып, быны кисектерә килеүенә, оҙон-оҙаҡ уйҙарға бирелеп, хыялын тормошҡа ашыра башлауға үҙе үк кәртәләр ҡороуына аптырайым. Кем эшләргә теләй - ҡыбырлай, сараһын эҙләй, яңылыша, ләкин ҡул һелтәмәй, ә яңынан башлай һәм, ахыр сиктә, үҙенең теләгенә өлгәшә. Хата яһауҙан ҡурҡырға ярамай, сөнки уларҙың һәр береһе кешене нимәгәләр өйрәтә. Эшҡыуарлыҡта уңышҡа өлгәшеү өсөн күп һәм һыҡышмалы эшләргә кәрәк, сөнки өйҙә телевизор пульты тотоп, диванда ятыуҙан билдәлелек тә, байлыҡ та килмәйәсәк. Йөҙәр саҡрымға һуҙылған юлды үтеү өсөн тәүге аҙымды эшләү мөһим. Эшҡыуарлыҡта ла шулай. Күп осраҡта ошо аҙымды эшләргә ҡурҡыу йәки аҙаҡҡа ҡалдыра килеү - уңышһыҙлыҡтың башы. Һәр саҡ нимәгәләр өйрәнеү, эҙләнеү, камиллашыу юлында булырға кәрәк. Һәр көн, һәр ваҡиға, һәр осраған кеше, аңлай һәм күрә белгәндә, нимәгәләр өйрәтә.

Эшҡыуарлыҡ үҫеңдең көсөнә, һиҙемләү тойғоһона ышаныуҙы, физик яҡтан ғына түгел, ә психологик йәһәттән дә көслө булыуҙы талап иткән өлкә. Ошоларға әҙер булған кеше генә был өлкәлә үҙ урынын табасаҡ. Еңел юл эҙләгәндәргә, алдаҡ һәм мутлашыу менән юғарыға үрләргә теләгәндәргә "эшҡыуарлыҡ" ҡарабында урын юҡ. Шулай уҡ эшлекле партнерҙар һәм клиенттар менән ғәҙел һәм эскерһеҙ булырға кәрәк, сөнки бер тапҡыр алданған кеше башҡа бер ҡасан да һинең хеҙмәттәрең менән ҡулланмаясаҡ. Эшҡыуарға, шулай уҡ, алдан күрә белеү тойғоһо ла ят булмаҫҡа тейеш, сөнки йәмғиәттең һинең эшмәкәрлектән нимә көткәнен аңлап, шуны тиҙ үк ғәмәлгә ашыра белеү - даландың яртыһы. Үҙ эшеңде ихлас яратып һәм бар күңелеңде биреп башҡарыу мөһим. Ошо, тәү ҡарашҡа, барыһына ла билдәле, ләкин күптәр тарафынан онотолған сифаттарҙы үҙ иткәндә - ниәттәрең тормошҡа ашып, күңелең теләгәнгә өлгәшәсәкһең.

### Туризм - эшҡыуарлыҡҡа ҙур этәргес

Эшмәкәрлегем туризм менән тығыҙ бәйле булғанға күрә, был өлкәгә федераль кимәлдә лә, республикала ла иғтибарҙың артыуы шатландыра. Башҡортостан был йәһәттән уникаль төбәк, сөнки беҙҙә потенциаль туристы ҡыҙыҡһындырыу өсөн бөтә мөмкинлектәр ҙә бар. Йәйәү сәйәхәт итергә яратыусылар ҙа, транспортта гиҙеүҙе үҙ итеүселәр ҙә, һыу аҫтын өйрәнергә теләүселәр ҙә, мәмерйәләрҙең серле донъяһын аңларға тырышыусылар ҙа - барыһы ла үҙенең күңеленә ятҡан ял итеү ысулын табасаҡ. Сәйәхәт итеү - яңы урындарҙы күреү, яңы кешеләр менән аралашыу ысулы. Башҡортостанға килеүсе һәр кеше матур тәбиғәт ҡосағында ял итеү менән бер рәттән, урындағы алсаҡ, йомарт, ҡунаҡсыл халыҡ менән осрашып, үҙенә онотолмаҫ ял минуттары бүләк итәсәк. Шулай уҡ баш ҡалабыҙҙа ла ҡунаҡтарға күрһәтер урындар күп, сөнки Өфө Рәсәйҙең мәҙәни, эшлекле, тарихи урындарға бай миллионлы ҡалаларының береһе. Күп ерҙә булғаным бар, ләкин һәр саҡ ашҡынып, талпынып Өфөгә ҡайтам, сөнки бындағы кеүек ыңғай энергетика бер ҡайҙа ла юҡ. Шуға күрә, беҙҙең республикала бер тапкыр булған кеше тағы ла килергә атлығып торасаҡ. Ә беҙ, төрлө өлкәлә эшләүсе эшҡыуарҙар, үҙ сиратыбыҙҙа уларҙың хәтерендә Өфө, Башҡортостан тураһында тик матур хәтирәләр генә һаҡланһын өсөн тырышасаҡбыҙ.

Гөлназ САФУАНОВА.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# АҠЫЛЫҢДЫ ЙӘШЕР!



**Минең бер әхирәтем бар ине. Ул бик аҡыллы һәм хәйләкәр. Эшкә иçкерә төшкән, әммә таҙа кейемдәрен кейеп, сал төшә башлаған сәстәрен үтә ҡыçҡа итеп алдырып йөрөй. Бөтәһе лә тигәндәй уны йәлләп ҡарай. Мин оçтаханама станокты йөҙ һумға һатып алдым, ә уға бушлай бирҙеләр (совет заманы ине). Минең ижадым худсовет аша ҙур ауырлыҡтар менән үтә, ә уныҡылар һәр саҡ бер ҡаршылыҡһыҙ ҡабул ителә.**

Сәйер, аҡылы бик үк камил түгел, тип ҡарайҙар ине уға. Ә мине юғары белемле булыуым, хөкүмәт заказдарын һәйбәт башҡарыуым өсөнмө, яратмайҙар. Күп ҡаршылыҡтарға осрайым, миңә ҡаршы күҙгә күренмәгән кәртәләр ҡорола.

Мин әхирәтемдең бик аҡыллы, тәрән белемле икәнен белә инем. Берҙән-бер көндө уның хәйләһенә ныҡлап төшөндөм һәм ҡайһы саҡ уның ысулын ҡуллана башланым. Берәү әйтмешләй, "тилерәк күренһәң, йәшерәк күренәһең..." Бер көндө план бүлегенә инһәм, бер иҡтисадсы ҡатын коридорға саҡырып алып сыҡты ла: "Һеҙ шундай матур фарфор вазалар яһай беләһегеҙ, миңә лә яһап бирегеҙсе. Мин һеҙгә берәй ойошма аша ҙур аҡса түләрмен", - тине. Мин бер ҙә ҡаушамайынса: "Ярай, яһап бирермен", - тинем. Ә үҙем: "Был апай фарфор вазалы буласаҡ, мин - аҡсалы. Ойошмаға нимә эләгә һуң?"- тип уйлап ҡайтып киттем. Командировкаларҙан ҡайтып, документтарҙы тапшырған һайын ул апай: "Ваза яһайһыңмы?"- тип һорай. Ә мин: "Яһайым", - тип әйтәм дә, йәһәт кенә уның бүлмәһенән сыға һалып китәм. Бер йылдан асыҡланыуынса, әлеге заманда "коррупция" тип аталған төркөмдә булған икән ул ҡатын. Мәскәү тәфтишселәре килеп асты ул енәйәт төркөмөн. Уны бухгалтерия, план бүлеге бергәләп ойошторған. Төрлө завод, ойошмаларҙан икеләтә аҡса күсереүгә өлгәшкән булғандар. Аңламағанға һалышып хәйләләүем ҡотҡарҙы ла инде ул төркөмгә инеп китеүҙән...

Тормош юлымда әхирәтемдең алымын ҡулланып, күп бәләләрҙән ҡотолдом. Әлбиттә, хәйләләшеүҙә мин барыбер әхирәтем кимәленә етә алмаясаҡмын инде. Ләкин уның был алымы миңә, кешеләр аҡыллыларҙы яратмай, ә сәйерерәктәргә йоғонмайҙар, тигән хәҡиҡәтте мәңгелеккә төшөндөрҙө. Әхирәтемдең уçаллығы ла бар ине, тик мин быныһына әллә ни иғтибар итмәнем. Сөнки уның "аҡылы камил булмаған" кешенең алымын ҡулланыу оçталығы һоҡландыра ине. Юҡҡа ғына "Хәйләкәрлек аҡылдың иң юғары күрһәткесе" тип әйтмәгәндер халыҡ. Ул үҙе тирәләй бер мине генә түгел, ике ағаһын һәм ҡустыһын да йүгертә. Уның йүгертеүҙәрен ауырһынмай ҡабул итәм. Бер саҡ ул үҙе асылып китеп, бер тапҡыр шаштырып ебәреп, психиатрия дауаханаһына барып әләгеүен, ике көн унда ятып, ағаһының килеп ҡотҡарыуын көлә-көлә һөйләп алды. Беҙҙең ойошмаға эшкә килгәнсе ул театрға рәссам булып урынлашҡан булған. Эскиз эшләр өсөн аҡ ҡағыҙҙы мольбертҡа беркетеп, уға төбәлеп ҡарап уйланып баçып торһа, директорҙың ярҙамсыһы килеп инеп, быны күреп: "Ниңә аҡ ҡағыҙға төбәлеп ҡарайһығыҙ?"- тип һораған. Ә ул, шаяртып: "Ниңә аҡ ҡағыҙ булһын, унда бөтәһе лә төшөрөлгән инде", - тип яуап биргән. Шунда уҡ уны директорға саҡыртҡандар. Ул: "Һеҙ аҡ ҡағыҙҙа һүрәттәр күрәһегеҙме?"- тип һораған. Сигенеп булмай бит инде: "Эйе, күрәм", - тип яуап биргән әхирәтем. Шунда уҡ "Тиҙ ярҙам" машинаһы саҡыртып, дауаханаға алып та киткәндәр. Шуларҙы иçкә алып ултырғанда: "Шаяртҡанда ла сама белеү кәрәк. Һине дөрөç аңламаусылар ҙа бар бит", - тине ул. Үҙгәртеп ҡороуҙы, илдең емерелеүен ҡабул итә алмай, бик иртә яҡты донъянан күсте ул...

**Айгөл АХУНОВА.**

РУХИӘТЕБЕҘ

# МИЛЛӘТТЕ ҺАУЫҠТЫРЫРҘАЙ...

## уйын ҡоралы "Арғымаҡ"та

**Ир-егеттең йөрәгендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр, ти халыҡ аҡылы. Бөгөн был мәҡәлде үҙгәртеп, һәр башҡорт йөрәгендә "Арғымаҡ" ятыр, тип әйтергә лә мөмкин. Бөтәһенең дә йөрәгенә Аң, Рух, Ғәм, Ырыç, Моң, Аҡыл, Ҡот һалыусы "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө етәксеһе Ринат РАМАЗАНОВтың үҙенең йөрәк түрендә, күңел күгендә нимә ятыуын белеү ниәтен алға һөрөп, уның менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**



### Дөрөç юл һайлауы ауыр

Сәхнәгә сығыу - һәр сәнғәт кешеһе өсөн тулҡынландырғыс мәл. Тәүге тапҡыр сығаһыңмы, йөҙөнсөгәме - һәр ваҡыт ниндәйҙер эске кисереш тояһың. Шуға күрә, һәр кем әҙер булыуына ҡарап, төрлө сәхнәләрҙә, төрлө аудитория алдында, төрлө кимәлдә сығыш яһай. Минең сәхнәгә сығыу өсөн әҙерлегем тыуғандан алып барған, тигән һығымтаға киләм бөгөн. Әсәйем һөйләүенсә, сабый сағымда мин шул тиклем илаҡ булғанмын. Патефонда "Сәрмән" халыҡ йыры яҙылған пластинканы уйнатһалар ғына, тымып, тынысланып ҡалам икән. Әсәйем, көн-төн шул пластинканы әйләндерә лә ҡуя, әйләндерә лә ҡуя торғайныҡ, тип һөйләне. Шулай башҡорт моңон күңелемә һеңдереп үçкәнмен. Бер көн әсәйем эштән ҡайтһа, инәйем (әсәйемдең бер туған апайы): "Улың төрлө һауыт-һабаны йыйып, ҡалаҡ менән һуғып, көй сығарып йөрөй", - тип ҡаршы алған. Йыш ҡына буш банка, кәстрүл, табаҡтарҙы шаҡылдатып уйнап йөрөгәс, музыкаль һәләттәремде артабан да үçтереү ниәтендә ата-әсәйем мине сәнғәт мәктәбенә уҡырға бирҙе. Унда яҙмыш ҡулыма башлап ҡурай тоттороусы, был сихри моң сығанағының барлыҡ нескәлектәренә төшөндөрөүсе беренсе оçтазым Тәлғәт Мөхәррәм улы Нуриев менән осраштырҙы.

Мәктәптә уҡыған йылдарҙа уҡ 10 һумға ҡайҙандыр гитара һатып алдым. Уны аҡ һәм ҡара буяу менән буяным. Гитарала уйнау теләге шул тиклем көслө ине, хатта бер-нисә ҡылы өҙөлгәс, мопедтың тоҙағын ҡулайлаштырып алғаным хәтерҙә. Был уйын ҡоралында үҙаллы уйнарға өйрәнеп, ОРТ каналының "До 16 и старше" тигән тапшырыуында ҡатнашыуым, Ю.Шевчуктың "Это все" йырын гитарала башҡарыуым иçтә ҡалған. Ҡурайҙан башҡа икенсе музыка ҡоралдарында уйнарға өйрәнеүемдең сере, егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә әҙ, тип иçәпләүҙән килә.

Тормошомда шулай йыр-моң, сәхнә, ижади еңеүҙәр күп булһа ла, Мәләүез ҡалаһының 9-сы гимназияһын тамамлағас, артабан белемде техник йүнәлештәге юғары уҡыу йортонда алырға ниәтләндем. Артист халҡының күсмә тормошон күрә йөрөгәс, сәнғәтте хобби итеп кенә ҡалдырырмын, тип уйланым. Концерт, репетиция, конкурстар арҡаһында дәрескә килмәгән саҡтарҙа математика уҡытыусымдың "Ҡурай өрөп кенә йөрөһәң, кеçәндә лә ел уйнап торасаҡ инде" тигән иçкәртеүе лә йоғонто яһағандыр был ҡарарыма. Әммә ата-әсәйемә минең сәнғәт юлынан тайпылыуым оҡшаманы. Бер көндө төрлө маҡтау ҡағыҙҙары, рәхмәт хаттары, ҡиммәтле һәм иçтәлекле бүләктәр - бөтәһе лә алдыма теҙеп һалынды. Әсәйем: "Ҡурайың арҡаһында бөтә Рәсәйҙе урап сыға яҙҙың, күпме бүләктәргә лайыҡ булдың, хәҙер килеп ошо юлды ташлайһыңмы?"- тип, ауыр һайлау алдына ҡуйҙы. Шулай ҙа мин алдыма алғанды ҡуймай торған кеше булараҡ, үҙем уҡырға теләгән Өфө авиация техник университетының ситтән тороп уҡыу бүлегенә һәм бер юлы ата-әсәйемдең һүҙен йыҡмаç өсөн Салауат ҡалаһындағы сәнғәт училищеһына уҡырға индем. Беренсе сессияны тамамлағас, күңелемә яҡыныраҡ тойолған Салауат сәнғәт училищеһында уҡырға ҡалдым. Инженер булып сыҡһам да был тормошта үҙ урынымды табыр инем, әммә эшем ҡәнәғәтләнеү тойғоһо килтерер инеме-юҡмы, билдәһеҙ. Ә бөгөн мин яратҡан, күңелемә ятҡан, теләп башҡарған эш менән мәшғүлмен.

### Башҡортса этно-рок төркөм төҙөргә...

Заманға ярашлы, йәмғиәт, йәштәрҙең идеалдары, ихтыяждары ла үҙгәрә. Мин үçмер саҡта ижадтары менән һоҡландырған, йәштәрҙең кумирҙары һаналған йырсыларҙың күбеһе бөгөн сәхнәнән ситләште, улар урынына икенселәр килде. Хәҙер йәштәр бейеү, күңел асыу өсөн мәғәнәһеҙ булһа ла дәртле сит ил йырҙары менән мауыға. Донъя классиктарының мәшһүр композициялары, тарихи, тәрән мәғәнәле башҡорт халыҡ йырҙары улар өсөн

модала түгел. Оҙон көйҙәрҙе, ҡурай моңон да бик тынлай һалып бармайҙар. Ахыр сиктә, күп ҡурайсылар үҙ репертуарына сит ил көйҙәрен дә индереүҙе ғәҙәт итеп алды. Бындай сығыштар күңелемә ятып бөтмәй. Шуға ла замандаштарыма үҙем тойған, үҙем ишеткән, яратып тыңлаған ҡурай тауышын, унан урғылған көс, дәртте еткереү исулдары тураһында уйлана йөрөнөм. Шулай бер ваҡыт осраҡлы рәүештә генә училище коридорында гитара уйнап ултырыусы Илдар Нагаевты тап иттем. Уға ҡушылып, ҡурайҙа уйнап ебәрҙем. Беҙҙең дуэттан этно-лаунжға тартым үҙенсәлекле генә бер көй килеп сыҡты. Һуңыраҡ уны Илдарҙың өй студияһында яҙҙырып та ҡараныҡ. Төркөм төҙөү, костюмдар тектереү, гастролдәргә йөрөү идеяһы барлыҡҡа килде, әммә бойомға ашманы. Быға тәү сиратта йәштәштәрем араһында башҡорт халыҡ музыкаһын тыңлаған, уға нигеҙләнеп ижад итергә теләгәндәр һирәк булыуы сәбәпсе, тип уйлайым. Өҫтәүенә, матди яҡтан мөмкинлектәр ҙә сикле ине.

Училищены тамамлап, бер аҙ Стәрлетамаҡ дәүләт филармонияһында һәм Мәләүеҙ ҡала мәҙәниәт һарайында эшләп алғандан һуң, З. Исмәғилев исемендәге Өфө сәнғәт академияһына уҡырға индем. Шунан М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында эшләүсе дуҫым Зөлфәр Әхмәтов менән быға тиклем тупланған репертуарҙы яңыртып, вокаль-инструменталь ансамбль төҙөргә ҡыҙығып киттек. Төрлө сит ил йырсыларын, этник музыканттарҙы, Алтай, Тыва халҡының өҙләү ҡушылған үҙенсәлекле йырҙарын тыңлап ҡараныҡ. Шулай уйлап, уйлап, ете ҡат үлсәп йыйына торғас, ҡурайға ҡушылып өҙләү беҙҙең төркөмдөң төп "фишкаһы" булырға тейеш, тигән һығымта яһап, этнорок төркөмө булдырырға ҡарар иттек. Төркөмдөң атамаһын уйларға ваҡыт еткәс, Зөлфәр уға "Арғымаҡ" тип исем ҡушайыҡ, тигән тәҡдим яһаны. Был идея яҙыусы Мәрйәм Бураҡаеваның ошо уҡ атамалы китабын уҡығас килгән икән. "Арғымаҡ" - ул аң, рух, ғәм, ырыҫ, моң, аҡыл, ҡоттоң һынланышы, башҡорттоң бөтә асылын, уның йәшәйешенең төп ҡиммәттәрен үҙ эсенә алып тороусы төшөнсә. Йәштәргә, халыҡҡа үҙебеҙҙең ижад аша ошо ете ҡиммәтте еткереүҙе бурысыбыҙ, маҡсатыбыҙ иттек. Исем, йүнәлеш һайланғас, төркөмгә музыканттар йыя башланыҡ. Бөгөнгө состав формалашҡансы "Арғымаҡ" аша күп ижад кешеләре үтте. Йәштәргә килеп: "Төркөм ойоштораһыҙ, уйнарға теләгең юҡмы?"- тип һораһаң, иң тәүҙә ниндәй төркөм тураһында һүҙ барыуын һорайҙар. Башҡортса этно-рок, тиһәң, эстәрен тотоп көләләр. Ә профессиональ музыканттарға мөрәжәғәт итһәң, улар башта "Һин алйотмы?" тигән ҡараш ташлай, һуңынан кеҫәңде ҡапшай... Беренсе сығыштарыбыҙҙы үҙешмәкәр төркөм буларaҡ башлағанда уйын ҡоралдары етешмәй, профессиональ кимәлебеҙ аҡһай, репетициялар ойоштороу өсөн база юҡ ине. Шулай ҙа унда-бында йүгергеләп йөрөп, сығыш яһарға рөхсәт, уйнарға инструменттар, студиялар һорай-һорай, төркөм дә тупланды, халыҡ араһында билдәлелек тә яулай башланыҡ, шөкөр. Билдәлелек, тигәндән, нишләптер башҡорт йәштәре ситтән ингәнде тиҙерәк үҙ итә. Сит ил музыкаһын күберәк тыңлай, сит ил йырсыларын нығыраҡ ярата, сит илдең бөтә нәмәһе лә сифатлыраҡ, тип һанай. Шуға күрә, үҙебеҙгә баштан уҡ сит илдә танылыу яулап, быңдағы тамашасыға сит ил аша килергә тейешбеҙ, тигән маҡсат ҡуйҙыҡ. Ҡайҙа, ниндәй фестиваль, этник музыка концерттары булаһын ишетеп ҡалабыҙ - барыһына ла өлгөрөргә тырыштыҡ. Лондон, Париж, Ашхабад, Истанбул, Астана, Анкара - бөтә тарафтарҙы урап сыҡтыҡ.

## Ниәтең дөрөҫ булһа...

Ҡайҙа ғына йөрөһәк тә, сығыштарыбыҙҙы һоҡланып ҡарайҙар. Сөнки беҙҙең йырлау стиле береһенә лә оҡшамаған, ә ҡурай бүтән бер халыҡта ла юҡ. Шуға күрә, концерттарҙан һуң башҡа милләт кешеләре лә килеп, ҡурайҙы тотоп ҡарай, беҙҙе ауыҙҙырын асып тыңлай. Әйтергә кәрәк, ҡайһы саҡ башҡорттарҙың да иҫен китәреп ҡуябыҙ. Билдәле башҡорт халыҡ көйөнә башҡа милләт йырҙарына хас ритмдар ҡушып уйнағанды ишетеп, бүтән уйын ҡоралдары араһында ҡурай ни тиклем уңышлы яңғырауына төшөнөп, башҡорт йәштәре лә беҙҙең ижадты үҙһенә. Ижадыбыҙ аша улар башҡорт халыҡ йырҙары, ҡобайырҙар, мөнәжәттәр менән таныша. Ҡурай моңо яңғыраған концертта йыйылған халыҡ алдында йәштәрҙе рух юғарылығына, күңел сафлығына, тура юлда булырға саҡырып һүҙ тотоу ҙа кәрәкмәй. Сөнки ҡурай менән бер бөтөн булып, дөрөҫ уйналған көй һәр кемдең йөрәгенә туранан-тура үтеп инерлек, уның иң яҡшы сифаттарын тергеҙерлек, рухын үстерерлек, мәғәнәүи көс өҫтәрлек, халыҡты уятырлыҡ ҡөҙрәткә эйә. Хатта Ҡытай руханийы ҡурай моңон тәүге тапҡыр ишеткәс: "Беҙҙең медитацияға китеү өсөн кәрәк бөтә өндәр һеҙҙең уйын ҡоралығыҙҙа бар. Ниндәй ауырыуҙы һауыҡтырыу өсөн ҡайһы көйҙө унарға кәрәк булыуын да әйтә алам", - тип белдергән. Был бит башҡа һыйырлыҡ түгел! Беҙҙең бөтөн милләтте һауыҡтырырҙай, бөтә замана сирҙәренән арындырырҙай уйын ҡоралыбыҙ бар икән дә баһа! Шулай була тороп, йәштәр ниндәйҙер мәғәнәһеҙ һүҙҙәр теҙмәһенән торған, тупаҫ яңғыраған музыкаға өҫтөнлөк бирә. Шуға күрә, "Арғымаҡ" этно-рок төркөмөнөң маҡсаты - йәш быуынды сит ил музыкаһынан тулыһынса арындырыу, уларҙы "һауыҡтырыу". Ижадыбыҙ ата-бабаларыбыҙ мираҫ итеп ҡалдырған йырҙарҙы, традицион фольклорҙы һаҡлап ҡалыу, уның дәрәжәһен күтәреүгә булышлыҡ итергә тейеш. Беҙ уйнаған илаһи ҡурай моңо бала күңеленә үтеп инһен, ул башҡорт телен, фольклорын, динен йөрәгенә һеңдереп үҫһен - әлеге көндә фекерҙәштәрем, төркөмдәштәрем менән башҡарған барлыҡ эшебеҙ ошо изге ниәткә ҡоролған. Ә изге ниәт - һәр саҡ Юғарыла ҡабул була, ул саҡта һинең эшеңә береһе лә, бер нәмә лә ҡаршы тора алмай.

## Президент гранты

Минең ниәтем дә, Аллаға шөкөр, ҡабул булды шикелле. Сөнки ижади пландарыбыҙҙы тормошҡа ашырыу өсөн Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитовтың 10 миллионлыҡ грантына лайыҡ булдыҡ. Әгәр ҙә мин үҙем өсөн машина, дача, аҡса кеҫәп йөрөһәм, бындай оло мөмкинлек асылмаҫ ине. Күптәр кеүек 50-100 һумлыҡ билеттар һатып, сифаты шикле концерттар биреп йәшәр инек. Башҡарған эшем өсөн ҙур яуаплылыҡ тойғоһо, халҡым мәнфәғәттәрен ҡайғыртыуым, изге ниәтем үҙ баһаһын алды, тип иҫәпләйем. Яҡын киләсәктә грант аҡсаһына асыҡ майҙанда сығыш яһарға мөмкинлек бирә торған "машина-сәхнә" тип әйтәйемме, эшләтеп алырға ниәтләйбеҙ. Уның ярҙамында хатта урам уртаһында туҡтап, "һә!" тигәнсе машина-сәхнәне йәйеп ебәреп, халыҡ алдында сығыш яһарға буласаҡ. Был машина беҙҙе төрлө техник белгестәр яллап, икешәр көн аппаратура ҡуйып, музыка ҡоралдарын урынлаштырыуҙан арындырасаҡ. Сөнки концерт ҡуйыу өсөн кәрәкле һәр нәмә үҙ урынында беркетелгән буласаҡ, сәхнә лә төҙөп торорға кәрәк булмаясаҡ. Бынан бер йыл элек кенә бындай уңыш төшкә лә кермәй ине әле! Ниһәйәт, ең һыҙғанып эшләргә, яңынан-яңы йырҙар ижад итергә, идеяларыбыҙҙы тормошҡа ашырырға мөмкинлек тыуҙы.

Аллаһы Тәғәлә барыһын да күреп тора, һин ҡылған һәр изгелек бер яҡшылыҡ булып кире ҡайта. Шуға, йыш ҡына хәйриә концерттарында сығыш яһайбыҙ. Был икмәклек аҡса эшләй алмайбыҙ, тигәнде аңлатмай. Мәҫәлән, шул концертта сығыш яһап, килгән тамашасыға концерттан һуң ҡорбан ашы ашатһаң, уларға хаҡ һүҙҙе еткерһәң, ҡурай аша йөрәктәренә иман нуры, рух сәсергә тырышһаң, Хоҙай һинә берәй "Башнефть", "Газпром" корпоративы, йәки сит илдәге түләүле концертта ҡатнашыу мөмкинлеген бирә. Сит илгә сығып, тағы ла аҡса эшләп киләһең дә, бында ҡайтып, "халҡым өсөн" тип яңып-көйөп йөрөй башлайһың. Теүәл фәндәрҙә билдәле формулалар булған кеүек, беҙҙең уңыштың да бына ошондай ябай ғына формулаһы бар: фарыз ғәмәлдәрҙе үтәһәң, өлөшөңдө алаһың.

Билдәле төркөмдәрҙең, Рәсәй эстрада йондоҙҙарының барыһының да продюсерҙары, менеджерҙары бар. Беҙ иһә, үҙебеҙ йырсы, ҡурайсы, барабансы, продюсер ҙа булып эшләйбеҙ. Сөнки әлегә башҡорттар араһында продюсер эшенең айышын аңлаусы эшмәкәрҙәр юҡ. "Продюсер үҙәге" тип аталған ойошмаларҙың эше йондоҙҙарға концерт ойоштороргa ярҙам итеүгә генә ҡайтып ҡала. Ысынында, продюсер - ул әле билдәлелек яуламаған йәш талантты күреп ҡалып, уға аҡсалата ярҙам итеп, концерттарын үткәреп, йырҙарын яҙҙырып, хатта фотосессия ойоштороргa ярҙам итергә тейеш кеше. Беҙ үҙ ижадыбыҙҙы үҙебеҙ этәрәбеҙ, ундай ярҙам итеүсе кешебеҙ юҡ. Шуға күрә, бөтә эштәр үҙебеҙҙең тырышлыҡҡа, ҡуйған маҡсаттарға табан тура юлдан барыуға ҡайтып ҡала. "Тормошта уңыш яулай алыу тик үҙеңдән һәм дөрөҫ ҡуйылған ниәтеңдән генә тора", тием икән, мин үҙебеҙҙең өлгөнән сығып әйтәм.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ниәт - ул осор ҡош, тип күҙ алдына килтерәйек. Бер ҡанаты доға, икенсе ҡанаты - сәбәп. Доға ҡылып, Аллаһы Тәғәләнән һорап ҡына ултырһаң, ҡошоң бер ҡанатлы ғына буласаҡ. Уның юғарыла, ирektә булыуын теләйһең икән, сәбәп тә ҡылырға бурыслыһың. Әңгәмә барышында Ринат Заһир улы: "Ике ҡанатлы ҡошом, ниһайәт, күккә күтәрелде",- тигәйне. Ниндәй генә ел-дауыл, ғәрәсәт ҡупҡанда ла һеҙҙең ниәт ҡанаттары ҡайырылмаһын, күктәрҙе иңләп, башҡорт халҡына ҡурай моңон еткерер көсө булһын!**

Сәриә ҒАРИПОВА
яҙып алды.

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# ЛАРИВАН НИ АҢЛАТАМЫ?

**Гәзиттең бер һанында "лариван" һүҙенең аңлатмаһын һорағайнығыҙ, шул турала үҙем белгәндәҙе яҙайым әле, тинем . "Әсәйем лөғәте" рубрикаһын һәр саҡ ҡыҙыҡһынып күҙәтеп барам. "Тел төбө - хазина" рубрикаһында Әлфиә Батталованың мәҡәләләре ҡыҙыҡлы ине. Ниңәләр был яҙмаларҙың дауамы күренмәй. Рәшит Шәкүр ҙә тынып ҡалды. Һүҙҙәр тарихы кешене һәр саҡ ҡыҙыҡһындыра.**

Алсаҡ, асыҡ, яғымлы, шәп кешене Әй буйында *шарҙыуан* тип йөрөтһәләр, Дим һөйләшендә *шәпеүән* тип атайҙар икән. Һүҙҙәрҙең һуңғы ялғауҙары бер үк - *-ан/-ән* (сағыштыр: *бәлеү-ән, кару-ан, ирәү-ән* һ. б.). *Ларивaн (ларыуан)* һүҙе лә, күрһәтелгән схема буйынса яһалып, *лар-* тамырынан һәм *-ив (-ыу)*, -ан ялғауҙарынан торорға тейеш. Тик ул *лариван* формаһын алған. Минеңсә, һүҙҙең сығышын Иван менән бәйләп аңлатыу дөрөҫ булмаҫ. *Шәпеүән* һүҙе "шәп" Иван килгәнсә үк яһалған кеүек, *ларыуан* һүҙе лә бик борондан килә - йәнтештәр арaһында мығырҙап һөйләшкән кешеләр Иванға тиклем дә осраштырғылағандыр. *Ларыуан (лариван)* һүҙендәге *лар* тамырының варианттары *лөр-лөр* -сабый бала һөйләшкән йәки шуға оҡшаш тауышты белдергән һәм *лурҡылдау* һүҙҙәрендә һаҡланған.

Минең күҙәтеүҙәрем буйынса, л өнөнән башланған һүҙҙәрҙең байтағы *й*-ға башланған һүҙҙәрҙән яһалғандар. Икенсе төрлө әйткәндә, тел үҫеше барышында *й-л* фонетик күсеше булған. Әлеге күсештең даими булғанлығын раҫлаған байтаҡ миҫал килтерергә мөмкин. Мәҫәлән: *йай* (ниммәнендер тәйешле тәртибе) - *лай; йашыҡ* (ябыҡ) - *лашыҡ; йепшек - лепшек; йүшкә - лүшкә; йапаҡ* (ләпәк) - *ләпәк; йүшә* (бәҫ) - *лүшә; йуша* (болан, мышы) - *луша; йәбешеү - лыпашыу; йәйсән - ләйсән; йәблек* (картуф) - *ләпләмә* (ерҙә ҡалып серегән бәрәңге) һ. б. Был миҫалдар *й-л* фонетик күсешенең законлы күренеш икәнлеген раҫлай.

Беҙ тикшергән *лар-* тамыры, *й-л* фонетик күсешенә ярашлы, мәғәнәләш *йар* тамырынан барлыҡҡа килергә һәм "сабый, бала" мәғәнәһен белдерергә тейеш, тип уйлайым. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, был һүҙ әлегә табылманы. Әммә уның урынына *ларылдау* (өҙләкһеҙ ҡысҡырып һөйләү, ҡауғалау) һүҙенең барлыҡҡа килеүен күҙәтеп үтергә мөмкин. Был һүҙҙең *лар* "ҡысҡырыу" тамыры, *й-л* фонетик күсешенә ярашлы, *йар* "ҡысҡырыу" (ҡара: *яр һалыу*) тамырынан яһалған. Ә *йар* һүҙе сығышы менән, үҙ сиратында, *сар* (*сарылдау* составында) һүҙенә барып тоташа.

*Й-л* фонетик күсешенә нигеҙләнеп, байтаҡ һүҙҙең сығышын асыҡлау мөмкинлеге барлыҡҡа килә. Әйтәйек, *лыпашыу* (йәбешеү) һүҙенә иғтибар итәйек. *Лыпашыу*, ә русса *липнуть* була. Башҡорт һәм рус һүҙҙәренең *лып* һәм *лип* тамырҙары яҙылыштары менән дә, мәғәнәләре менән дә бер-береһенә тулыһынса тап килә. Улар йәнәшәһенә литва теленең *липти* (йәбешеү), боронғо һинд теленең *липтас* (йәбешкәк) һүҙҙәрен ҡуйһаҡ, дүрт телдәге һүҙҙәрҙең бер үк уртаҡ тамырҙан яһалғанлығын асыҡ күрәбеҙ. Уларҙың кәрҙәшлеген ике юл менән аңлатып була: *а)* дүртеһе лә уртаҡ булған төүтелдә барлыҡҡа килгән; *б) лып (леп) - лип* тамыры тәүҙә һаналған телдәрҙең береһендә генә тыуған, ә һуңынан бүтәндәренә күскән.

*Лыпашыу* һүҙенең башҡорт теле ерлегендә яһалғанлығын күрҙек. Был фактты инҡар итеү мөмкин түгел. Ә ҡалғандарының сығышын бер телдә лә ышандырғыс аңлата алмайҙар. Тимәк, *липнуть, липти, липтас* һүҙҙәре үҙ телдәре ерлегендә тыумаған. Бынан сығып, һаналған һүҙҙәрҙең башҡорт теленән үҙләштерелеүе тураһында һүҙ алып барырға тулы нигеҙ барлыҡҡа килә.

**Шулай итеп, "Әсәйем лөғәте", "Тел төбө хазина" рубрикаларында бирелгән диалект һүҙҙәре тел һөйөүселәрҙе уйланырға, эҙләнергә этәрә. Араларында һүҙлектәрҙә бөтөнләй булмаған гәүһәрҙәр ҙә осрай. Әлеге яҙмала килтерелгән һүҙҙәрҙән күбеһе - шулай уҡ төрлө һөйләш һүҙҙәре.**

**Әкрәм ӘЛИБАЕВ.**
**Хәйбулла районы.**

✓ Күңелсәк, аралашыусан кешеләр һәр ваҡыт ризаһыҙлыҡ белдереп, көйөп йөрөүселәргә ҡарағанда һирәк ауырый. Аралашыу ғына түгел, дуҫтарса ҡул ҡыҫыуҙар, ҡосаҡлауҙар ҙа организм өсөн мөһим.



ИНТЕРНЕТТАН



# БАҠСА ӨСӨН...

## еҫле ҡараҫҡы

■ Гарвард университеты ғалимдары (АҠШ) фекеренсә, һыйыр, һарыҡ ите, аҡ май, ҡаймаҡ, һөт өҫтө, аҡ икмәк һәм ондан бешерелгән башҡа ризыҡтар өлкән йәштәге кешеләрҙә матдәләр алышыныуын боҙоуы ихтимал. Бындай ризыҡтарҙы күп ашаған 40-ты үткән ирҙәр араһында диабет менән ауырыусылар 60 процентҡа күберәк. Артыҡ ауырлыҡ иһә "татлы сир" ҡорбаны булыуҙы 10 тапҡырға тиҙләтә. Гарвард табиптары ҡыҙыл иттән тауыҡ итенә һәм балыҡҡа, ә аҡ икмәк урынына көрпәле арыш икмәге ашарға кәңәш итә.

■ Германияла йәшәүсе баҡсасы үҙенсәлекле үҫемлек килтереп сығарған. Ул уны "Кит бынан!" тип атаған. Үҫемлек бесәй һәм эттәргә ҡаршы көрәшәсәк, уның үҙенсәлекле еҫе дүрт аяҡлы "тәртип боҙоусылар"ҙы яҡшы ҡурҡыта. Бының өсөн хайуандарға үҫемлеккә ҡағылыу ҙа етә, ул шунда уҡ ҡырҡыу еҫ бүлеп сығара. Еҫле ҡараҫҡы бик матур ҙа, шуға ла ул баҡсасыларға икеләтә оҡшаясаҡ.

■ Һөт ризыҡтары диабет менән ауырыусыларға файҙалы. Америка ғалимдарының ун йылға һуҙылған тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусылар аҙнаһына 35 тапҡыр һөт аҙыҡтары ашаһа, инсулин резистентлығы синдромы хәүефе (шәкәр диабетында туҡымаларҙың инсулин гормонына тәьҫир итмәүе) 72 процентҡа түбәнәйә. Ғалимдар фекеренсә, был кальций һәм макронутриенттар - һөттәге аҡһым һәм майҙарға бәйле. Улар организмды 2-се типтағы диабеттан һаҡлап ҡына ҡалмай, ябығырға ярҙам итә, гипертония һәм йөрәктең ишемик ауырыуҙарын булдырмай.

■ Ҡышын ауырымаҫ өсөн йылы миҙгелдә күберәк асыҡ һауала йөрөргә, сәйәхәт итергә һәм дуҫтар менән йышыраҡ әүҙем ял ойошторорға кәрәк. Нейрофизиктар раҫлауынса, беҙҙең эргә-тирәбеҙҙәгеләрҙең иғтибары һәм ярҙамы иммунитетҡа яҡшы йоғонто яһай икән. Күңелсәк, аралашыусан кешеләр һәр ваҡыт ризаһыҙлыҡ белдереп, көйөп йөрөүселәргә ҡарағанда һирәк ауырый. Аралашыу ғына түгел, дуҫтарса ҡул ҡыҫыуҙар, ҡосаҡлауҙар ҙа организм өсөн мөһим.

■ Юғары калориялы татлы ризыҡтар ни өсөн туйыу тойғоһон бирмәй? Сөнки улар "тиҙ" углеводтар: глюкоза ҡанға шунда уҡ эләгә. Ашҡаҙан аҫты биҙҙәре яуап итеп ҙур күләмдә инсулин бүлеп сығара. Ул глюкозаны тиҙ генә таратып бөтөрә, ҡанда глюкоза күләме кәмегәс, яңынан асығыу тойғоһо барлыҡҡа килә. Яй углеводтар (йәшелсә, ярмалар) сәләмәт ризыҡ иҫәпләнә: глюкоза ҡанға эләгә һәм яйлап үҙләштерелә. Глюкозаның һеңеү темпы гликемик индекс тип атала. Монтиньяктың популяр диетаһы уның буйынса төҙөлгән.

■ Американың Nutrion Impact компанияһы тикшеренеүселәре, авокадо кеше организмында матдәләр әйләнешен нормаға килтерә ала, тип иҫәпләй. Ғалимдар 7 йыл дауамында 17,5 мең кешене күҙәтеп, көн һайын авокадо ашаусыларҙа метаболик синдром үҫеше хәүефе ныҡ түбәнәйеүен асыҡлаған. Әлегә авокадоның сәләмәтлеккә йоғонтоһо тулыһынса өйрәнелеп бөтмәгән. Респонденттарҙың сәләмәт өлөшө шулай уҡ йәшелсә, емеш-еләк һәм витамин, микроэлементтарға бай ризыҡтарға өҫтөнлөк биреүе тураһында белдергән.

СӘЙЛӘҮ ГӘБЕ



**Яҙҙың иң матур мәле лә етте. Бар тәбиғәт уяна, ҡояш нығыраҡ ҡыҙҙыра, шуға кәйефтәр ҙә күтәренке. Ошо ваҡытта баҡсасылар өсөн дә ҡыҙыу мәл етеүен иҫәпкә алып, "Сәйләү гәбе"ндә баҡсасылыҡ тураһында һөйләшеп алырға саҡырам. Йәй көнө-төнө баҡсала ятмаһам да, мин дә йәшелсә-емеш үҫтерергә яратам, шуға ла был шөғөлдө үҙ итеүселәргә үҙемдең тәжрибәмдән сығып, бер нисә кәңәш еткергем килә.**

# ЙӘЙҘЕҢ ЙӘМЕ - СӘСКӘ,

## көҙҙөң йәме - мул уңыш

**▸ Быйыл ҡыш бик оҙонға һуҙылып китте. Күптән бындай мул ҡарлы ҡыш булғаны юҡ ине. Баҡсасыларға баҡса миҙгелен асырға мөмкинлек һаман теймәй әле...**

- Ысынлап та, теге ял көндәрендә ҡала ситендәге баҡсама барып, үтә алмай кире ҡайттым. Ҡар ҡатламы бигерәк ҡалын булған икән. Шулай Хоҙайҙың биргән һәр көнөнә ҡыуанып йәшәргә кәрәк. Ҡар ҡалын булһа ни, ер дымлыраҡ булыр. Был үҙе үк уңыштың нигеҙе бит.

**▸ Әле был мәлдә баҡсасылар ниндәй эштәр менән мәшғүл һуң? Нимәлер сәсер өсөн ер ҙә йылынмаған бит әле.**

- Ашығыуымдың сере шунда: бөтә баҡсасылар ҙа иң тәүҙә ағастарының олонон ағартып ҡалырға тырыша. Быны хатта ашығыс рәүештә эшләргә кәрәк. Саҡ ҡына һуңлаһаң, ҡар иреү менән ҡояш йылыһына ерҙә ҡыш сыҡҡан төрлө бөжәктәр уяна. Шунан улар ағастарға үрмәләй башлай. Һөҙөмтәлә, тәүҙә - япраҡтарға, унан һуң емештәргә зыян килтерәләр. Ә ағас олонон ағарта торған ҡатнашмала уларҙы ҡурҡыта торған матдә бар. Унан һуң, олонон ағартыу ағастың ҡайырыһын ҡояшҡа яныуҙан һаҡлай. Быларҙан тыш, иртә яҙҙа башҡара торған тағы бер эш бар. Көҙҙән өлгөрмәһәгеҙ, япраҡ ҡалдыҡтарын йыйып, баҡсаны таҙарта һалырға кәрәк. Шулай уҡ ағастың кәрәкмәгән ботаҡтарын һуңламай ҡырҡып ташларға тейешһегеҙ. Әлегә баҡса эштәре өйҙә, тәҙрә төптәрендә инде, төрлө үҫентеләр үҫтереү менән булышам.

**▸ Үҫентеләрҙе асыҡ һауаға сығарып ултыртҡансы, улар менән берәй төрлө эш башҡараһығыҙмы?**

- Әлегә тәҙрә төбөндәге борос үҫентеләрен айырым һауыттарға ултырта башланым. Уларҙы март башында уҡ сәстем. Орлоҡтарҙы тәүҙә еүеш сепрәккә урап, һыуыҡҡыста бер тәүлек тотаһың һәм шыттыраһың. Бынан бер-ике аҙна элек кенә һәр береһенең аҫҡы, оҙонайып үҫеп киткән сибек тамырҙарын ҡырҡып ташлап, өҫтәге ҡуйы матур тамырҙарын ғына ҡалдырҙым. Шунан алдағы кимәленән саҡ ҡына тәрәнерәк инеп, кире ултырттым. Пикировкалау тип атала был ысул. Боросто иртә сәсергә кәрәк ул, февраль аҙағында, һис булмаһа, март башында уҡ. Һуңға ҡалһаң, йәй буйына түккән тирең юҡҡа сыға. Август айында һыуыҡ ел булып алһа, борос өшөй ҙә, боростары ваҡ булып, ҙурая алмай тик ултыра.

Үҫенте өсөн ултыртылған помидорҙың тамырҙарын беренсе тапҡыр ҡыҫҡартҡанда, аҙаҡ айырым һауыттарға күсергәндә лә һабағын тәрәнерәк күмһәң, һәйбәтерәк. Көслө тамырлы булғас, һабағы йыуанайып, йәйелеп шәп итеп үҫә лә китә. Борос үҫентеһенең һабағын тәрән итеп күмеп булмай, һабағы ҡыҫҡа булһа, боростары ергә тейеп торасаҡ. Баклажанды алдан уҡ айырым һауытҡа сәсәм, сөнки уны әҙ ултыртам. Помидорҙы ҡараған кеүек тәрбиә кәрәк баклажанға. Әле бына яңы ғына кәбеҫтә сәстем. Япма аҫтына ултырта башлау өсөн ҡыяр ҙа сәскәнмен.

**▸ Баҡса сәскәләрен үҫенте менән үҫтерәһегеҙме?**

- Сәскәләрҙең бер йыллыҡтарын асыҡ һауаға сәсәһең, күп йыллыҡтары инде үҙе шытып сыға. Әле һыуытҡыстан гладиолустың һуғанбаштарын алып, тәҙрә төбөнә ҡояшҡа йылынырға һалдым, уяна торһондар.

Бәрхәт сәскәһен асыҡ һауаға һуң сәсһәң, ул көҙгә генә сәскә ата. Бер нисәүһенә урын табып, әле үк орлоҡтарын айырым һауыттарҙағы тупраҡҡа төрттөм. Өйҙә үҫә торһондар, тиҙерәк сәскә атырҙар, йәй йәме сәскәлә бит ул. Май башында шулай уҡ календула, флокс, гладиолустар ултыртырға була. Ай аҙағында астра, ҡәнәфер үҫентеләрен, шулай уҡ күп йыллыҡ сәскәләрҙең орлоҡтарын сәсерһегеҙ.

**▸ Ҡар иреп бөткәс, асыҡ һауалағы түтәлдәргә ниндәй йәшелсәләрҙе сәсергә мөмкин?**

- Һуған орлоҡтарын, яҙ ултырта торған сортлы һарымһаҡты, башҡа һалҡынға бирешмәй торған үҫенте орлоҡтарын әҙерләп ҡуйҙым. Уларҙы тап ҡар ирегәс тә ултыртып өлгөрөргә кәрәк, ер дымлы саҡта шытып өлгөрһөндәр. Кишергә, мәҫәлән, шытыр өсөн һыу күп кәрәк. Әҙерәк үҫеп, нығынып алһа, аҙнаһына бер һыу һипһәң дә, яҡшы үҫә. Барыһын да ергә иртәрәк төртөп өлгөрөргә кәрәк инде, беҙҙә йәй миҙгеле оҙаҡ түгел. Ә яҙҙың көнө тағы ла тиҙ үтә, һуң сәсһәң, йәшелсәләр өлгөрмәй ҡала. Ҡара шалҡанды иртә ултыртһаң, иртә өлгөрә. Уны аҙаҡтан, һуған йыйып алынған түтәлгә сәсеп, күп итеп һыу һипһәң, баҡса миҙгеле ябылғансы өлгөрөп етә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һәр баҡсасы үҙенең тәжрибәһенән сығып үҫтерә инде ул йәшелсә-емеште. Бында аныҡ ҡына рецепт юҡ. Шулай ҙа был кәңәштәр ҙә кемгәлер ярап ҡалыр. Барыбыҙға ла мул, уңышлы йәй теләйем!**

**Алһыу ҒӘЗИЗОВА
сәйгә саҡырҙы.**

ДОНЪЯ - ҠУЛАСА

# АЛТЫН ЯЛАТЫЛҒАН ҠАЛАҠТАР,

## йәки Заяға үткән ғүмер

**Ҡаты һыуыҡ булмаһа ла, мамыҡ башлығын күҙенә үк төшөрөп, туны яғаһын күтәреп кейгән был ҡатындың, иғтибарлап ҡараһаң, кемдәндер ҡасҡанын, йәшенгәнен аңлауы ҡыйын түгел. Бына әле лә уның, көнө буйы шаҡ-шоҡ килгән подъездың тимер ишеген башҡалар ишетмәһен тигәндәй ипле генә ябып, бөтә торош-ҡиәфәте менән нимәлер урлап ҡасып барған кеүек китеп барыуы. Был хәләте уның күптән түгел, күршеләренә яңы йәш ғаилә күсеп килгәс кенә башланды.**

Ни эшләптер Әклимә ошо аҡыллы ғына күренгән йәш күрше ҡатын менән осрашмаҫҡа тырыша. Кәрәккән-кәрәкмәгәнгә ҡыҫылып, үҙенә артыҡ иғтибар йәлеп итеп тә бармай ул ҡатын, әммә уның үткер ҡарашынан бер нәмә лә йәшерә алмаҫ кеүек. Тик нимәне йәшерергә иткәнен Әклимә үҙе лә аңламай. Кешенән ҡасырлыҡ, ҡурҡырлыҡ бер ҡырын эш тә ҡылғаны юҡ та баһа...

Ҡапыл ғына атаһының әйткән һүҙҙәре иҫенә төштө: "Тормошта ике нәмәнән ҡурҡ: көлкө хәленә ҡалыуҙан һәм һине ҡыҙғаныу-йәлләүҙән".

Үҙе лә һиҙмәҫтән, Әклимә яурынын турайтты, башлығын маңлайына һыпырҙы, яғаларын төшөрҙө. Магазинға барып әйләнгәнсе ошо хәлдә булды ул. Тик үҙе йәшәгән йорт ихатаһына етеү менән йәнә яурыны төштө, ҡарашы аяҡ осона текәлде. Әммә теге яңы күрше ҡатын менән осрашыуҙан барыбер ҡаса алманы. Уныһы ипле генә иҫәнләште, әллә ғәйепле кешеләй йылмайҙы ла инде. Әклимәгә был оҡшаманы. "Ниңә мине шул тиклем йәлләп ҡарай ул? Был донъяла бер мин генә яңғыҙ түгел дә инде, - тип йәнә көйҙө. - Минең йәшкә ет әле, яңғыҙлыҡ анатомияһын һин дә белерһең, өйрәнерһең. Һинең йәштә мин дә яңғыҙ түгел инем. Ҡояш та, ай ҙа тик минең һәм уның өсөн генә ҡалҡҡан, ҡоштар тик беҙҙең өсөн һайраған һымаҡ ине. Тойғолар океанында йөҙгәндә аҡылды - компас, ә ялҡынлы мөхәббәтебеҙҙе елкән иттек". Шулай иҫтәлектәргә бирелә-бирелә күтәрелде ул баҫҡыстар буйлап.

Әклимәнең күршеһенә булған үпкәһе оҙаҡҡа барманы. Фатирына инеп, ишек алдындағы көҙгөгә күҙ һалыу менән күҙ йәштәренә ирек бирҙе. Ысынлап та, ҡыҙғанырлыҡ шул хәле - ғүмере үкенесле булды.

Ғаиләлә бер үҙе үҫкәнгәме, Әклимә бәләкәй саҡтан күп бала тураһында хыялланды. Кейәүгә сыҡмаҫ борон уҡ тыуасаҡ балаларына исем һайлап, татыу ҙур ғаилә тураһында хыскә

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БУЛҒАНЫНА ШӨКӨР ИТӘЙЕК!



**Донъяуи әйберҙәрҙең бары менән риза булып, шөкөр итә белеү, ҡәнәғәтһеҙлек күрһәтмәү - кешене биҙәгән матур фиғелдәрҙең береһе ул. Был донъяның бәхет сере - Аллаһы Тәғәлә тәҡдире менән ҡәнәғәт булыу, тигән аҡыл эйәләре. Был, тәү сиратта, матди байлыҡҡа ҡағыла.**

Аллаһы Тәғәлә изге Китабында үҙебеҙҙән бай, етешерәк йәшәгәндәргә көнләшеүҙән тыя. Уларҙың мөлкәте, матди байлығы кемдәлер Алла биргәндәргә ризаһыҙлыҡ тыуҙырасағын иҫкәртә. Башҡа кешеләрҙең мөлкәтенә, етеш тормошона көнсөллөк менән ҡараған кеше бер ҡасан да бәхетле була алмай. Кеше үҙе күпме генә йыймаһын, тапмаһын, алмаһын, төҙөмәһен, эшләмәһен - һәр саҡ үҙенән байыраҡты күреп, тыныслығын юғалтасаҡ. Сөнки кеше нәфсеһененең төбө юҡ, ике алтын далаға эйә булғандар мотлаҡ өсөнсөһөн көҫәйәсәк, тип бушҡа ғына әйтеп ҡалдырмаған Бәйғәмбәребеҙ. Башҡа кешеләргә бирелгән матди ниғмәттәргә ҡыҙығып, үҙенде матди яҡтан байыраҡтар менән сағыштырып, ризаһыҙлыҡ күрһәтеү - Аллаһ тәҡдиренә ҡаршы барыу була ла инде.

Бер мөъмин Ҡәғбә тирәләй тауаф ҡылған һәм туҡтауһыҙ: "Йә, Аллаһ, һин минең менән ризамы?" - тип ҡабатлар булған. Быны бөйөк ғалим, имам Әш-Шәфии ишетеп ҡалған. "Ә һин үҙең Аллаһы Тәғәлә менән ризаһыңмы?" - тип һораған ул теге кешенән. "Аллаһы Тәғәләнән риза булыу нисегерәк була һуң ул?" - тип төбәлгән теге кеше ғалимға. Имам: "Аллаһы Тәғәлә менән риза булыу - башыңа бәлә төшкәндә лә Аллаһы Тәғәлә һиңә бәлә менән бергә донъя ниғмәттәрен биргәндәге кеүек үк ҡыуаныу. Байлыҡта ла, фәҡирлектә лә - бөтә хәлдәрҙә лә Аллаһы Тәғәлә тәҡдиренә шөкөр итеү. Шул саҡта һин Раббың менән риза булғандар исемлегенә яҙыласаҡһың", - тип яуап бирә.

Ялтырауыҡтар, бейегерәк йорттар, ҡиммәтлерәк транспорт төрө алыу, үтә ҡыйбат кейемдәргә төрөнөү һәм ошо юлда башҡалар менән ярышыу - был шайтан юлы.

Аллаһ һәр кемгә лә тейешле өлөштө бирә, бер кем дә был донъяға ризыҡһыҙ тыумай. Берәүҙәргә аҡса эшләү һәләте бирелә, Аллаһы Тәғәлә тырышлыҡтары өсөн уларға бар юлдарҙы аса. Икенсе берәү тырышып та, аҡыллы булып та аҡсаға мандып китмәй. Бәлки, эше лә, вазифаһы ла быға мөмкинлек бирмәйҙер. Әммә улар икеһе лә үҙ урынында.

Ниғмәттәрҙе Аллаһы Тәғәлә бүлә, кемгәлер күберәк өлөш эләгә, кемгәлер әҙерәк. Әммә донъя муллыҡтары кеше менән уның ҡәберенә инмәй, улар әҙәм балаһына аманат итеп кенә бирелә, етмәһә, Ҡиәмәт көнөндә һәр бирелгән ниғмәт өсөн яуап тотаһы бар әле. Кемдең донъя байлыҡтарынан торған йөгө ауырыраҡ, уға ҡыйыныраҡҡа тура киләсәк хатта. Риүәйәттәр һәм хәҙистәрҙән күренеүенсә, бәйғәмбәрҙәр араһында иң һуңғы йәннәткә инәсәк Сөләймән ғәләйһиссәләм булһа (уға бөйөк дәүләт һәм бик күп донъя ҡиммәттәре бирелә), Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең тарафдарҙары араһында Ғабдрахман ибн Ауф исемле мәшһүр сәхәбә йәннәткә "шыуышып инәсәк". Был сәхәбәнең дәрәжәһенә шик булыуы мөмкин түгел: исеме һәр саҡ дүрт хәлифтән һуң телгә алыныуы ғына ла уның иманының һәм дин хаҡына хеҙмәтенең юғары кимәлдә булыуын күрһәтә. Йөҙҙәрсә дөйә алып килгән каруанын, хатта бар байлығын бер тамсы ла үкенесһеҙ саҙаҡа итеп бирә алған кеше була ул. "Ташты күтәреү етә, унда мотлаҡ алтын табасаҡмын кеүек тойола миңә", тип әйтә был сәхәбә. Ләкин ул бар ошо байлыҡтың Аллаһ ниғмәте, Уның бәрәкәте булыуын аңлап, шөкөр итеп, тәкәбберләнмәй йәшәй.

Ауыр замандар ҙа була. Ҡайһы бер мәлдәрҙә араларында ашарҙарына булмаған сәхәбәләр килеп сыға. Ләкин улары ла фәҡирлек хәлендә булыуҙарына ҡарамаҫтан, үҙҙәренең мохтажлыҡтарын күрһәтмәйҙәр, хәллерәк ҡәрҙәштәренең ярҙамынан да баш тарталар. Мохтажлыҡта (ләкин хәйерселектә түгел) йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, Әбү Хөрәйрә, Билалдар үҙҙәрен лайыҡлы тотоп, хәлдәренә зарланмай, булғанына шөкөр итеп, Аллаһы Тәғәләнең тәҡдире менән күнеп йәшәп, итәғәтлектә Аллаһ рәхмәтенә ирешәләр.

Эйе, үҙеңә бирелгән ниғмәттәрҙең ҡиммәтен аңлар өсөн, ошо ниғмәттәр бирелмәгән кешеләргә ҡарарға кәңәш итә ғалимдар. Бары шул саҡта ғына шөкөр итергә, донъя менән ҡәнәғәт булып йәшәргә мөмкин.

Кешенең, үҙенә нисек кенә ауыр булмаһын, ниндәй генә ҡыйынлыҡтар кисермәһен, зарланып йәшәргә хаҡы юҡ. Хатта зәғиф булғанда ла, был физик етешһеҙлек артында оло бүләк ятыуы тураһында иҫкәртелә. Зарланмай, Аллаға, башҡа кешеләргә ләғнәт уҡымай ғүмер кисеп, иман менән был донъянан киткәндәр үҙҙәренең сабырлығы, ныҡлығы өсөн сауапты күберәк тә аласаҡ хатта. Ә бөтә тән ағзалары урынында, аҡылы теүәл, зиһене асыҡ булған кеше үҙенең хәле менән бер мәлгә булһа ла зарлана ала микән? Булғаны менән риза ҡалып, Раббыңа шөкөр итеү бик ҙур байлыҡ ул.

**Арыҫлан ИСКӘНДӘРОВ әҙерләне.**

---

бирелә ине. Тик ниңәлер тормошо баштүбән килде лә сыҡты. Боронғолар, алдан хыялланырға, план ҡорорға ярамай, ти ҙә һуң, тик нисек хыялланмай йәшәргә була һуң? Бер уйлаһаң, Әклимәнең бөтә тормошо тик хыялдан ғына ҡоролғайны түгелме? Ә үҙе хыялдарына ҡапма-ҡаршы тормошта йәшәне.

Яратышып ҡауышып, гөрләтеп туй үткәрергә йыйылғайнылар. Туйҙың икенсе көнөндә үк һөйгәне, үҙ ағаһынан көнләшеп, йәш кәләште ғәм халыҡ алдында һуғып осорғас, ғорур, унан да бигерәк тәкәббер холоҡло атаһы ике яҡтың да ай-вайына ҡарамай, кейәүен, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарын ҡыуҙы ла ҡайтарҙы. Туғыҙ айҙан һуң тыуған ейәне лә кейәүенә булған мөнәсәбәтен үҙгәртмәне. Ҡырыҫ холоҡло атаһы уны тупһаһынан аша ла атлатманы. Бер баланы өсәүләп ҡарарбыҙ әле, тип әйткәнен ҡыҙы, башҡаса кейәү тип ауыҙыңды асаһы булма, тип аңланы.

- Һаҡ һәм һалҡын ҡанлы бул. Ҡайнар йөрәккә ҡарағанда, һалҡын аҡыл мөһимерәк, - тип өйрәтте ул ейәнен дә.

Атаһы әйткәнгә йә баш ҡағып, йә өндәшмәй генә ризалашҡан әсәһе генә:

-Көт, балам, көт... Бәхет көткән кешегә килә ул, - тип ҡолағына шыбырҙар ине. Шулай уның барса ғүмере көтөү менән үтте лә китте.

Хаҡлы ялға сығып, атаһы менән әсәһе ҡалаға күсеп килгәс, Әклимә дөйөм ятаҡтағы бүлмәһен тапшырып, улар янына күсте. Олатаһы менән өләсәһенең наҙы артығыраҡ булдымы - Әклимәнең улы иркә, үҙ һүҙле, эгоист булып үҫте. Техникум дипломын алып ҡайтҡандың икенсе көнөнә үк өс туған ағаһы менән сит тарафтарға эшкә юлланды. Эшләгән еренән армияға саҡырттылар, хеҙмәт итеп бөткәс тә ҡайтырға ашыҡманы. Өйләнеүе тураһында ла, балаһы тыуыуы хаҡында ла телефондан ғына хәбәр итте...

Ғүмеренең заяға үтеүен әсәһе-атаһы бер-бер артлы гүр эйәһе булғас ҡына аңланы Әклимә. Хәҙер бына нисәмә ҡышты бер үҙе үткәрә. Шулай ҙа байрам һайын мул табын әҙерләй. Туйға төшкән бүләкте - алтын ялатылған ҡалаҡтарҙы ла теҙеп һалырға онотмай. Тик уларға үҙенән башҡа бер кем дә ҡағылғаны юҡ. Атай-әсәһе иҫән саҡта ҡалаҡтарҙы сығарырға ҡурҡты. Ниңәлер, ошо ҡалаҡтарҙы өҫтәлгә һалһа, күңелендәге серен - ғаиләле булып, ир ҡатыны булып, һөйөп-һөйөлөп йәшәгеһе килеүен атаһы белер төҫлө тойолдо. Ейәнсәренә ете йәш тулғас, юл ыңғайы ғына һуғылған улына бүләк итергә уҡталғайны, кире уйланы. Иң ҡәҙерле әйберенән, хыялынан, өмөтөнән мәхрүм ҡалыр төҫлө ине. Ана, әле лә байрам табыны әҙер. Тәрилкәләр тирәләй ҡалаҡтарҙы ғына теҙәһе ҡалды. Гөлсәсәк, Азамат, Йыһанур, Айһылыу, Нурсилә... Әклимә, ҡурҡып, иҙәнгә ултырҙы. Ҡалаҡтарға исем ҡуша башланы түгелме? Нисәмә тиҫтә йылдар күңелендә һаҡлаған исемдәрҙе ҡабатлай бит уның ирендәре...

Шул саҡ теге йәш, матур, үткер ҡарашлы күрше ҡатындың ишек асҡаны ишетелде. Әклимә һикереп торҙо ла, алтын ялатылған ҡалаҡтарҙы матур ҡабына теҙеп, күршеһенә бүләк итергә ашыҡты. Ә күршеһе ғүмер буйы зарығып көткән ғәзиз кешеһенең кесе ҡыҙы Нурсилә икәнлеген белмәй ине әле Әклимә...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

---

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

### Ҡыйыулыҡ

Ҡыйыулыҡты хәрби геройҙарҙа күрергә мөмкин, әммә был сифат эшҡыуарлыҡ өлкәһендә, хөкүмәттә йәки дини ҡорамдарҙа эшләүсе һәр лидерға хас. Ниндәйҙер ойошманың эшендә ниндәйҙер алға китеш күрәһегеҙ икән, уның лидерының ҡыйыу ҡарар ҡабул итеүендә шикләнмәһәгеҙ ҙә була. Лидерлыҡ кешегә ҡыйыулыҡ өҫтәмәй, әммә ҡыйыулыҡ уға лидер вазифаһын биреүе мөмкин.

Тормошобоҙҙа ниндәйҙер ауыр мәсьәләне хәл иткәндә, ҡыйыулыҡты ҡылыҡһырлаусы түбәндәге хәҡиҡәтте онотмағыҙ:

**Ҡыйыулыҡ үҙ-үҙебеҙ менән көрәштән башлана.** Лидер булараҡ күҙмә-күҙ осрашҡан һәр һынау үҙ-үҙебеҙ менән көрәштән башлана. Бында ҡыйыулыҡ менән һынау ҙа ташлама түгел. Билдәле психотерапевт Шелдон Копп билдәләүенсә, "һөҙөмтәле көрәштәрҙең ниндәйҙер өлөшө кешенең үҙендә бара". Ҡыйыулыҡ ҡурҡыу тойғоһо булмауҙы аңлатмай. Ғәмәлдә, ул нимәнән ҡурҡаһығыҙ, шуны эшләү һәләте. Ул - таныш ерҙе, таныш урынды ҡалдырып, үҙегеҙҙә быға саҡлы күрелмәгән, сер булып торған ерҙәргә сығып китергә көс табыу.

**Ҡыйыулыҡ - йылғырлыҡ түгел, ул дөрөҫ ҡарар ҡабул итеү.** Граждандар хоҡуҡтары хәрәкәте лидеры кесе Мартин Лютер Кинг әйтеүенсә: "Кешенең ысын баһаһын билдәләүсе булып уның уңайлылыҡ шарттарында биләгән позицияһы түгел, ә саҡырыуҙар һәм уңайһыҙлыҡтар ваҡытында күрһәткән ныҡлығы тора". Бөйөк лидерҙарға кешеләрҙе яҡшы белеү, уларҙы үҫтереү һәм уртаҡ фекергә килеп, бергәләп эшләү һәләте хас. Әммә кәрәк икән, улар ҡаты ла була белә. Әгәр һеҙ ныҡлы инанғанлыҡ менән ҡатылығығыҙҙы күрһәтә алмаһағыҙ, бер ваҡытта ла һөҙөмтәле лидер буламаясаҡһығыҙ. Һеҙҙең идеалығыҙға тоғролоғоғоҙ тирә-яҡтағыларҙы тынысландырыу теләгенән көслөрәк булырға тейеш.

**Лидерҙың ҡыйыулығы артынан эйәреүселәрҙе илһамландыра.** "Ҡыйыулыҡ йоғошло, - тип раҫлай диндар Билли Грэм. - Ҡыйыу кеше үҙенең ныҡлығын күрһәткәндә уны уратып алыусыларҙың да умыртҡа һөйәктәре ныҒына". Теләһә ниндәй кешенең ҡыйыулығы башҡаларҙы ла ҡыйыуландыра. Әммә лидер күрһәткән ҡыйыулыҡ уның тирә-яғындағыларҙы ла илһамландыра, дәртләндерә. Ул кешеләрҙә етәксе артынан эйәреү теләген тыуҙыра. Джим Мелладо быға шундай аңлатма бирә: "Лидерлыҡ - кешеләрҙе дөрөҫ эшләргә мәжбүр итеүсе ҡыйыулыҡ сағылышы".

**Ҡыйыулығығыҙға пропорциональ рәүештә тормошоғоҙ ҙа үҙгәрә.** Ҡурҡыу лидерҙы сикләй һәм бығаулай. Уның ҡарауы, ҡыйыулыҡ ҡапма-ҡаршы һөҙөмтәгә эйә. Ул ишектәрҙе аса һәм уның иң күркәм һәм файҙалы үҙенсәлеге тап шунда ла инде. Шуғалыр, күрәһең, Британия диндары Джон Генри Ньюмен: "Ғүмерегеҙ ахырына етеүҙән түгел, ә ул бер ваҡытта ла башланмауҙан ҡурҡығыҙ", - тигән. Ҡыйыулыҡ беҙгә матур итеп башлау мөмкинлеген генә биреп ҡалмай, ә яҡшы киләсәк тәьмин итә.

Яҙмыш шаярыуы шунан бәрәбәр: тәүәккәлләргә ҡыйыулығы етмәгәндәр ҙә, тәүәккәлләүселәр ҙә бер үк күләмдә ҡурҡыу кисерә. Уларҙы бары тик бер генә нәмә айыра: мөмкинлектәрҙе файҙаланмаусыларҙы ваҡ ҡына мәсьәләләр ҙә борсой. Әгәр ҡурҡыуығыҙҙы һәм шикләнеүҙәрегеҙҙе еңергә теләһәгеҙ, мотлаҡ ошоларҙы иҫәпкә алығыҙ.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**



## 28 АПРЕЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
12.55 "Дело ваше..." (16+).
13.35 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Остров Крым" (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "В наше время" (16+).
16.10 "Они и мы" (12+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Контуженный, или Уроки плавания вольным стилем". Комедия (12+).
23.25 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.10 "Познер" (16+).
01.10 "Снежные псы". Комедия (12+).
03.00 Новости.
03.05 "В наше время" (12+).
04.00 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России".
06.35, 07.35, 08.34, 11.25, 14.20, 17.30, 20.30 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Шифры нашего тела. Смех и слезы".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
18.05 "Вести. Дежурная часть".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Склифосовский-3". Мелодраматический сериал (12+).
23.50 "Мир невыспавшихся людей".
00.55 "Девчата" (16+).
01.40 "Инспектор Лосев". Детектив. 1 серия.
03.05 "Закон и порядок-19". Сериал (16+).
04.00 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Замандаштар". Ғизетдин Ғәйнетдинов (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Хазина". Әҙһәм ҡурайы (6+)
15.00 "Рампа" (6+)
16.00 "Ағыла моң". Редик Ефремов (6+)
21.00 Роберт Юлдашев һәм "Ҡурайсы" төркөмө. Концерт (6+)
23.00 "Хит-парад" (6+)

### БСТ

07.00 "Сәләм!" (12+).
10.00, 11.15 Новости недели.
10.30, 15.30 "Гора новостей".
10.45 "Городок АЮЯ".
11.00, 00.15 "Замандаштар" (6+).
11.45, 02.00 "Королек - птичка певчая". Сериал (12+).
12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 18.30, 21.30, 22.30, 00.30 Новости.
12.45, 24.00 "Весело живем" (12+).
13.00 "Бәхетнамә".
13.45, 05.45 "Мелодии души" (12+).
14.45 "Көндәлек. Дуванский район" (6+).
15.15 "Бауырһаҡ".
15.45 "Физ-ра".
16.15 "Учим башкирский язык".
16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).
16.45 "КЛИО" (6+).
17.30 Новости культуры.
20.00 "Автограф. Назифа Кадырова" (6+).
20.45 "Полезные новости" (12+).
21.00 "Дознание" с Ильдаром Исангуловым (16+).
22.00 "Следопыт" (6+).

## 29 АПРЕЛЯ
## ВТОРНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
12.55 "Дело ваше..." (16+).
13.35 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Остров Крым" (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "В наше время" (12+).
16.10 "Они и мы". Ток-шоу (16+).
17.00 "Наедине со всеми". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Контуженный, или Уроки плавания вольным стилем". Сериал (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (12+).
24.00 Ночные новости.
00.10 "На ночь глядя" (16+).
01.05 "Секретные материалы: хочу верить". Триллер (16+).
03.00 Новости (12+).
03.05 "В наше время".
04.00 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России".
06.35, 07.35, 08.34, 11.25, 14.20, 17.30, 20.30 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
18.05 "Вести. Дежурная часть".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Склифосовский-3". Сериал (12+).
22.50 "Специальный корреспондент" (16+).
23.55 "Клиповое мышление".
01.00 "Честный детектив" (16+).
01.30 "Инспектор Лосев". Детектив.
03.00 "Пришельцы. История военной тайны" (12+).
03.55 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Замандаштар". Айрат Ғайсин (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Тәнзилә Үҙәнбаева. Концерт (6+)
21.00 "Кис ултырып". Юлиә Чигвенцова һәм Рафаэль Сәғитов (6+)
23.00 "Хит-парад" (6+)

### БСТ

06.30 "Полезные новости" (12+).
06.45, 11.00 "Замандаштар" (6+).
07.00 "Сәләм!" (12+).
10.00 "Круизы в мир открытий" (16+).
10.30, 15.30 "Гора новостей".
10.45 "Зеркальце".
11.15, 05.30 "Орнамент".
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).
11.45, 02.45 "Королек - птичка певчая". Сериал (12+).
12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).
12.45, 05.00 "Весело живем" (12+).
13.00 "Бәхетнамә".
13.45, 05.45 "Мелодии души" (12+).
14.45 "Хазина" (6+).
15.15 "Книга сказок".
15.45 "Борсаҡ".
16.00 "Йырлы кәрәҙ".
16.15 "Учим башкирский язык".
16.45 "Дорога к храму".
17.15 "Криминальный спектр" (16+).
17.30 Новости культуры.
18.45 "Телецентр" (на башк. яз.).
19.45 "Сәңгелдәк".
20.00 "Телецентр" (на русск. яз.).
21.00 "Мир настоящих мужчин" (12+).
22.00 "Уфимское "Времечко".

## 30 АПРЕЛЯ
## СРЕДА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
12.55 "Дело ваше..." (16+).
13.35 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Остров Крым" (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "В наше время" (16+).
16.10 "Они и мы" (12+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "ДОстояние РЕспублики. Валерий Леонтьев" (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.35 "Царство небесное". Приключения (16+).
03.10 "Дети Сэвиджа". Трагикомедия (16+).
05.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России".
06.35, 07.35, 08.34, 11.25, 14.20, 17.30, 20.30 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Тайная власть генов" (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
18.05 "Вести. Дежурная часть".
18.30 "Прямой эфир" (12+).
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Анютино счастье". Мелодрама (12+).
00.55 "Роковые числа. Нумерология" (12+).
01.55 "Инспектор Лосев". Детектив.
03.25 "Закон и порядок-19". Сериал (16+).
04.20 "Тайная власть генов" (12+).
05.15 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Замандаштар". Нурия Йәрмөхәмәтова (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Нәзифә Ҡадырова йырлай (6+)
20.00 "Көндәлек" (6+)
21.00 "Байыҡ". 2013й. (6+)
23.00 "Хит-парад" (6+)

### БСТ

06.30 "Полезные новости" (12+).
06.45 "Замандаштар" (6+).
07.00 "Сәләм!" (12+).
10.30, 15.30 "Гора новостей".
11.15, 17.15, 23.45 "Орнамент".
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).
11.45, 02.00 "Королек - птичка певчая" (12+).
12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).
12.45 "Весело живем" (12+).
13.00 "Бәхетнамә".
14.45 "Тәмле" (12+).
15.15 "Цирк в 13 метров".
15.45 "Семәр".
16.00 "Городок АЮЯ".
16.15 "Учим башкирский язык".
16.45 "Здоровое решение" (12+).
17.30 Новости культуры.
17.45 "Алтын тирмә".
18.45 "Телецентр" (на башк. яз.).
19.45 "Сәңгелдәк".
20.00 "Телецентр (на русск. яз.).
21.00 ФК "Уфа": даешь премьер-лигу!"
22.00 "Историческая среда".
23.00 Диспут-клуб "Пятый угол" (16+).
23.45 "Времен связующая нить" (6+).

## 1 МАЯ
## ЧЕТВЕРГ
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Моя любовь". Мультфильм.
06.35 "Безымянная звезда". Мелодрама.
09.05 "Россия от края до края" (12+).
10.00 Новости.
10.15 "Непутевые заметки" (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости.
12.15 "Высота". Мелодрама.
14.05 "Дети Дон Кихота". Мелодрама.
15.30 "Белые росы". Комедия (12+).
17.10 "Девушка без адреса". Комедия.
18.00 "Вечерние новости".
18.15 "Девушка без адреса". Комедия. Продолжение.
19.10 "Весна на заречной улице". Мелодрама.
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" (16+).
23.00 "Пингвины мистера Поппера". Комедия.
00.40 "Унесенные". Комедия (16+).
02.20 "Джошуа". Триллер (16+).
04.20 "В наше время" (12+).

### РОССИЯ 1

05.50 "По семейным обстоятельствам". Комедия.
08.40"Стряпуха". Комедия.
10.00 "Она не могла иначе". 1 часть. Мелодрама (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Disco дача". Весенний концерт (12+).
16.25 "Аншлаг и Компания" (16+).
20.00 "Вести".
20.35 "Врачиха". Драма (12+).
00.20 "Укрощение строптивого". Комедия (16+).
02.20 "Соломенная шляпка". Комедия.

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Замандаштар". Гүзәл Диникеева(6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Тиле йәшлек". Спектакль (6+)
16.00 "Башҡорт йыры". 2013й. (6+)
18.00 "Мөхәббәт һәм күгәрсендәр". Фильм (6+)
22.00 "Наҙлы яҙ". Концерт-дискотека (6+)
23.00 "Хит-парад" (6+)

### БСТ

06.30 "Полезные новости" (12+).
06.45 "Замандаштар" (6+).
07.00, 21.30 Новости.
07.15 "Доброе утро!"
08.15 "Озорная молодость" (12+).
10.00 "Гора рюкзаков". Концерт детского телеканала "Тамыр".
11.30 "Үткән ғүмер" (6+).
15.00 "Наши годы" (6+).
19.00 "Весело живем" (12+).
19.30 "Любовь и звезды". Муз. фильм (12+).
21.00 "Лото 6 из 40+ Джокер".
21.15 "Наука 102" (6+).
22.00 "В прекрасную пору" (6+).
22.45 "Весело живем".
23.00 "В 6 часов вечера после войны" (12+).
00.30 "Любви нет преград" (6+).
02.00 "Ашкадар тандары-2011" (0+).
02.30 "Звезды сцены". Творческий вечер Р.Загитова (6+).

## 2 МАЯ
## ПЯТНИЦА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.20, 06.10 "Фиктивный брак". Драма (16+).
06.40 "Золотой теленок". Комедия.
10.00 Новости.
10.15 "Пока все дома".
11.00 "К юбилею актера "Леонид Каневский. Непереводимая игра слов" (12+).
12.00 Новости.
12.15 "1001". Мелодрама (12+).
15.50 "Большая разница". Фестиваль пародий.
18.00 "Вечерние новости".
18.15 "Большая разница". Фестиваль пародий. Продолжение.
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" (16+).
23.00 "Король говорит!" Драма (16+).
01.10 "Все о Стиве". Комедия (16+).
03.00 "Звуки шума". Комедия (16+).
04.50 "В наше время" (12+).

### РОССИЯ 1

05.10 "Экипаж". Драма.
08.05 "Родня". Драма.
10.05 "Она не могла иначе". 3 часть. Мелодрама (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Майский дождь". Комедия (12+).
16.10 "Кривое зеркало" (16+).
18.05 "Юбилейный концерт Юрия Антонова".
20.00 "Вести".
20.35 "Врачиха". Драма (12+).
00.25 "Безумно влюбленный". Комедия (16+).
02.35 "Здравствуйте, я ваша тетя!" Комедия.

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Йома" (0+)
15.00 Илсур Тайсин. Концерт (6+)
17.00 "Замандаштар". Имам Хатиб Мөхәммәт Ғәлләмов (6+)
18.00 "Яҙым - көмөш, көҙөм алтын". Хәлисә Мөҙәрисова (6+)
21.00 "Картаямы ни ул йөрәк". Концерт (6+)
23.00 "Хит-парад" (6+)

### БСТ

06.00 "Мелодии души". Концерт (12+).
06.45 "Замандаштар" (6+).
07.00, 18.30, 21.30 Новости.
07.15 "Доброе утро!"
08.00 "Друг-гармонист". Спектакль (12+).
10.00 "Страна детства" (0+).
10.30 "Кукушкин чай". Муз. фильм (0+).
11.00 "Птица счастья" (12+).
18.00 "Йома" (0+).
19.00 "Весело живем" (12+).
19.15 "Ургала". Муз. фильм (12+).
21.00 "Попкорм". Светская хроника (16+).
22.00 "Дарман" (0+).
22.45 "Весело живем".
23.00 "Жди меня" (12+).
00.30 "Не теряйте надежды" (6+).
02.00 "Ашкадар тандары-2011" (0+).
02.30 "Желтоухий" (12+).
04.00 "Друг-гармонист". Спектакль (12+).

## 3 МАЯ
## СУББОТА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Орел и решка". Комедия (12+).
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Пока все дома".
11.00 "К 90-летию актера. "Донатас Банионис. Бархатный сезон" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Редкая группа крови". Мелодрама (16+).
18.00 "Вечерние новости".
18.15 "Редкая группа крови". Мелодрама. Продолжение (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" (16+).
23.00 "Парфюмер". Триллер (16+).
01.45 "Сайрус". Драма (16+).
03.20 "Восход тьмы". Фэнтези (12+).
05.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.50 "Мы с вами где-то встречались". Комедия.
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10, 11.10, 14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан".
08.20 "Военная программа".
08.50 "Планета собак".
09.25 "Субботник".
10.05 Программы ГТРК "Башкортостан".
11.00 "Вести".
11.20 "Поговори со мною о любви". Мелодрама (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Поговори со мною о любви". Мелодрама. Продолжение (12+).
15.35 "Субботний вечер".
17.50 "Юрмала". Фестиваль юмористических программ (12+).
20.00 "Вести".
20.35 "Акула". Драма (12+).
00.25 "Блеф". Комедия (16+).
02.25 "Горячая десятка" (12+).
03.35 "Планета собак".
04.05 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Замандаштар". Рәзифә Динмөхәмәтова (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Айгөл Һағынбаева. Концерт (6+)
16.00 "Имен-аман торайыҡ". Концерт (6+)
21.00 "Уятыр моңом булып кил". Гөлдәр Ишҡыуатова (6+)
23.00 "Хит-парад" (6+)

### БСТ

06.00 "Мелодии души" (12+).
06.45, 13.15 "Замандаштар" (6+).
07.00, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).
07.15 "Доброе утро!"
07.45 "Весело живем" (12+).
09.30 "Сәләм+" (12+).
09.45 "Көндәлек" (6+).
10.15 "КЛИО" (6+).
11.00 "Здоровое решение" (12+).
11.30 "Аль-Фатиха" (0+).
12.00 "Следопыт" (6+).
13.45, 18.15, 22.45 "Весело живем" (12+).
14.00 "Дарю песню". Концерт (0+).
16.00"Хазина" (0+).
19.00 "Башкорттар".
19.30 "Хазина" (6+).
20.00 "Сәңгелдәк" (0+).
20.15 "Еду я в деревню" (0+).
20.45 "Вопрос + Ответ = Портрет" (0+).
21.30 "Новости" (на русск.яз.).
22.00 "Башҡорт йыры-2014" (0+).
23.00 "Небесный тихоход" (12+).
00.30 "В минуты отдыха".
02.00 "Ашкадар тандары-2011" (0+).

## 4 МАЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Молодые". Мелодрама.
08.10 "Армейский магазин (16+).
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости.
10.15 "Пока все дома".
11.00 "К юбилею актрисы. "Татьяна Самойлова. "Моих слез никто не видел" (12+).
12.00 Новости.
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "Летят журавли". Мелодрама.
15.05 Филипп Киркоров. "Другой".
17.45 "Голос". Лучшее.
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" (16+).
23.00 "Любовь живет три года". Мелодрама (16+).
00.50 "Кокон: возвращение". Комедия.
03.00 "Мстители". Комедия (16+).

### РОССИЯ 1

05.15 "Мимино". Комедия.
07.20 "Вся Россия".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
11.00 "Вести".
11.10 "Смеяться разрешается".
12.40 "Иллюзия счастья". Мелодрама (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан".
14.30 "Иллюзия счастья". Мелодрама. Продолжение (12+).
17.00 "Один в один".
20.00 "Вести".
20.35 "Акула". Драма. (12+).
0020 "Бархатные ручки". Комедия (16+).
02.25 "Красавец-мужчина". Драма.

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Замандаштар". Рәдик Ефремов (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Әлфиә Әхмәтйәнова йырлай (6+)
15.00 "Рампа" (6+)
18.00 "Сүллектең аҡ ҡояшы". Фильм (+6)
22.00 "Юлдаш йыры-2010" (6+)
23.00 "Хит-парад" (6+)

### БСТ

06.15 "Весело живем" (12+).
06.30, 16.30 "Замандаштар" (6+).
07.00 Новости.
07.15 "Доброе утро!"
08.30 "Йома" (0+).
09.00 "Еду я в деревню" (0+).
10.00 "Бауырһаҡ" (0+).
10.15 "Городок АЮЯ" (0+).
10.30 "Гора новостей" (0+).
10.45 "Шәп арба" (0+).
11.00 "Сулпылар" (0+).
11.30 "Байтус" (6+).
11.45 "Алтын тирмә" (0+).
12.30, 21.30 "Новости недели".
13.00 "Тәмле" (12+).
14.00 "Дарю песню". Концерт (0+).
16.00 "Дорога к храму" (0+).
17.00 "Историческая среда" (0+).
17.30 "Орнамент" (0+).
19.30 "История признания" (12+).
19.45 "Позывной "Барс" (12+).
20.00 "Любимое дело" (12+).
21.00 "Лото 6 из 40+ Джокер".
21.15 "Деловой Башкортостан" (12+).
22.00 "Баик" (0+).

ИҒЛАН

Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына **вахтер**, "Д" категориялы **водитель**, **ашнаҡсы**, **балта оҫтаһы** талап ителә.

**8-927-939-31-75** телефоны буйынса Шайморат Азамат улына мөрәжәғәт итергә.

✔ *Ҡатын-ҡыҙ менән һәр ваҡыт ниндәйҙер осло мөйөшкә бәреләһең, сөнки ирҙәргә мөһим булғандар уларға кәрәкмәй - улар икенсе раса. Улар йә үҫемлек кеүек барыһын да бирә, йә таш һымаҡ тырнаша. (Джон Апдайк).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

**16-сы һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Динәхмәтов. Ғизетдинова. Сүллек. Тромб. Нәжми. Һылтама. Шланг. Дүртөйлө. Район. Ноғоманов. Аллея. Томбойоҡ. Шин. Трал. Бот. Танкетка. Хәйруллин. Покер. Торонбаш. Ҡибла. Маҙа. Арбағи. Синдром. Арбитр. Анчоус. Атакама. Үләт. Оперетта. Шәкәр. Авария. Шәүүәл. Напалм. Аҡса.

**Вертикаль буйынса:** Шлях. Һағынбай. Бабич. Труппа. Тракт. Мисс. Риал. Ғаса. Нарвал. Нарта. Дәүләтшин. Идеал. Мотор. Кришна. Хаин. Алым. Тыуа. Ғафаров. Арпа. Тавтология. Бант. Бандит. Томат. Аляска. Оҫта. Оҫтора. Тәбрик. Оромжа. Елкән. Йорт. Брынза. Ҡарама. Штанга.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Апрель айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Туймазы ҡалаһынан** Гөлмира Байбулатова, **Өфө ҡалаһынан** Лиә Ғүмәрова, Вадим Ҡунафин, **Ауырғазы районы** Мораҙым ауылынан Рәсимә Һатлыҡова, Сабир Ҡудашев, Ғәлимйән Бәхтигәрәев, **Мәләүез районы** Арыҫлан ауылынан Нәсимә Суҡбаева, Смаҡ ауылынан Айһылыу Смаҡова, Ғәлиә Татлыбаева, Һәргәй ауылынан Зилә Татлыбаева, **Мәләүез ҡалаһынан** Рәсилә Ниғмәтуллина, Гөлнара Татлыбаева, **Федоровка районы** Федоровка ауылынан Эльмира Ғәббәсова, **Күмертау ҡалаһынан** Рәсим Вәхитов, **Ейәнсура районы** Малай Муйнаҡ ауылынан Йәмил Аҡбашев, Фәнил Аҡбашев, **Баймаҡ районы** Ярат ауылынан Зәлифә Ҡасҡынова, Хәсән Юлғотлин, **Дүртөйлө районы** Шишмә ауылынан Ғәлимә Камалова, Бейектау ауылынан Эльмира Иҙрисова, **Илеш районы** Үрге Йәркәй ауылынан К. Насретдинова, **Әлшәй районы** Иҫке Сәпәш ауылынан Лидиә Маликова, **Стәрлетамаҡ районы** Ҡуғанаҡ ауылынан Әлфиә Дәүләтшина, Константиноградовка ауылынан Данис Урманшин, Марьевка ауылынан Йәмилә Суфиянова, Рощинский ауылынан Лилиә Кәримова, Стәрлетамаҡ ҡалаһынан Бүләк Ҡәйепҡолова, **Әбйәлил районы** Юлдаш ауылынан Әнүзә Шәрипова, **Йылайыр районы** Юлдыбай ауылынан Мәғзирә Иҫәндәүләтова, Фәйрүзә Ҡасимова, Исҡужа ауылынан Ғилмиә Усманова, **Хәйбулла районы** Аҡъяр ауылынан Мәрфуға Азаматова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас ҡотлайбыҙ һәм күңел тыныслығы, ныҡлы һаулыҡ, аҡ бәхеттәр теләйбеҙ. Яҙ миҙгелендә йөрәгегеҙгә тағы ла йәшәү көсө өҫтәлһен, барлыҡ изге ғәмәлдәрегеҙ үҙегеҙгә ырыҫ, ҡот булып әйләнеп ҡайтһын.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

## МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# АХИРӘТКӘ ИМАН

**"Был донъя тормошо - бәндәнең мәңгелектәге урынын билдәләүгә сәбәп булған имтихан", - тип өйрәтә дин.**

Әҙәм балаһының тормошон Аллаһ биш дәүергә бүлеп яралтҡан: беренсеһе - йәндәр донъяһы. Әле кешенең тәне юҡ, донъяға күҙен асмаған, ҡулдары эшләмәй, аяҡтары йөрөмәй, аталар арҡаһында орлоҡ хәлендә генә ул. Икенсеһе - әсәләр ҡарынындағы тормош; өсөнсөһө - фани донъя; дүртенсеһе - ҡәбер һәм... Бәрзәх - йәндәрҙең тәндән айырылып, Ахирәткә тиклем йәшәр төйәге; бишенсеһе - Ҡиәмәт көнөнән һуң йә Йәннәттәрҙә, йә Йәһәннәмдә йәшәр дәүер.

"Был донъя тормошо - күңел асыу менән уйын-көлкө, әгәр белер булһалар, һуңғы төйәгегеҙ - тормоштоң тап үҙе" ("Әл-Ғәнҡәбүт" ("Үрмәксе") сүрәһе, 64-се аят).

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1435 һижри йыл.*

| Апрель - Май (Йомадиәл ахыр - Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 28 (28) дүшәмбе | 5:16 | 6:46 | 14:30 | 20:12 | 21:42 | 23:12 |
| 29 (29) шишәмбе | 5:14 | 6:44 | 14:30 | 20:14 | 21:44 | 23:14 |
| 30 (1) шаршамбы | 5:12 | 6:42 | 14:30 | 20:16 | 21:46 | 23:16 |
| 1 (2) кесе йома | 5:09 | 6:39 | 14:30 | 20:18 | 21:48 | 23:18 |
| 2 (3) йома | 5:07 | 6:37 | 14:30 | 20:20 | 21:50 | 23:20 |
| 3 (4) шәмбе | 5:05 | 6:35 | 14:30 | 20:21 | 21:51 | 23:21 |
| 4 (5) йәкшәмбе | 5:03 | 6:33 | 14:30 | 20:23 | 21:53 | 23:23 |

*"Дини тәҡүим"дән алынды.*

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**27 апрелдә "Ҡыҙҙар моңо - моңо халҡымдың!"** исемле әҙәби- музыкаль кисә үтәсәк. Кисәлә шағирәләр **Тамара Ғәниева, Тамара Искәндәриә, Тәнзилә Дәүләтбирҙина, Зөлфиә Ханнанова, Гөлназ Ҡотоева, Лариса Абдуллина** үҙ ижады менән һөйөндөрәсәк. Тамашаның режиссеры - Хөрмәт Үтәшев. Башлана 19 сәғәттә.



**29 апрель "Йәнем, иртәгә яңы көн тыуыр"** (Я.Пулинович)

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**29 апрель "Чиполлино"** (Д.Родари), мажара. Башлана 11.00

**29 апрель "Париж егете Әлфәнис"** (Л.Вәлиев), комедия

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**29 апрель** Бейеү театры концерты. Халыҡ-ара бейеү көнөнә арнала

*✓ Ирсәйгәнгә ирсәй, башың күккә тейгәнсә, иңкәйгәнгә иңкәй, башың ергә тейгәнсә.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



АФАРИН!

# ШАЯРТА ТОРҒАС...

## оҫтаралар түгелме былар?



**Башҡорт милли юморын терғеҙеү, үҫтереү, башҡортса шаяртыу маҡсатын алға һөргән Башҡорт асыҡ КВН лигаһының финал уйындарын тамаша ҡылыусылар йәштәребеҙҙең илдәге һәр үҙгәрешкә ҡарата үҙ ҡарашы барлығына шаһит булды, тиһәк, яңылышмабыҙ. Уйында ҡатнашыусы һәр дүрт команда ысын сәхнә түренән башҡорт юморын яңғыратты, юғары кимәлдә сығыш яһаны.**

Финалда уйнау өсөн быйыл бөтәһе 17 команда көс һынашҡан. Шулар араһынан көсөргәнешле һайлап алыу турҙары аша үткән дүрт төркөм: Ейәнсура районы йәштәрен берләштереүсе "Бытбылдыҡ", БДУ-ның Сибай филиалынан "Еңмештәр", БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалынан "Страйк", Өфөнән тик бер генә кешенән торған "Кәкре сүкеш" командаһы сәхнәгә сыҡты. Элеккеләренән айырмалы, быйылғы ярыштан бер генә лә күңелһеҙ хәтирә ҡалмауы, уның ойошторолоу кимәле юғары булыуы, командаларҙың ныҡлы әҙерлеге, хатта "Урал Кәримов мөйөшкә баҫтырып ҡуйған вахтерҙың" да ҡағыҙға яҙылғандарҙы тасуири итеп уҡыуы күңелгә май булып ятты. Баһалама ағзаһы, язысы Зөһрә Бураҡаева фекеренсә, быйылғы финал уйындарында ҡатнашыусы командалар Александр Масляковтың КВН-ында сығыш яһарлыҡ кимәлгә күтәрелеүгә табан зур аҙым яһаған. Алдағы йылдарҙа әйтелгән иҫкәртеүҙәр иҫәпкә алынған, билдән түбән шаяртыуҙар "ҡыҫҡартылған", иң мөһиме, көнүҙәк ижтимағи-сәйәси проблемаларға арналған көләмәстәр өҫтөнлөк алыуы ла күҙгә ташлана.

Финал уйындарында икенсе урын яулаусы "Еңмештәр" командаһы был юлы тамашасының барлыҡ һынауҙарҙы лайыҡлы кимәлдә үтеүе ҡыуандырҙы. Уларҙың һәр хәрәкәте, һәр көләмәсе урынлы ине. Әммә, үҙҙәре әйтеүенсә, финал уйындарына тиклем "быт-быт-быт" тип килеп етеп, финалда "дыҡ!" итә торған холоҡтары булған "Бытбылдыҡ" командаһы "Музыкаль өйгә эш" ярышында Башҡортостандың халыҡ артисы Хөрмәтулла Үтәшев менән бергә уңышлы сығыш яһап, "Еңмештәр"ҙең танауына сиртеп ҡуйҙы. Әйтергә кәрәк, "Музыкаль өйгә эш" ярышы сиктәрендә сәхнәгә йондоҙ менән бергә сығыу шартын "Бытбылдыҡ"тарҙан да уңышлыраҡ файҙаланыусы булманы. Абруйлы актерҙың балерина юбкаһы кейеп, сәхнә инләп бейеп йөрөүен күреү күптәр өсөн көтөлмәгән хәл шул. Командалар менән бергә сығыш яһарға ризалашыусы Вәхит Хызыров, Венер Камалов, Заһит Күнафин, Заһир Ишкинин, Рәил Өмөтбаев та уйынға ниндәйҙер яңылыҡ индерҙе, мәртәбә өҫтәне.

Уйын аҙағында "Тамыр" балалар һәм үсмерҙәр телеканалы режиссеры Ләйсән Мәзитованан финал уйындарына һығымта яһап китеүен үтенгәс, ул: "Күңелемдә халҡым өсөн ғорурлыҡ хисе кисерҙем. Беҙҙең йәштәр бөтәһенең дә танауына сиртә ала - уларҙа ташып торған дәрт, дарман, рух бар. Артабан да Башҡорт асыҡ КВН лигаһы ошо темп менән эшен дауам итһә, иманым камил, өҫтә ултырыусылар ҙа уларҙың фекеренә ҡолаҡ һала башлар, тип уйлайым", - тигән ышаныс белдерҙе. Башҡорт асыҡ КВН лигаһының финал уйындары ошолай тамаланды: I урын - "Бытбылдыҡ", II урын - "Еңмештәр", III урын - "Кәкре сүкеш", IV урын - "Страйк" командаһына бирелде.

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЕРЕН ҺАТЫП ЭСКӘН...

## ҡол хәленә төшкән

Ирсәйгәнгә ирсәй, башың күккә тейгәнсә, иңкәйгәнгә иңкәй, башың ергә тейгәнсә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Әгәр ҙә һинең нимәңдер юҡ икән, әйләнә-тирәңә бер байҡап ҡара: хыялының бар ете ҡатына ла өлгәшкән бер генә кешене таба алырһыңмы?

**(Билдәһеҙ кеше).**

Ҡатын-ҡыҙ менән һәр ваҡыт ниндәйҙер осло мөйөшкә бәрәләһең, сөнки ирҙәргә мөһим булғандар уларға кәрәкмәй - улар икенсе раса. Улар йә үсемлек кеүек барыһын да бирә, йә таш һымаҡ тырнаша.

**(Джон Апдайк).**

Кешенең ҡылыҡтары, үсешә барып, аламаға әйләнеп китеүе лә бар.

**(Аристотель).**

Әгәр ҙә ниндәйҙер бөйөк кешегә үҙенең уйҙарын барыһына ла асып һалыу мөмкинлеге бирелһә, беҙ уны күптән асып ҡуйыр инек.

**(Джорд Шоу).**

Үҙеңдең киләсәгеңдән йөҙ борма, башта унда һин һабаҡ ала алырҙай нәмәләр буласаҡмы, юҡмы икәнен инан.

**(Ричард Бах).**

Йөҙөң булыу мотлаҡ түгел, тоймолай алыуың еткән.

**(Станислав Лец).**

Ҡунаҡсыллыҡ - ул тәүтормош ябайлығын һәм антик бөйөклөктө бергә ҡушып булдырылған сифат.

**(Сара Бернар).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ваҡыт Сократҡа уҡыусыһы килә һәм шундай һорау бирә:**

**- Хөрмәтле Остазым, бына мин йәшмен һәм матурмын, һәм мин бер ҡыҙға ғашиҡ булдым. Ул да мине ярата. Мин, Остазым, һәр ваҡыт Һеҙҙе хөрмәт иттем һәм донъялағы иң аҡыллы кеше булараҡ, һеҙҙән өлгө алдым. Әммә һеҙ бер ваҡытта ла өйләнмәгәнһегеҙ һәм ҡатын-ҡыҙҙар менән аралашмайһығыҙ ҙа. Шуға ла мин ҡаушап ҡалдым: ни эшләргә миңә - өйләнергәме, юҡмы?**

**- Иң мөһиме, балыҡҡа оҡшамаҫҡа тырыш, - ти Сократ. - Балыҡ иректә йөҙөп йөрөй-йөрөй ҙә, йылымға ынтыла, унда барып эләккәс, ирекә сығырға тыпырсына...**

**- Ә шулай ҙа миңә ни эшләргә?**

**- Нимә генә эшләһәң дә, ниндәй генә ҡарар ҡабул итһәң дә, барыбер үкенәсәкһең, - тип һығымта яһай Сократ".**

ӘСӘЙЕМ ЛӘҒӘТЕ

# БАЙЛЫҠТЫ ФАЙҘАЛАНАЙЫҠСӘЛЕ

**Сыйҙым** - көҙгө һыу өҫтөндә туңа башлаған ҡар ҡатыш боҙ; шыя.

**Сығанаҡ** - ер аҫтынан тәбиғи рәүештә һыу сығып ятҡан урын.

**Болаҡ** - бәләкәй йылға.

**Сол** - бәләкәй йылға.

**Күҙләүек** - бәләкәй генә шишмә.

**Күләң** - йылғаның ҡамалып ҡалған ҡолағы.

**Монтар** - аҡмай ятҡан ҡыуҙа барлыҡҡа килгән бысраҡ.

**Тойоҡ** - йылғаның яй ғына ағып, төбө тәрән батҡаҡ булып кисеү бирмәй ятҡан ере.

**Кәүсәр** - ожмахтағы һыуы татлы күл.

**Зәмзәм** - Мәккәлә Кәғбә янындағы һыуы изге, шифалы ҡоҙоҡ.

**Ҡойо** - шишмә.

**Ҡоҙоҡ** - һыу алыу өсөн ҡаҙып, бура төшөрөп эшләнгән соҡор.

**Мәке** - боҙға уйылған тишек.

**Йәш ҡар** - яңы яуған ҡар.

**Күбәләк (ябалаҡ) ҡар** - эре күҙле йомшаҡ ҡар.

**Ала ҡар** - ҡар ирееп, урыны-урыны менән ер асыла башлаған яҙғы мәл.

**Аҙау ҡар** - оҙаҡ ятҡан ҡар.

**Ҡар күҙе тишелеү** - тамсы тамып, ҡар ирей башлау.

**Ҡаңтар** - көҙгә ҡырпаҡ ҡар миҙгеле.

**Иҙел** - ағып ятҡан ҙур һыу; йылға.

**Дарья** - сиге күренмәгән ҙур һыу; бик ҙур йылға.

**Кисеү** - һыуҙың кисеп аша сығып йөрөй торған һай урыны.

**Керәкә** - үлән, мүк баҫҡан күл.

**Күл ягаһы** - күл башындағы яр буйы.

**Ҡултыҡ** - һыуҙың ҡоро ергә инеп торған өлөшө.

**Ҡумырыҡ** - яр йәки тамыр-томор төбөнә өңөлөп ингән һыу аҫты ҡыуышлығы.

**Ҡумшырыҡ** - яр төбөндәге тәрән һыу аҫты соҡоро.

**Ҡара һыу** - боҙ киткәндән һуң ташып аҡҡан көслө һыу.

**Ҡаран** - *1)* туңмай ағып ята торған шишмә йәки бәләкәй йылға. *2)* һыуҙың йылылап туңмай ятҡан ере.

**Ҡаты һыу** - татырлы һыу.

**Туфан һыуы** - Әҙәмдәрҙең гонаһы өсөн ер йөҙөн баҫа торған ташҡын һыу; көслө ташҡын.

**Һары һыу** - яҙ көнө ирей башлаған мәл.

**Һыуһаҡ** - һыу йыйып һаҡлау өсөн быуылған урын; быуа.

**Һыулау** - һыу буйының көтөү төшөп ята торған урыны.

**Бәҫ** - саҫҡау һыуыҡта ағасҡа йәки башҡа нәмәгә өрпәк кенә булып ҡуна торған ҡырау.

**Быуаҡ** - тәҙрәгә һәм башҡа нәмәгә ҡунған дым, бөрсөк-бөрсөк тир; быу.

**Илдар ҒӘБИТОВ.**
**(Дауамы бар.)**


1 582218 911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 25 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5153
Заказ 1326